Роберт Ғимранов

# Курсант моңдары



Роберт Ғимранов

# Курсант мондары

Аскар — 2007

**ББК**
**84 (2 Рос-Баш) – 44**
**Ғ 35**

**Ғимранов Р. Һ.**
**Курсант моңдары: шиғырҙар, мәҙәк хикәйәләр.**

*Китаптың авторы утыҙ өс йыл Таштимерҙәге 93-сө һанлы һөнәрселек-техник училищеһында "Автомобилдәр һәм тракторҙар" фәне буйынса уҡытҡан. Шуға күрә йыйынтыҡтың "Курсант моңдары" тип аталыуы тәбиғи. Унда тупланған шаян шиғырҙарҙа, мәҙәк хикәйәләрҙә һүҙ башлыса училищела төрлө йылдарҙа уҡыған йә эшләгән кешеләр, улар осраған мажаралы хәлдәр тураһында бара. Хикәйәләрҙең сюжеттары барыһы ла тормоштан алынған, Әбйәлил районы, айырыуса Таштимер тирәһендәге ауылдар ерлегендә бара.*

— Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, әшриәт һәм полиграфия буйынса идаралыҡтың "Искра" редакция-нәшриәт омплексы" дәүләт унитар предприятиеһы, Асҡар; 2007 йыл, 143 бит — 200 дана.



## *Мөхәббәт япраҡтары*

Йөҙө ҡараларҙың эсе ҡара.
Ҡараларҙың уйҙар ҡарая.
Гүзәллеккә һәм дә тоғролоҡҡа,
Саф хистәргә күңел тарая.

Ҡара кешеләргә һөйөү ҡунһа,
Эсе-тышы бик тиҙ таҙара.
Һөйөүҙәрҙән улар сәскә ата,
Өмөт-ниәттәре ағара.

Ҡара тышлы булһа ла дәфтәрем,
Биттәренә теҙҙем аҡ һүҙҙәр.
Һәр бер бите — мөхәббәт япрағы,
Һөйөнһөндәр уҡыған күҙҙәр.

***1987 йыл,***
***Әбйәлил ҡасабаһы.***

## *Күршелә генә*

Күршелә генә һөйгәнем,
Осрашабыҙ йыш ҡына.
Әйләнгән һайын күрмәһәм,
Түҙмәй йөрәк, ашҡына.

Иртә менән шишмәгә
Һөйгәнем һыуға китә.
Таң ҡояшы кеүек кенә
Тәҙрәмә көлөп үтә.

Ямғыр яуып үткән төҫлө,
Күңел асылып китә.
Эскән атты һуғара китәм,
Йүгертеп өтә-өтә.

Эшкә лә бергә барабыҙ,
Көмөш ысыктар кисеп.
Эштән һуң да оҙатамын
Өйөнә тиклем үҙен.

Һөйҙөм инде сибәрҙе,
Әллә эштә уңғанға,
Әллә инде якын күреп,
Күрше генә булғанға!

*1958 йыл,*
*Салауат ауылы.*

## Әйт, коҙаса...

Коҙаса, һинең серҙәшең
Яҙғы гөл кеүек кенә.
Һорғолт күҙҙәре ынйылай,
Үткер, яғымлы йымылдай,
Эштә теремек кенә.

Япрактағы тамсы кеүек,
Алһыу бите һипкелле.
Әгәр күрһәм серҙәшенде,
Яндыра йөрәгемде,
Ғашик булдым, шикелле.

— Әйт, коҙаса, серҙәшеңә,
Коҙаса булайык, — тип, —
Минең коҙам алтын суктай,
Әйткән һүҙе аткан уктай,
Һинә торорлок, — тиеп.

*1959 йыл.*
*Дәүләт ауылы.*



## Беренсеһен һөйгәнмен

Йәшел болонда ике кыҙ
Еләк тиреп ултыра.
Береһе зәңгәр, икенсеһе
Алһыу силәк тултыра.

Тулып тора силәге лә,
Ай-һай, бешкән еләге.

Икәүһе бер сук еләктәй,
Бигерәк нурлы йөҙҙәре.
Ә фермала — эш өҫтөндә
Ишетелмәй һүҙҙәре.

Янып тора күҙҙәре лә,
Парһыҙ микән үҙҙәре?

Эштән һуң икеһе лә
Сибәрҙәр укый икән,
Бар укырға, икенсеһен
Әгәр ҙә тотам тиһәң.

Беренсеһен бирмәҫмен,
Сәсте-сәскә үргәнмен.

*1959 йыл.*
*Дәүләт ауылы.*

## Көрән сәскә

Көрән сәскә яна кұҙҙай,
Тәҙ(е)рәң төпкәйендә.
Йөрәгем тибә сығырҙай,
Өҙөлөп көткәнемдә.

Күрән ҡуҙҙар ҙа һүрелә,
Һин тәҙрәндә күренһәң.
Тәҙрәң ҡояштай күренә,
Әгәр йылмайып көлһәң.

Ҡуҙҙай балҡып күрән сәскә
Йөрәгемде ярһыта.
Тынысланһам ғына көскә,
Һөйөүемде яңырта.

***1980 йыл.***
***Феодосия, Ҡырым.***

## Байраҡһың

Йәшел күлдәгеңдә һин йәйгә хас,
Нәҡ бүләк һин, кейһәң аҡ күлдәк.
Кейһәң һарыларын, мин һарғаям,
Ҡара кейһәң, ҡарая йөрәк.

Сәскәлеһен кейһәң, һөйөү сәсәң.
Ҡанатлыһын кейһәң — осорлоҡ.
Ҡускарлыһын кейһәң — күстәнәс һин,
Алмалыһын кейһәң — ашарлыҡ.

Әгәр кейһәң зәңгәр күлдәгеңде,
Зәңгәр күктән айыр(а)лмаҫһың.
Минең йөрәгемде әйҙәгәндәй,
Ҡыҙыл күлдәк кейһәң — байраҡһың!

Ниңә төрлө-төрлө күлдәк кейеп,
Йәйгор төҫтәренә инәһең?
Күңелемде һап-һай күлдәй күреп,
Теләгәнсә уйнап йөҙәһең?

***1987 йыл.***
***Әбйәлил ҡасабаһы.***



## Ҡоҙалар

Саған ағастары ла сабырһыҙ:
— Ҡауышығыҙ, — тиеп көсләйҙәр...
Тик һин юҡһың, ә бит мөхәббәтһеҙ
Хатта сағандар ҙа үҫмәйҙәр.

Сирень сәскәләре лә серләшә.
Улар әллә серҙәр баҡсаһы?
Серләшәйек, серҙәр ҡауыштыра,
Сер ул — мөхәббәттең һаҡсыһы.

Ҡайындар ҙа һағышланып ҡына:
— Ҡауышығыҙ, — тиеп торалар.
Сыҡ һин бөгөн, бәғрем, ҡауышайыҡ.
Саған, сирень, ҡайын — ҡоҙалар!

***1987 йыл.***
***Әбйәлил ҡасабаһы.***

## Икәү генә
**(Хат)**

Осҡан йондоҙҙарҙы йыйҙым,
Һибергә юлдарыңа.
Үрмәле гөлдәрем дә бар,
Үрергә һындарыңа.

Айҙы ла ҡыялап ҡырҡтым,
Һары алъяпҡыс тегергә.
Ҡояштан да нур һораным,
Һине нурға күмергә.

Тамуҡ аша баҫма һалдым,
Сығырбыҙ етәкләшеп.
Ожмахҡа ла keләм йәйҙем,
Ултырырбыҙ гәрләшеп.

Сәнгелдәк тә элеп куйҙым
Өйөмдөң мөйөшөнә.
"Рәхим ит", — тип яҙып куйҙым
Йөрәгем ишегенә.

Күгәрсен һөтөн дә таптым,
Бергәләшеп эсербеҙ.
Һөйөүҙе лә төйҙөм йыйып,
Икәү генә сисербеҙ.

*1987 йыл.*
*Әбйәлил касабаһы.*

## Һыу түгел

Төндә төңөлгәнсе көтәм,
Эңерҙә эрегәнсе.
Көтәм тандарҙа талғансы,
Йондоҙҙар һүрелгәнсе.

Һыуыкта көтәм туңғансы,
Эҫелә ирегәнсе.
Онотторам, тип уйлама,
Өндәшмәй йөрөгәс тә.

Өс көн инде һин сыкмайһың,
Һөйөү артты өсләтә.
Күрешмәй ун биш көн торһаҡ,
Артыр ул ун бишләтә.

Һүрелдерәм, тип маташма,
Нык һөйгән сабыр була.
Ысын мөхәббәт һыу түгел,
Түгелгән һайын тула.

*1985 йыл.*
*Әбйәлил касабаһы.*



## Һинән генә...

Исемеңде кыскыраһым килә,
Күк күкрәүҙәренә кушылып.
Йә булмаһа, ултыраһым килә,
Һине уйлап, көтөп, бошоноп.

Йөҙкәйеңде балкытаһым килә,
Йәшен йәшнәгәндәй сағылып.
Йә булмаһа, балкыған йондоҙҙан
Кыҙғанаһым килә, һағынып.

Юлдарыңа түшәләһем килә,
Ямғыр тамсыһындай һибелеп.
Һинән генә һөйөләһем килә,
Йәмле йәйғорҙарҙай күренеп.

*1987 йыл.*
*Ленинград калаһы.*

## Нөктәһе юлдарымдың

Күҙ нурҙарың күҙ алдымда,
Һағынам көләүеңде,
Өҙөлөп һөйөүеңде.
Һиҙәмен кан тамырымда
Йүгереп йөрөүеңде,
Иркәләп һөйөүеңде.

Һаман тере устарымда
Уттары кулдарыңдың,
Йылыһы буйҙарыңдың.
Тирбәләләр косағымда
Нуры толомдарыңдың,
Шәүләһе һындарыңдың.

Ҡаҙалғандар күнелемә
Яңғыҙ ялығыуҙарың,
Әрнеп һағыныуҙарың.
Уйылғандар йөрәгемә
Көтөп зарығыуҙарың,
— Ҡайт, — тип ялыныуҙарың.

Сығанаҡ һин баштарында
Эсәһе һыуҙарымдың,
Йырлайһы йырҙарымдың.
Нөктәһе һин остарында
Йәшәйһе йылдарымдың,
Ҡайтаһы юлдарымдың.

***Воронеж ҡалаһы.***

## *Капҡан да яҙлыҡҡан...*

Ниңә ҡыр ҡаҙҙары ҡырға оса?
Ниңә ҡырын һүҙҙәр телдәрҙә?
Ниңә ҡыйғас айҙа ҡырын ҡарай
Һин ҡырын ҡараған көндәрҙә?

Ниңә ҡыйыу ҡыйғыр ҡаушап оса?
Ниңә ҡыйғас ҡамыш күлдәрҙә?
Дүрт яғыма ҡоймалар ҡорола
Һин ҡырын ҡараған көндәрҙә...

Уҡҡайҙарым ниңә ҡыйыш оса?
Ҡылыйланды микән күҙҙәр ҙә?
Ҡарғай коштар, ҡыялана ярҙар
Һин ҡырын ҡараған көндәрҙә...

Ниңә ҡауҙылар* ҡарыуһыҙ оса?
Ҡапҡан да яҙлыҡҡан өңдәрҙә.
Ҡармаҡ һалһам да ҡапмай, ҡарпымай
Һин ҡырын ҡараған көндәрҙә...

*Ҡауҙы — аист.



Ҡоҙғон да күктән күҙләй ҡойонтоно**,
Уйнай ҡойон, ҡойо — түрҙәрҙә.
Дүрт яғымдан юлдарым ҡыйыла
Һин ҡырын ҡараған көндәрҙә...

Ниңә ҡарлуғастар ҡыйып оса?
Ҡыйыр өлөшөм дә. Нишләргә?
Уйҙар ҡыяҡ, өмөтөм ҡырыла,
Бер һөйөлмәй нисек йәшәргә?

***2003 йыл.***
***Әбйәлил ҡасабаһы.***

* * *

— Ҡайтайым, — тинең дә ҡайтып киттең,
Мөхәббәтҡәйемде ҡаушатып.
Һөйәмен тинең дә ташлап киттең,
Зарығыуҙарыма ҡушлатып.

— Һөйәмен, — тинең дә, үҙең көлдөң,
Күңелкәйҙәремде йомшатып.
— Килмәйем, — тинең дә, үҙең килдең,
Һағыныуҙарымдан бушатып.

Гел йығаһың теләккәйҙәремде,
Үҙәкһеҙ ағаска оҡшатып...
Әрнетәһең үҙәккәйҙәремде,
Бөтөрмәй фекерҙә ослатып.

Шулай һәр саҡ өмөткәйҙәремде
Бер тултыраһың да бер түгәһең...
Ниңә улай бәхеткәйҙәремде
Берҙе ялғайһың да бер өҙәһең...
гел өҙәһең...

***2003 йыл.***
***Әбйәлил ҡасабаһы.***

**ҡойонто — падаль.

## *Алсаҡҡынам*

Асыуланма, иркәм.
Күҙ нурҙарың ҡайтыр,
Һыуһыҙ көйгән гөлдәй һулыма.
Кемдән нурҙар алып
Нурланырмын,
Кем нур-күпер һалыр юлыма?

Асыуланма, иркәм.
Көләс йөҙөн уңыр,
Һары һалам һымаҡ ҡалырһың.
Кемгә һоҡланырмын,
Кем яндырыр,
Кемде һөйөп, илһам алырмын?

Асыуланма, иркәм.
Төҫкәйҙәрең касыр,
Күңел биҙәктәрең юйылыр.
Кем мине биҙәклә
Кем етәкләр?
Һөйөүҙәрем сатнап ҡойолор.

Асыуланма, иркәм.
Алһыу, алсаҡҡынам.
Асыуҙарҙан оса ҡобара.
Көйгәк көйһә ныгый,
Ҡайышлана,
Алсаҡ асыуҙарҙан ҡыуара.

Асыуланма, иркәм.
Һытма сырайыңды,
Маңлайыңды уяр һыҙаттар.
Сабырлылыҡ, сафлыҡ,
Һөйкөмлөлөк —
Мөхәббәттә иң аҡ
маяҡтар!

***1987 йыл.***
***Әбйәлил ҡасабаһы.***



## *Бер тамырҙан*

Һинә ауыр саҡта терәк булып,
Терһәгемде терәй алманым.
Күҙең тулы әсе йәште күреп,
Күкрәгемдә илат(а)лманым.
Тормош ғазабында яңғыҙ яндың,
Тамсылай ҙа тама алманым.
Яҙғы ҡояш нурҙарында көйөп,
Кипкәнеңдә һыу ҡоя(а)лманым.
Нәфрәтләнеп һыуҙай ташҡаныңда,
Тотоп торор яр бул(а)лманым.
Һөйөүҙәрең ташып урғылғанда,
Һөйәнгәндәй йәр бул(а)лманым.
Ҡараңғыла тоташ юлһыҙ ҡалдың,
Етәкләп тә бара алманым.
Татлы ҡурай еләгендәй бештең,
Ваҡытында өҙөп тә алманым.
Өҙгөләнеп танда йоклап киттең,
Ишек шаҡып уят(а)лманым.
Яңғыҙлыктан яманһыуланһаң да,
Ҡуйынымда йыуат(а)лманым.
Көнкәйҙәрең үткәндер тамуқта,
"Хуш бул" тип тә китә алманым.
Сөнки беҙ бит, бәғрем, бер тамырҙан,
Мин һурылғас, һин дә ҡалмаһың.

***1958 йыл.***
***Хәмзә ҡалаһы, Үзбәкстан.***

## *Терегөмөш тамсылары*

— Һинә уралаһың, — тип һин көймә.
Ер ҙә урай ҡояш тирәләй.
Яҙ ҙа уралана йылына бер,
Аҡкоштар ҙа урап киләләр.

— Ниңә ялтырайһың, — тип ҡарама.
Көмөш ялтырамай йышмайса.
Уттар ҙа бит янмай ялтырамай,
Емеш бешмәй сәскә коймайса.
— Ниңә уйлана был, — тип уйлама.
Бер мәсьәлә сиселмәй уйһыҙ.
Уйһыҙ үтеләләр ҡайһы юлдар,
Шуға күп уй ослана туйһыҙ.
— Ниңә ялҡытаһың, — тип тиргәмә.
Һыу гел аға, ярын ялҡытмай.
Ят йәрҙән ялҡ, үҙ йәрендән ялҡып,
Калма ярҙа яткан балыктай.
— Ниңә һөйәһен, — тип ҡыҙыҡһынма.
Күҙ ҡараһы булмай керпекһеҙ.
Таңдар атмай, ҡояш калкмайынса,
Кая таштар булмай бөркөтһөҙ.
— Ниңә тартылаһың, — тип һорама.
Йыр тартыла йырсыларына.
Хатта тартылмайса ҡауышмайҙар
Терегөмөш тамсылары ла.

*1987 йыл.*
*Әбйәлил ҡасабаһы.*

## Өмөт

Ап-аҡ ҡар ҙа эҙҙәреңә,
Юҡ, яу(а)лманы.
Алсаҡ яҙ ҙа йөрәгемә
Юл таб(а)лманы.

Зарығыуҙар йәмле йәйҙә
Бушҡа үтмәне.
Һары япраҡ та күңелгә
Осоп төшмәне.



— Ҡыҫҡарт көткән көндәренде, —
Тип өгөтләнең.
Матурланың төштәремде,
Өндә өмөтләнең.

Йылдың дүрт миҙгеле үтте,
Шул ай, шул ҡояш.
Һағыныу ҡатланып бөттө,
Кайт, донъя ҡораш.

— Түҙгәнгә түш, — тейҙәр күптәр...
Бына бит ҡайттың.
Шулай тормош сабырлыны
Мендерә атҡа.

*1995 йыл.*
*Әбйәлил ҡасабаһы.*

## Килмәйһең...

Төнгө күккә ҡарап, йондоҙҙарҙың
Һиңә оҡшағанын эҙләйем.
Табып һиндәй балкыған йондоҙҙо,
Таңғы тулы айға тиңләйем.

Болондарға сығып сәскәләрҙең
Һинең төҫләләрен эҙләйем.
Һинең кеүек сәскә өҙөп алып,
Түштәремә ҡаҙап биҙәйем.

Ҡояш һипкәс яғымлы нурҙарын,
Һиндәй йылы нурҙар эҙләйем.
Табып һиндәй йылы, йомшаҡ нурҙар,
Билдәремә урап иҙрәйем.

Һандуғастың яҙғы моңдарынан
Һиндәй моңлоларын эҙләйем.
Мәрйен кеүек күркәм һүҙҙәр теҙеп,
Һиңә бағып көйҙәр көйләйем.

Шаулап үҫкән мөһабәт урмандан
Һиндәй аҡ ҡайынды эҙләйем.
Таптас, наҙлап унын остарына
Алһыу таҫма суклап бәйләйем.

Шатланышып осһа ҡарлуғастар,
Ҡыйып осҡандарын эҙләйем.
Һинең ҡыйғас ҡара ҡаштарыңда
Ҡарлуғастың юлын күҙләйем.

Тормоштағы юлдар селтәренән
Килер һуҡмағыңды эҙләйем.
Табып, ҡыуаныстан ул һуҡмаҡҡа
Аҫыл таштар теҙмәй түҙмәйем.

Һыуҙа йөҙһәм, һыу тамсыларында
Һиндәй күләс йөҙҙө эҙләйем.
Күҙгә йыйып тере тамсыларҙан,
Ҡарап биҙәнһен тип теләйем.

Дүрт яғым ҡибла, тик һин етмәй,
Һиндәй матур йәмдәр эҙләйем.
Йәнһеҙ йәмдәр йәмһеҙ, нинә килеп,
Йәмдәренә йәндәр бирмәйһең?

Көнө-төнө һыуҙа, ерҙә, күктә
Ат ашатмай һине эҙләйем.
Сак Суғын саҡырып моңайғандай,
Мин моңаям, нинә килмәйһең?

***Ленинград ҡалаһы.***



## *Баймағыңды килтерәм*

Теләйһеңме?
Тулы айҙы
Итәгеңә төшөрәм.
Ризаһыңмы?
Ҡуянтауҙы
Мин баҡсаңа күсерәм.
Янаһыңмы?
Талкаҫ күлен
Түштәреңдән кистерәм.
Һыуһайһыңмы?
Мең сәскәнең
Һутын йыйып эсерәм.
Көтәһеңме?
Таналыҡҡа
Бер минутка сумайым,
Керпектәреңә
Теҙергә
Ынйылар сығарайым.
Күрәһеңме?
Мин йәйғорҙо
Ҡосағымда үҫтерәм,
Ә бер осон күпер итеп,
Тәҙ(е)реңә төшөрәм.
Килешерме?
Ҡояш нурын
Билдәреңә ураһам.
Инәһеңме?
Йондоҙҙарҙы
Ҡыуыш итеп ҡораһам.
Теләйһеңме?
Аҡкош тотоп,
Арҡаһынан һөйҙәрәм.
Түйҙарына
Аҡ болоттан
Күлдәк тегеп кейҙерәм.
Менәһеңме?
Ирәндекте

Мин күтәреп килтерәм.
Йөҙәһеңме?
Һаҡмарыңды
Бында йырып төшөрәм.
Киләһеңме?
Ҡар яуғанда
Пар аттарҙы ектерәм.
Теләйһеңме?
Баймағыңды
Әбйәлилгә килтерәм.
Һөйәһеңме?
Йөрәгемде
Күкрәгеңә күсерәм.
Булырһыңмы
Һин сәскә,
Мин гөл-бакса үҫтерһәм?..

*1987 йыл.*
*Әбйәлил ҡасабаһы.*

## Мин һинһеҙ

Күрмәгәндәр эҙләй,
Һөймәгәндәр белмәй
Үкенеүҙәр тулы күкрәкте.
Тура барһаң түҙмәй,
Урап үтеп булмай
Һиңә ғашиҡ булған йөрәкте.

Һыуға барғанында,
Сығып юлдарыңа,
Ап-аҡ таштар теҙҙем төшөмдә.
Буйың-һының зифа,
Һағынғандан шифа,
Бетеү төҫлө торам түшемдә.



Саҡма таштай саҡкас,
Осҡондарың осто,
Тик янманың, ялтлап юғалдың.
Дауылдарҙан ҡуркмай,
Тулҡындарҙы үтмәй,
Ниндәй ҡая ташҡа юлыктым?

Осоп барырлыҡ та,
Хаттар яҙырлыҡ та
Түгел ара яҡын, ныҡ яҡын.
Хистәрем дә алтын,
Йөрәгемдә ялҡын,
Тик һин генә һалкын, ныҡ һалкын.

Изге ниәттәрем
Һиңә кәрәкмәне,
Тәҙ(е)рәң дә микән королдо...
Кипкән йылға яры
Һымаҡ ҡалдым тағы,
Һөйөү һуткайҙарым һурылды.

Ыласындар оса,
Һөйгәндәрен ҡоса,
Тик минең ҡанатым ҡағынмай.
Һыҙландырған да һин,
Наҙландырған да һин,
Бер көн түҙмәм һине һағынмай.

Минең күбәләгем
Эҙләй түңәрәкте,
Биҙәктәрен һинең күңелдең.
Күбәләктәр ҡунып,
Сәскәләр ҙә тулды,
Тик һин генә тулмай түгелдең.

Көтөүҙәрем һине
Бығауланы мине,
Өмөт сылбырҙарым һүтелмәй.
Телгеләнә телем,
Өҙгөләнәм үҙем,
Ҡалды ярты юлым үтелмәй.

Һөйкөмһөҙлөк, иркәм,
Һөймәгәнгә һөйкәп,
Йәнгә яға ҡара һағыштар.
Хисемә хис үрмәй,
Әрнеүҙәрем сырмай,
Ҡош ҡунмаған ҡып-ҡыу ағастай.

Арып-талыуҙарым,
Тағы бағыуҙарым,
Танһығымдың ҡанмау билдәһе.
Йөрәгемде уйып,
Япрағымды ҡойҙоң,
Һөйөүҙең бер ҡалды һөлдәһе.

Мөхәббәтем көйрәй,
Күҙем көмөш күрмәй,
Йондоҙҙарым оса түбәнгә.
Күргәндәргә һин — төш,
Түҙгәндәргә һин — түш,
Түҙәм, насип булһаң түҙгәнгә.

Күк арғымаҡ менеп,
Күп сибәрҙәр күреп,
Гиҙҙем изге эҙҙәр таратып.
Тик һин генә йомаҡ,
Минең серле йоҙаҡ,
Бер аскыс та булмай яратып.

Айлы аяҙ төндәр,
Ҡояш нурлы көндәр,
Тик мин генә көнһөҙ һәм төнһөҙ.
Айлы төндәр өнһөҙ,
Ҡояшлы көн тиңһеҙ,
Ә мин һинһеҙ, бәгрем, мин һинһеҙ.

***1984 йыл, "Зеленая роща".***
***Өфө ҡалаһы.***





## *Ун һигеҙ йәш минә...*

Ун һигеҙ йәш минә —
Ниндәй шатлыҡ!
Һайлау бүлмәһенә инәмен.
Бөгөн беренсегә.
Хеҙмәт халҡы менән
Мин дә тауышымды бирәмен.

Шатланамын шуға:
Йәш тауышым ҡушыла
Хеҙмәт кешеһенә еремдең.
Сөнки улар һала
Иң сыҙамлы ташты
Нигеҙенә Тыуған илемдең.

*15 февраль, 1959 йыл.*
*Асҡар ауылы.*

## *Теләк*

Шатлыҡлы көн бөгөн. Бөйөк байрам
Йәштәргә һәм ҡарт-ҡороларға.
Ҙур юбилей тантанаһы илдә —
Ҡырҡ йәш бөгөн Башҡортостанға.

Башҡортостан, ҡырҡ йыллығың килде
Ете йыллыҡ өсөн көрәштә.
Республикам ҡырҡ беренсе йәшен
Гөрләп сәскә атһын хеҙмәттә.

*1959 йыл. Дәүләт ауылы.*
*"Осҡон" газетаһында 1959 йылда*
*Иштимер Үйылданов псевдонимы*
*менән баҫылды.*

## Әләм ҡайтты

Болондарҙа сәскәм, күбәләгем,
Балыҡтарым йөҙә һыуҙарҙа.
Һин генә булғанға, Башҡортостан,
Хеҙмәтем данлана йырҙарҙа.

Ныҡ һөйһәм дә һине, ғәзиз ерем,
Йондоҙҙарға осоп китә алам.
Һин генә булғанға, Башҡортостан,
Әйтер һүҙҙәремде әйтә алам.

Йөҙәм асыҡ бөгөн, киң күңелем,
Һаулыҡ, муллыҡ, сафлыҡ өйҙәрҙә.
Һин генә булғанға, Башҡортостан,
Тыныслыҡ һәм бәхет түрҙәрҙә.

Бигерәк тә бөгөн, Башҡортостан,
Өргән ҡуҙҙай яҡты ялҡының,
Әләмебеҙ ҡайтҡас еркәйемә,
Осҡондарын сәсте, балҡыны!

*2004 йыл.*
*Әбйәлил ҡасабаһы.*

## Хыял — ысынбарлыҡ

*Ю. Гагарин космосҡа осҡан көн.*
*12 апрель 1961 йыл.*

Телгә килә алмай торҙом
Тулҡынланып,
Сәскәгәме? Юҡ. Кешегә
Хайран ҡалып.
Бөтә гүзәл хыялдарым
Тормошҡа ашты:
Үҙем үҫтем айға тиклем
Ерҙән алып.
Хуш, хыялым, ә мин ғорур,
Гөрлә, Йыһан!



Мин еңеүсе бәйгеләрҙә
Һинә табан.
Инде ҡайҙан, нindәй хыял
Тапмаҡ кәрәк?!
Маҡсатымдың иң бейеген
Юйҙы заман.
Сеү!.. Һаташма, ҡылған уңыш
Алһын һулыш.
Хистәреңә ҡанат булһын
Һәр бер уңыш.
Хыяллан һин, хыял беҙҙә —
Ысынбарлыҡ!
Күп хыялдар көтә беҙҙән
Шуға тормош.

*Дәүләт ауылы.*

## Әсә һүҙе

*Ҡустым Рафаэлға*

Атайымдың ҡаны етмәгәнме?!
Ҡайҙан ҡалҡты тағы шул "ярман"?!
Донъя имен булһын, үп тупраҡты,
Күтәр дәртен, улым, бул дарман.

Тыуған илең һинә берҙән-берең,
Һалдат улым, бүләк, ғәфү ит.
Күҙ ҡараһын керпектәр һаҡлаһын,
Тыуған илдең керпеге ул һин бит.

Һүҙем йыҡма, улым, һаҡла илде!
Күпме кәрәк, шунса хеҙмәт ит.
Ҡара яҡма ағарған сәсемә, —
Кәрәк икән, йәнең сарыф ит.

Берйәшәр еңелһә, йөҙйәшәр еңелмәҫ,
Атаһы үлһә, улының улы бар.
Фатихам улыма, улым, һинә илем, —
Ул "ярманға" беҙҙә урын тар!

*1961 йыл, сентябрь.*
*Өфө ҡалаһы.*

## Берҙәмлек

***Океанда ҡамалған дүрт егеткә***

Гигант океан, көслө тулҡындарың
Ете тәүлек буйы шауланы,
Кескәй баржалағы дүрт егетте
Бөтә ярҙарыңдан ҡаманы.

Шомло, мәрхәмәтһеҙ киңлектәрең,
Тынғыһыҙ, ҡараңғы төндәрең
Бәләгә юлыҡҡан дүрт батырҙан
Кисерттеләр михнәт көндәрен.

Күккә осто улар уйынсыҡтай,
Сикһеҙ төпкөлдәрең яуланы,
Ләкин нык бөгерле батырҙарҙың
Көслө ихтыяры һынманы.

Ялыҡтырғыс, ауыр был аҙналар
Бошоноуға сәбәп булғанда,—
Эшләнеләр улар, йырланылар,
Һынатмайса күңел тулғанда.

Йөрәктәрҙе ҡырҙы асығыуҙар,
Әммә улар быны һиҙмәне.
Берҙәмлек ул — көслө, ҡиммәт сифат,
Хатта океан да еңмәне.

***Дәүләт ауылы.***

## Ырҙында йәйғор

Ырҙын өҫтөндә бойҙайҙан
Бөгөлә дуға.
Алтын суҡлы ай нурҙары
Йәм бирә уға.

Тирле елкәләргә тула
Бойҙай бөртөгө.
Эшләмәй тороу ырҙында —
Әҙәм көлкөһө.



Зернопульт иген елгерә,
Погрузчик тейәй.
Яҡшы машина ВИМ бит ул —
Орлоҡ әҙерләй.

Маҙһарҙың оҫта ҡулдары
Көйләй уларҙы.
Эшкә лә димләй ул — Маҙһар*
Унған ҡыҙҙарҙы.

Ай яҡтыһында ялтырай
Ағас көрәктәр.
Йырлап эшләй бында йәштәр —
Дәртле йөрәктәр.

ВИМ-дә дүртәү, зернопультта
Эшләй ун кеше.
Эш дөрөҫ ойошторолған —
Был мөдир эше.

Ырҙын мөдире Әхмәди** —
Күҙлекле бабай.
Ашлыҡты ҡулына алып,
Ентекләп ҡарай:

— Яҡшы, ҡыҙҙар, таҙа булған,
Тейәргә ваҡыт,
Таңға дүрт машина китә
Игенде алып...

Көс өҫтәй, күңел күтәрә
Ямғыр йәйғоро.
Хас шундай беҙҙең ырҙында
Бойҙай йәйғоро.

***1960 йыл. Дәүләт ырҙын табағы,***
***Сталин исемендәге колхоз.***

---

* Маҙһар Йәрмөхәмәтов — атаҡлы механизатор
** Әхмәди Хөснитдинов — алмаштырғыһыҙ ырҙын мөдире.

## Аҡсарлаҡ та маяҡ

*Табибтар Рәйлә Мусинаға*
*һәм Иршат Хисмәтовҡа арнайым.*

Ғүмер буйы аҡ-ҡара күрәшә,
Төндәр үтһә, көндәр киләләр.
Аҡ төҫ булһа таҙалыҡ билгеһе,
Ҡара төҫтә сирҙе күрәләр.

Ата-бабай борон муллаларҙан
Аҡ тоҙ өшкөрттөрөп эскәндәр.
Ап-аҡ ҡурғаштарҙан ҡот ҡойғандар,
Аҡ бетеүҙе муйынсаҡ иткәндәр.

Аҡ ҡар яуһа, ҡара ергә шифа,
Барлыҡ сире бөтә юйылып.
Аҡ һөт, аҡ ҡымыҙҙы эсһәң, күп сир
Төшә ҡара тирҙәй ҡойолоп.

Күпме әсә аҡ бәхеттәр теләп,
Балаларын юлға оҙатҡан!
Күпме улдар, аҡ толпарға менеп,
Ҡара дошман яуын ҡыйратҡан!

Һалдат тотһа илгә биргән антын,
Гиппократ антына тоғро һеҙ.
Күпме йылдар илем яраһында
Аҡ повязка булып торҙоғоҙ.

Ҡанһыҙҙарға тере ҡан бирҙегеҙ,
Йөндәрегеҙҙе лә бүлдегеҙ.
Сир вирусын үҙегеҙҙә һынап,
Беҙҙең сафлыҡ өсөн үлдегеҙ.

Бик тиҙ генә ҡартая ла ҡуя
Эстәрендә ҡара йөрөткән.
Йәшәгәндән ҡеүәтләнә генә
Хистәренән аҡ ҡот өләшкән.

Ҡара төндә аҡсарлаҡ та маяҡ,
Аҡҡоштар ҙа аҡ эҙ ҡалдыра.
Сирлегә аҡ халатлы ҡағылһа,
Күңелендә аҡ шәм яндыра.

*1983 — 1987 йыл. Асҡар ауылы.*



## Ҡыҙылым, һылыуым

Ҡырҡты һырғалары —
Ҡыҙыл йылғалары
Әллә бер шағир ҙа эсмәгән?!
Йәшмә таштарындай,
Биҙәп яҡтарынды,
Әллә матур ҡыҙҙар үҫмәгән?!

Ҡыҙылым, һылыуым.
Үҙе шиғыр Ҡыҙыл булыуың.

Ҡыҙыл йылғаларын
Берәү йырламаған,
Әллә бер йырсы ла кисмәгән?
Ирәндек һәм Көрпәк
Буйҙары ла күркәм,
Ниңә бер һандуғас төшмәгән?!

Ҡыҙылым, һылыуым,
Үҙе йыр бит тулып ағыуың.

Ҡыҙыл йылғалары,
Ҡыҫҡа булһағыҙ ҙа,
Күнаҡ һеҙ Әбйәлил түрендә.
Оҙонлоғо түгел,
Эстәлеге менән
Баһалана бит ул ғүмер ҙә.

Ҡыҙылым, һылыуым,
Үҙе ғүмер гөрләп ағыуың.

Әйтһәләр ҙә Ҡыҙыл
Уңа тиеп бик тиҙ,
Һәр саҡ тере, тулы һыуығыҙ.
Буйығыҙҙа гөрләп
Торһа хеҙмәт, хөрмәт,
Аға кеүек һеҙҙең ярығыҙ.

Ҡыҙылым, һылыуым,
Бәхет Әбйәлилдә булыуың.

*1965 йыл.*
*Өфө ҡалаһы.*

## Өй ҡуңыҙы

— Мә, ҡатын, бийманы йәй ҙә...
Илатма шул баланды!
Ҡайҙа тамаҡҡа әҙерлә,
Үтеклә салбарымды.

Хәҙер генә йыйылыш була,
Галстукты алып бир.
Аҡ күлдәк йыуылған булһа,
Төймәһен тиҙ тағып бир, —

Шулай тине лә Хәфизйән,
Журнал уҡый башланы.
Бысраҡ ойоҡтарын сисеп,
Койка аҫтына ташланы.

Хәфизйәндең уйы үҙенсә,
Имеш, был ҡатын эше:
— Расходланып ни өсөн, — ти, —
Ҡатын ала һуң кеше?

Ҡатын-ҡыҙ гел өйҙә торһон,
Йыйылышҡа бармаһын.
Уҡырға уның хаҡы юҡ,
Өйҙә, бала ҡараһын.

— Ҡомғаныңа һыу ҡой, — тип ул,
Йыуынырға атланы:
— Әгәр утын ташый сыҡһаң,
Индереп ҡуй балтаны...

Ә ҡатыны сәй ултырта,
Һул ҡулында балаһы,
Сәй эскәс тә ҡатынына
Бар өс һыйыр һауаһы...

— Картуфыңды ашап бөткән
Колорадо ҡуңыҙы...
Шулай һул ҡулдарҙа үрсей
Буласаҡ өй ҡуңыҙы.

***1986 йыл.***
***Әбйәлил ҡасабаһы.***



## ЭКГ-ла

***Зөһрәне яратҡан Алмасҡа***

Зөһрә һылыу тәҙрә аша
Ҡыҙыл буйын һағына.
Күҙҙәренә йәш тултырып,
Осор ҡоштай ҡағына.

ЭКГ-ла Зөһрәнең
Йөрәк серен уҡыным.
Ауырыуының сәбәбе —
Тик бишлегә уҡыуы.

Рәхмәт инде һыуыҡҡа ла,
Зөһ(ө)рәне йүткерткән.
Мәктәбенән бүлеп алып,
Больницаға килтерткән.

Әсәһе, ниңә килмәйһең?
Ҡыҙыңды һағындыраң.
Тағы сәскәндәрен күрһәм,
Шприцтарын һындырам.

Хатта күлдәгенә сыҡҡан
Таблетка һүрәттәре.
Яртыһын тишеккә төшөр,
Аша тик кәрәктәрен.

Зөһрә, килгән юлыңа
Үҫһен тик умырзая.
Дөйә менән булһа ла ҡайт,
Ғүмер үтмәһен заяя.

Әҙерәк кенә ҙур булһам,
Мин Таһир булыр инем.
Иң һөйкөмлө күбәләктәй,
Түшеңә ҡуныр инем.

Зөһрәнең көйәнтәһе
Ҡалғандыр инде айҙа.
Шундай яҡты айың булып,
ЭКГ-нан ни файҙа?

***1987 йыл.***
***Аҫҡар больницаһы.***

## *Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!*

Салауатта тыумаһам да, үҫтем,
Сат(ы)раның эсеп һыуҙарын.
Өҫкәбәндең ашап муйылдарын,
Һөйөп эшсән, матур ҡыҙҙарын.

Ғимранташтың сауҡаһына менеп,
Мин дә элдем эшләп еҙ балдаҡ.
Мырҙабулат ташы араһына
Мин дә ҡуйҙым балыҡҡа ҡармаҡ.

Салауатта тыумаһам да, үттем
Урамдарында тальян уйнап.
Кескәйҙәргә кеселекле булып,
Ололарҙы хаҡлы ололап.

Насип булмаһа ла донъя ҡороп,
Ауылымда ғүмер итергә,
Килә Сәмәнтәйҙең энәлеген
Ялан аяҡ үтеп китергә.

Салауатта тыумаһам да, күрҙем
Шәйәхмәтов Рафиҡ хеҙмәтен.
Ирғәлиндәр, Йомағужиндарға
Ауылдаштар иткән хөрмәтен.

Күрҙем күрше Кәримов Мофаззал
Ярышҡа яратҡан толпарҙы,
Һабан туйҙарында бәйгеләрҙән
Сапҡыс отоп ҡайтҡан саҡтарҙы.

Табибыбыҙ Әклимә ҡулдары
Сәскәләрҙән шифа йыйғанмы?!
Өлкән архитектор Әҙелм.....
Архитектор булып тыуғанмы?!

Салауатта тыумаһам да беләм.
Маһый инәй миңә ҡот ҡуйған.
Шуға Хоҙай бөтә бәхетемде
Юлдарыма сығарып ҡуйған.



Беләм, Ҡанлыбилдән ҡан аҡҡанын,
Ун өй аша һалдат ҡайтҡанын.
Ә ҡалғандар, атай һәм уландар,
Беләм ниңә, ҡайҙа ятҡанын...

Беләм, Ғибәҙәт ҡарт, кәҙер төнө
Асылғас, өс ул һораған,
Нәбиулла, Хәйбулла, Ишбулат —
Бөгөн өс ул өс өй ҡораған.

Тәүҙә торҙо ҙур ҡарағас-солоҡ
Бетеү төҫлө ауыл түшендә,
Әллә шуға ҡарағастай ныҡтар
Ауылдаштар колхоз эшендә.

Хәйбулла ҡарт булды мәргән уҡсы,
Сәғитовтар — оҫта һүҙселәр.
Аҡбулатов, Аҫылғужиндар һәм
Кәримовтар — намыҫлы эшселәр.

Кемдәре юҡ Әхмәтйәновтарҙың:
Сварщик, малсы, йырсы, урмансы...
Һаман иҫтә механик Минһажев,
Зыкрин Ғәли — тырыш тракторсы.

Түбәнге оста атаҡлы һарыҡсы,
Үрге оста бейә бәйләүсе,
Урта тышта данлы умартасы,
Һәр бер өйҙә оҫта буҙасы!

Өйҙәр бында ун ике мөйөшлө,
Ә баштары ялтыр ҡалайҙан.
Ауыл күрке — ҡыҙыл кирбес клуб,
Унда көндә кино ҡарайҙар.

Ослотау итәген биҙәп торҙо
Иң мөһәбәт мәктәп районда.
Тына ине Сәғит баҡсаһы ла
Зифа апай уҡытҡан сағында...

Зифа апай бөгөн оло ялда.
Улы уның — мәктәп хужаһы.
Йәш ауылдаштарҙың да бар әле
Бик күп данлы юлдар уҙаһы...

Атай, әсәй, ҡустым ҡәберенә
Ике монло ҡайын эйелгән.
Бер ҡайыны һеҙҙең фатиханан
Миңә урын биләп бөгөлгән.

Осрашайыҡ, дуҫтар, көтә беҙҙе
Таңатарҙың ҡурай моңдары.
Тәбрикләйҙәр беҙҙе йондоҙҙар ҙа,
Салауаттың ҡыҙ һәм улдары.

Салауатта тыумаһам да беләм:
Иҫке тирмән һыуы буйында
Уйын-көлкө, бәхет ташып торор
Ауылдаштарымдың туйында.

Осрашайыҡ, дуҫтар! Һаумыһығыҙ!
Ауылдаштар, түрҙән үтегеҙ!
Шатлыҡ, дуҫлыҡ һәм хеҙмәт билгеһе —
Икмәк-тоҙҙан ауыҙ итегеҙ.

*9 июль, 1986 йыл. Салауат ауылы.*
*"Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!"ҙа*
*уҡылды.*

## *Аҫҡар таҡмаҡтары*

Аҫҡар менән Һиндостандың
Һис тә юҡ айырмаһы.
Тик Аҫҡар һыйырҙарының
Һерәйгән ҡабырғаһы.

Культуралы көтөү булһа
Иҙәш һыу буйҙарында,
Бөтөр ине ОПХ-ның
"Концлагерҙары" ла.



Дихлофос һибеп ҡотолдоҡ
Колорад ҡуңыҙынан.
Нисек ҡотолорға инде
Аҫҡар "бомж"дарынан?

Өй төҙөүгә бер гектар ер
Бүлһәк, булыр ҡапҡа ла:
Картуфлыҡ, бесәнлек, хатта
Нигеҙ — тыуыр маңҡаға!

Һөйәркәмә шалтыратһам,
Ҡәйнеш тыңлай — фельетон.
Аҫҡар халҡын минрәү ҡолаҡ
Итеп бөттө телефон.

Телеграфтан ебәргәйнем
Бер тоҡ шәкәрлек акса.
Юғалды ул ай ярымға
Йәй, еләк бешкән сакта.

Төндә Дәүләттә, Дауытта
Уттар ялтырап тора.
Аҫҡарҙа тышҡа сығырға
Тубыҡ ҡалтырап тора.

Аҫҡар урамдары тулы
ГИБДД ла РОВД.
Ҡайһы мөйөшкә инһәң дә:
— Дай денег, набью морду...

"Кәпәс эбей" тип аталһын
Коммунистик урамы,
Шунан таралды бит беҙгә
Алып-һатыу баҙары.

Болғанып бөттө аскарҙар,
Күп балалар бәхәсле:
Ҡаштары ҡара булһа,
Ут кеүек ҡыҙыл сәсле.

Балаларҙы уҡытҡас ни
Еткәнсе утыҙ йәшкә,
Роддом, садик, армия ла
Булһын ине мәктәптә.

Шахматистар ҙа күп кеүек...
Низә һуң хикмәт, Фирғәт?
Хатта бөрйәндәр ҙә беҙгә
Ҡуйып ҡайттылар бит “мат”.

Хас “Пионер” газетаһы
“Осҡон”да ҡайһы һандар,
Сөнки осраштырып куя
Унда маңҡалы юлдар.

Борон сихут, эт ашаһа,
Йүнәлеп китер ине...
...Бөгөн дә сихут һәм эттәр
Бер юлы бөтәр ине.

Уңы ялан, һулы урман
Әбйәлил кырҙарының.
Тиҙ ашала һул тәгәрмәс
Асҡар “Волга”ларының.

— Аскар ҡала булырмы? — тип
Һорау биргәс Лившицҡа*:
— Булыр, — ти, — кассир ҡуйһағыҙ,
Бәҙрәфтә һәр тишеккә.

Ярты Асҡар көнө-төнө
Президиумда ял итә,
Ҡалған яртыһының көнө
Сәпәкәй һуғып үтә.

* Лившиц — “Спросите у Лившица” телетапшырыуын алып барыусы



# Байрамдарҙа шаярыуҙар



## *Шулай ирҙәр буламы?*

***23 февраль кисәһендә мастер Нәзирә Ҡараҡаева уҡыны***

Зaһрыев Юлай йәш саҡта
Бейегән дә бейегән.
Хәҙер инде бейей алмай,
Подшипнигы ирегән.

Анатолийҙа гел булһын,
Булһын кәзә көтөүе.
Кәзә — училище йәме,
Анатолий — бетеүе.

Исрафилов ноҡот һалған
Сәғит Зыкриевичҡа:
Бисәһе күҙ ҡыҫып төшкән
Бер киржакка Гусевта.

Иптәш Сафин тәмәкеһен
Ташлар ҙа тартыр әле,
СПТУ бисәләре
Сәсен ағартыр әле.

Хәсәновтар килендәрҙе
Гел Боранғолдан ала:
Рәфкәт Фәритте “кәйнеш”, ти,
Фәрит Рәфкәткә — бажа.

Училищеның бал ҡорто
Тик гел һул якка осҡан,
Умартасыбыҙ уларҙың
Уң ҡанаттарын ҡырҡкан.

Йөҙ биҙ(е)рә картуф сәстек,
Беребеҙ шутлап тик торған.
Ун биҙ(е)рә генә сыкты...
“Хрустящий” картуф булған.

Курган, Горький, кәпәс әбей,
Палестина, Израиль...
Запчасть эҙләп Йәлил ҡусты
Ҡайҙа ғына булмай ул!

Күтәртер көндә һыйырым
Ҡалтыранды, еҫкәнде.
Белмәй йөрөгән ул бахыр
Минең фермер икәнде.

Шулай ҙа ирҙәр буламы?
Йә "дохлый" ҙа, йә "тупыс",
Береһенең "сожгли хату",
Йә "токтой", йәки "тоҡос"...

## Иң нәфис байрам менән!

***8 март кисәһендә уҡытыусы***
***Шәрәфетдин Ҡаһарманов уҡыны***

Әйҙәгеҙ, ирҙәрҙе ташлап,
Ҡала сығып китәйек.
Ҡыҙыл фонарҙар яндырып,
Аҡса кәсеп итәйек.

Мартта ла аҡса булмаһа,
Нәйлә, Гөлнара, Сәйҙә,
Һеҙ ҙә, простите, кәсепкә
Сығып китегеҙ, әйҙә.

Ғинуарҙың авансыһына
Өс кенә суска килде...
Сәйҙә, Сәриә... Береһен
Кем тип ҡушырға инде?!



Хоҙай төҙәтергә тейеш,
Был шайтан бутаған эш:
Сәлимә бит Сәлимгә тиң,
Таһир Зөһрәгә тейеш.

Поселокта өс Сәлимә,
Өсәүһенә бер тартай.
Етем түгел бит балалар...
Тартай булһа ла атай.

Минең бисә бисәме ни,
Вот, Яхин, һиндә бисә!
Һигеҙенсе мартта тыуғас,
"Международный бисә"!

Ниңә бөгөн был поварҙар
Магазинда сиратта?
Баҡһаң, келәттә — каникул,
Ашхана — восьмой мартта.

Үлмәһә үлмәй ҙә ҡуя
Кәбән аҫтында сыҫкан!
Төшкә керҙесе Нәзифә,
Мартта декретка сыҡкан.

Ике ҡыҙы, малайы бар,
Тәбрикләйем Нәсихте.
Күпме әйттек һиңә, Тамъян,
Подряд тарт тип тәсбихте.

Һуңғы биш йылда Менәүәрә
Өс директор түҙҙырҙы,
Тик хужа саҡта Хәсәнов
Ул өс малай тыуҙырҙы.

Менделеев медь тапкансы
Ҡашы, сәсе ағарҙы,
Ә Альмира йәп-йәш көйө
Өс элемент сығарҙы.

Бисмиллаһыҙ Гөлсөм өс көн
Битен һыйпап уҡынған,
Иртә менән ауыҙ асҡан,
Кис Ҡәдиргә суҡынған.

Әгәр Хоҙай насип итһә,
Күрәбеҙ бөгөн йәйгор,
Сәкәштерешеп эсһәләр
Фәниә менән Ғәйнур.

Польтоһы ҡыҙыл булһа ла,
Сабира ул — не дура!
Рәйесенән генә башҡа,
Ун биш келәткә хужа.

Мастер Нәйлә, директорҙан
Икеләтә хаҡ һора.
Утыҙ ҡыҙ ни һә тигәнсә
Алтмыш булырға тора!

Бейе, Сәкинә ҡоҙаса,
Бейеһәң эсең бушар.
Бестерменең айғырынды,
Сығарма, яттар тышар.

Урлашалар, юғалалар —
Болғаҡ илдә кем сыҙар?
Вәсил йүгәнһеҙ, Гөлнара,
Ҡыңғырау тағып сығар.

Күршегә күҙем төшкәйне,
Каркай боҙҙо араны.
Ауыҙында һүҙ тормай шул,
Тештәре бик аралы.

Мария маһайған була,
Йәнәһе, атҡаҙанған!
Нәзирә ҡабырғаһына
Хатта айғыр ҡаҙалған.



Нәзирәкәйебеҙ ҡайтты,
Тупаҡтар һыйҙырмағас.
Йоп-йомошаҡ булып ҡалған,
Ҡабырғаһы булмағас.

Бүләк итәйек ҡыҙҙарға
“Березовый роща”ны.
Тәслимә, байрам менән һин
Ҡабул итсе мунсаны.

Үпкәләмәгеҙ һеҙ, ҡыҙҙар,
Бисәләр, үсекмәгеҙ.
Егеттәр, кәзәгеҙ төкөп,
Эсмәй сығып китмәгеҙ.

Шаяртабыҙ, тәбрикләйбеҙ
Иң нәфис байрам менән!
Байрам бер көн. Похмель — аҙна,
Похмель тик айран менән.

## *“Мозговой центр”*

***Бөрйән һәм Учалы училищеларының тәжрибәһен өйрәнеп ҡайтҡас, ауыл хужалығы көнөнә арналған кисәлә уҡылған репортаж-отчет.***

Барып ҡайтҡас, бөрйәндәрҙең
Тәжрибәһен өйрәнеп,
Кабинеттар Шүлгән-таштай
Ҡалдылар өңөрәйеп.

Ат менгәндәй булып ҡайттыҡ
Учалыға ла барып:
Учалы мастерҙарының
Анализдарын алып.

Ярһып-талашып тикшерҙек
Учалы анализдарын.
Күрәһең, Үрген күлендә
Бик күптер адреналин.

Шунан ҡарар ҡабул иттек:
Бармаҫҡа тип Асҡарға,
Анализдарҙы йыйырға
Тик мозговой центрға!

Мозговой центр ҙа булды,
Тәһәрәт центры кәрәк.
Көнө-төнө сәй эскәс ни,
"Кес" итергә лә кәрәк.

Күркә кеүек үңәс һоноп,
Учалылар ҙа килде.
Осрашыуҙар үтеп киткәс,
Беҙгә шул мәғлүм булды:

Беҙ ҡырҡ, улар ҡырҡ биш минут
Уҡытып ыҙалайҙар.
Биш минутҡа алмаштырып,
Завучты ҡоҙалайҙар.

Учалы китһә Фәниә,
Ә Ғәйнур Шүлгән-ташҡа.
Беҙгә кемдәр ҡалалар һуң?
Тьфу, тьфу, үлсәйем ташҡа.

Завуч судта йөрөп ҡалды,
Күп ине уликаһы.
Әллә булаһы килгәндер
Директор Моникаһы...

Беҙҙең бисәләр һыймайҙар
Центрҙағы ишеккә.
— Ә завучты нишләргә? — тип
Һорайым мин Лившицтан.



Аҡыллы ла инде Лившиц...
Әйтте күҙлеген һалғас:
— Утечкаһы була инде,
Мозговой центр булғас.

Ҡыҙ китһә, бәхет китмәһен,
Ҡаҙап ҡуйыйыҡ даға.
— Китһәләр буш китмәһендәр,
Бирәйек арендаға.

*Әбйәлил ҡасабаһы,*
*2000 йыл.*

## *Курсант моңдары*

### Ҡәҙерле уҡыусыларым!

**СПТУ-ла үткән йәшлегегеҙҙе хәҙер ожмахҡа тиңләүегеҙҙе ин беләм. Сөнки йылдар үтеү менән бөтә насар нәмәләр онотола, үңелдә иң йылы, якты хәтирәләр генә ҡала. Шулай ҙа был "Курсант моңдары"на ингән һәр таҡмаҡ заманында һеҙҙең аһ-арҙарҙан, һеҙҙең һүҙҙәрҙән һәм хистәрҙән иҫтәлек өсөн төҙөлөп барғайны.**

**Автор.**

Өс йылыбыҙ утыҙ йылдай,
Күңелһеҙ, көндәр үтмәй.
Гөрләп торған ауылыбыҙ
Күҙ алдыбыҙҙан китмәй.

Таштимерҙәр кино ҡарай,
Спектакль — Ҡужанда.
Училищеның концерты
Сибайҙа, йә Курганда.

Бөгөн радиотулкын менән
Тракторҙар йөрөтөлә,
Беҙҙең радиоузелыбыҙ
Һуғымға һимертелә.

Тыны юҡ тынлы оркестрҙың,
Йылдар алышынһа ла.
Танһыҡтан таңға ҡалырһың
Ишәк тауышына ла.

Айына бер кино булһа,
Оркестр ҙа кәрәкмәй.
Һыҙғырабыҙ, үкерәбеҙ,
Барыбер йүнләп күрһәтмәй.

Хас мәскәй әбей күлдәге
Клубтағы киноэкран.
Ә кеше баш түбән китһә,
Мультфильммы тип тораң.

Киномеханик — почтальон,
Газета ла тарата.
Ә беҙ гәзитһеҙ, киноһыҙ...
Кис була ла таң ата.

Ҡары булһа, саңғыһы юҡ,
Саңғы булһа, ҡар яумай.
Кейәм тиһәң, саңғыларҙың
Ботинкалары һыймай.

Карповты күрҙек беҙ төштә
СПТУ — 93-тә,
Шахматта еңел еңһә лә,
Ә кәрттә еңде көскә.

Сухомлинский: "Шахматһыҙ
Тәрбиә булмай", — тигән.
Менделеев та шахматка
Хәтһеҙ ваҡытын бүлгән.



НТО, ГТО, ТР, ВОИР —
Ишетелмәйҙәр күптән.
Әллә юктар, әллә төшөп
Калғандармы күрептән?

Төрлө түңәрәктәр эшләй
Ҡағыҙҙарҙа, отчетта.
Ә беҙ нишләргә белмәйбеҙ
Дәрестән буш ваҡытта.

Бармактар бөгөлә: кисәләр,
Әңгәмә, йыйылыштар,
Ә ҡасан ойошторолор
Беҙҙен көндәлек эштәр?

Буфет та юҡ, магазинға
Индермәйҙәр, ҡыуалар.
Ручка, дәфтәрең булмаһа,
"Бер" билдәһе ҡуялар.

Якшы билдә лә алаһың,
Картуфлыҡ күмһән генә.
Президиумда ултыраһың
Кәртә күрәһәң генә.

Циркачмы, йә фокусникмы
Расписание тултыра.
Күҙ йомғанда "трактор" тора,
Ә асһаң — "физкультура".

Киске унда — география,
Иртән — биология.
Инде әҙерләнеп килһән,
Приказ: технология!

Физик тарих укыта,
А географ — СХМ.
Типкеләйҙәр ҙә талайҙар,
Бында нисек укыйһың?

Уҡытыусы иҙән йыуа,
Эсеп йөрөй техничка.
Утынын бысмаһаң, мастер
Стипендияны ҡырҡа.

Тәрбиәсе тәҙрә һылай,
Мастер ҡуя быяла.
Вахтерҙар вахтала йоҡлай,
Столяр премия ала.

Комбайнда йөрөтмәйҙәр,
ЛПЗ-ла йоҡлайбыҙ.
"Слесарное дело"һыҙ
Ике йыл һынатмайбыҙ.

Училище юлдарының
Метры ун биш һикертә.
Өс йыл биргән белемдәре
Өс йөҙ метрға етә.

"Белорусь"-тың алғы мос(т)ына
Зам алды арпа-һалам.
Ә беҙ мостһыҙ "Белорусь"-та
Уҡыйбыҙ әле һаман.

"Эсмәгеҙ" тигән һүҙҙәр күп
Уҡытыусы урттарында,
Ә үҙҙәре эсеп йоҡлай
Дәрестең уртаһында.

Һәр бер кеше үҙ төп эшен
Мотлаҡ башҡарһын ине:
Уҡытыусылар уҡытһын,
Ә беҙ уҡыһаҡ ине...

"Итексе бәлеш бешерһә,
Бәлешсе итек текһә, —
Эш хөрт", — тип Крылов олатай,
Бер асыу әйтмәй китһә...



Тартыу ҙа беҙҙә тыйылған,
Үпкә никотин йота.
"Ҡыҙыл мөйөш"тә — күк төтөн,
"Бычоктар" тулып ята.

Коридорҙар аҡҡып тора,
Нисек кенә сыҙарға?
Бәҙрәфтәребеҙ ҙә бик күп,
Тик урын юҡ сығырға.

Төндә Йәлембәт, Тупаҡта
Уттар ялтырап тора.
Ә беҙҙә тышҡа сығырға
Тубыҡ ҡалтырап тора.

Бик күп эштәр башҡарыла
Һанһыҙ ултырыштарҙа.
Ә беҙ һаман ултырабыҙ
Ватыҡ ултырғыстарҙа.

Харуновтың дубленкаһын
Ишмурзин кейеп ҡайтҡан,
Ә фуфайкаһын Зиганшин
Өс һумға тотоп һатҡан.

Кәпәсең ҡуяндан булһа,
Прости, кейеп китәләр.
Йүнлерәк итек күрһәләр,
Айыу майы һөртәләр.

Ишектәр юҡ, тәҙ(е)рәнән
Ырғыһаң аяҡ һына.
Ятаҡтарыбыҙ шул ҡотһоҙ,
Малайҙар нык юҡһына.

Йорто бейек, ашы шыйыҡ —
Ашханала эш хана.
Алма, хөрмә "сәскә ата"
Йыйылыштар ҙа ғына.

Хатта космоста ашайҙар
Емеш-еләк үҫтереп.
Ә беҙ щебенка сәсәбеҙ,
Бөтә ерҙе тултырып.

“Индийский сәй сәйнүктә,
Өҫтәлдә башҡорт балы”...
Беҙҙә грузин сәйе лә әҙ,
Ҡайнар шул курсант ҡаны.

Әгәр инде сәй етмәһә,
Һыу өҫтәй ҙә ҡуялар.
Ә үҙҙәре сускаларын
Йоморайтып һуялар.

Инспекторҙар килерен
Беҙҙең ашҡаҙан һиҙә,
Сөнки якшы ашаталар,
Өфөнән кеше килһә.

Белһәң ине ниҙәр ҡайта
Поварҙар сумкаһында?
Белеп бер туҡмалдыҡ инде
Урамдың уртаһында.

— Ит юғалған, май етмәй, — тип,
Күпме акттар киткән?
Баҡһаң, ул ит акт менән
Бер үк портфелдә икән.

Ниңә бөгөн был поварҙар
Магазинда сиратта?
Баҡһаң, келәттә каникул,
Ә ашхана йоҙаҡта.

Беҙ бит иртәнге һалдаттар,
Иртәнән һуң игенсе.
Игенсе һәм һаҡсыларҙың
Тәмлеме инде өлөшө?!



Оялмаһағыҙ, ҡурҡығыҙ,
Бурҙар әҙ, күп тоғролар,
“Кеше өлөшө эсте тишә”,
Тигән бит боронғолар...

— Ашыңды эт, башыңды бет
Ашай, — тип әрләй әсәй.
Әсәй бахыр ҡайҙан белһен,
Бында бит медпункт эшләй.

Больницабыҙ ҙа юҡ түгел,
Тик юҡ уның дарыуы.
Бик нык ҡысындыра икән
Ҡорсанғы ауырыуы.

Һуғыш алдынан Суворов
Өс сәғәт мунса кергән.
Петр Первый ҙа мунсаны:
— Бик нык шифалы! — тигән.

Борондан ҡара башҡорттоң
Ҡара мунсаһы булған.
Тәһәрәтһеҙ намаҙ ҡылмаған,
Ҡулда булған еҙ ҡомған.

Беҙҙең мунса ағын-аҡ та,
Тик беҙ һаман ҡарабыҙ.
Мунса түгел, дәрескә лә
Бит йыумайса барабыҙ.

Утыны булһа, һыуы юҡ,
Һыуы булһа, тас етмәй.
Йә, Хоҙайым, тип торғанда
Мунсаны пожар үртәй...

Эләүкәне балта оҫтаһы
Мөжәүир ҡарт эшләне.
Ә Мостай бабай сабынғас,
Саҡ-саҡ ҡолап төшмәне.

Әләүкәгә менеп булмай,
Ә менһәң, булмай төшөп.
Бер малай менеп сабынһа,
Егерме тора көтөп.

Сисенергә лә урын юҡ,
Сисенмәй индермәйҙәр,
Меңләгән куб ағас ташып,
Бер транса бирмәйҙәр.

Сисенгәндә шау-шыу ҡуба,
Ә кейенгәндә сыр-сыу...
Оморҙаҡ майкаһын эҙләй,
Кириллдың күлдәк һып-һыу.

Азат менән Азамат та
Һуғыштылар трусикка.
Ә Эдик ни оҙон булғас,
Элеп ҡуйған ишеккә...

Фәриттең костюм мөйөштә,
Салбар иҙәндә ята.
Мунсанан һуң клубта танцы,
Ул бейергә ярата.

"Этика", "Эстетика" ла
Һөйләйҙәр матур итеп.
Ә эштәре ... ташҡа үлсәйем,
Ҡоларһың иҫең китеп!

Мунса мөдире Дания
Апайға эше оҡшай:
— Утын юҡ, йә сеп-сей, — тиеп
Аҙналар буйы ҡаҡшай.

Помпохоз утынға барһа,
Мунсабыҙ ҡала һулда.
Помпохоз утындан ҡайтһа,
Мунсабыҙ ҡала уңда.



Помпохозға һәр бер айға
Биш-алты миндек китһә,
Беҙгә инде алты миндек
Хатта бер йылға етә.

Замдар ҙа мунса яғалар,
Нисектер табып яйын.
Директор ҙа мунса яғып,
Йыуына йома һайын.

Нәмә етә саф, хуш еҫле
Май, июнь миндегенә!
Әләүкәлә бер гөрләшеп,
Сабынһаң елле генә!

— Ғәмһеҙлеккә ҡаршы тор! — тип
Һәр мөйөшкә яҙылған.
Йөҙ кирбестең илле-алтмышын
Түктерәләр — ярылған.

ДСП һәм фанералар
Тиҫтәләгән куб килә.
Килә-килә, ҡайҙа китә —
Нурали-знаток белә.

Хужа командировкала,
Ҡала келәт мөдире.
Келәт бикле, контроль көслө,
Ул тикшереп йөрөнө.

Йоҡламай келәт мөдире,
Контролерҙар ҙа уяу,
Тик ҡайҙа буяла икән
Ун биш тонналап буяу?!

Күҙ буяуҙары ла бында
Бик әрһеҙ тотонола.
Дәрес булмай, ә журналдар
Бик оҫта тултырыла.

Өс болт урлаған курсантты
Өс йылға ултырттылар.
Зам узел урлап тотолдо,
Шелтәләп котолттолар.

Сүп-сарҙы өйҙән сығарыу
Беҙҙә бик нык тыйылған.
Әллә шуға мөйөш һайын
Кый-һай өйөп ҡуйылған.

Ситтән кеше килер булһа,
Сыр-сыу эшләп ташлайҙар.
Ә ул ҡайтһа, аяктарын
Көскә һөйрәп атлайҙар.

Киҫкен сара күрергә,
Көндә эшләргә кәрәк.
Тәртип бит кешегә түгел,
Үҙебеҙгә лә кәрәк.

Меңдән ашыу көслө ҡулдар
Өс йыл эшһеҙ, ҡыҙғаныс!
Дәрттә, дарман да беҙҙә күп,
Тик юк беҙгә ышаныс.

Ауылдарҙа игенселәр —
Иң кәрәкле кешеләр.
— Кеше, тиһәм, курсант икән, —
Тейҙәр училищела.

**1970 — 1976 йылдар.**
**Әбйәлил ҡасабаһы.**





# *Мал алыу,*

## *йәки Кәләш сауҡалығындағы мажаралар*

Мәмәй ауылынан ҡоҙалар килеп, кинйә ҡыҙым Мәрүәтте әйттереп, ижәп уҡытып ҡайттылар.

— Туйҙы оҙон-оҙаҡҡа һуҙмабыҙ инде. Бесән бөтөүгә аҙна-ун көн ҡалһа, һарыҡ менән бер йәшник араҡыны барып алырһығыҙ, — тине төп ҡоҙа.

...Арып ҡайттыҡ бесәндән. Ат та арбаны көскә һөйрәне. Утыҙ ҡүбә тартыуы аңһат түгел шул!

— Мәһәҙи улым! Марат еҙнәйеңә әйтеп кил әле. “Беларусь” менән һарыҡ алырға барып килмәҫ микән? Үҙең дә бар, Шәрифә киленде лә ал, — тинем.

—Мал алғанда ныҡ һыйлай торғандар. Әҙәм көлдөрөп йөрөмәгеҙ, — тип һүҙгә ҡыҫылды әбейем.

— Ничего, Гөлсөм, ашап-эсеүгә генә бирешмәҫтәр. Кем балаһы һуң улар! — тип эстән генә түш ҡаҡтым. — Һыр бирмәй уйнап-көлөп ҡайтығыҙ!

* * *

Мәһәҙи менән Шәрифә фермала эшләйҙәр. Марат техникаға маһир, алдынғы тракторсы.

— Солярка етеңкерәмәҫ микән? — тип икеләнде ул.

— Етмәһә, ҡоҙаларҙа өҫтәрбеҙ. Барып етһәк булды, — тине үҙе велосипедта ла йөрөй белмәгән Мәһәҙи.

Улар юл эсендәге ауылға тейеп кұстәнәскә бер ярты алды. Ҡоҙалар ҡыуанышып ҡаршыланы,күршеләре Мөдәристе ҡатыны менән саҡырҙылар. Марат уның менән бергә тракторға уҡып яткан икән. Әйләнгән һайын ҡосаҡлашып, сәкәштерешеп ултырҙылар. Мәһәҙи менән Шәрифә “Сәрмән”де һыҙҙырҙы.

— Трактор арбаһында шешәләр ярылып бөтәр ул. Юлы юлмы... — тине ҡоҙа, Мөдәрискә ҡарап. — Яҡшылап бәйләнеңме һарыҡты? Сиселеп китмәһен...

— Обижаешь, ағай! Беләһең бит, бәйләү — бисәләр эше. Ә минең бармактар смертельно йәбештерә.

— Арбала килен бара бит. Ыҫҡынһа, беҙгә ҡыҫҡырырһың! — тине Марат Шәрифәгә.

— Төп ҡоҙаға әйтегеҙ, араҡыларҙы ат менән килеп алһындар. Туй алдынан һөйләшәһе һүҙ ҙә бар, — тип оҙатты ҡоҙағый.

Төш ауышыуға арбаһына һарыҡ менән Шәрифәне тейәп, "Беларусь" әлеге лә баяғы "Сәрмән" көйөнә шоссе буйлап елдерә ине.

Баяғы күстәнәс алған ауылға етер сакта автобус ҡыуып үтте. Пассажирҙар тәҙрәнән ҡул болғап ҡысҡырҙы, һыҙғырҙы, ҡайҙалыр төртөп күрһәтте.

— Күрәһеңме, ҡәйнеш, еҙнәңде нисек тәбрикләйҙәр, — тип маһайып ҡуйҙы Марат. — Мине белмәгән, танымаған кеше юҡ районда. Тауыш та моңло шул минең...

— "Сәрмән" көйө, еҙнәй, кем йырлаһа ла моңло яңғырай, — тип үҙен дә ҡыҫтырып ҡалырға ашыҡты Мәһәҙи. — Тауышыбыҙ оҡшамаһа, бынауҙар тәҙрәнән сыға яҙып килмәҫтәр ине. Ҡатыным менән минең дә тауыш нисауа ул.

Мәһәҙи артҡа әйләнеп Шәрифәгә күрһәтмәксе иткәйне, күҙе шарҙай булды.

— Еҙнә, тукта әле! Ҡайҙа арба?

Марат тракторын туҡтатты. Күпме ҡараһалар ҙа, саң баҫҡан юлда һарыҡ та, Шәрифә лә, арба ла күренмәне. Кире боролоп барһалар, арба юл ситендә ҡолап ята. Шәрифә менән һарыҡ юҡ. Марат һарыҡты, Мәһәҙи Шәрифәне эҙләп ҡысҡырыштылар. "Эсеп йөрөп кенә ҡатынымдың башына еттем. Ошонан да тере ҡалһа, арбаға түгел, кабинаға ғына ултыртыр инем", — тип үкһене ир.

Трактор менән тартып арбаны торғоҙҙолар. Мәһәҙи арба бигенә элгеп торған ҡатын-ҡыҙ ойоғон күреп йәнләнеп китте. "Бына лаһа һарыҡ тояҡтарын бәйләгән нәмә! Тимәк, Шәрифә уны ыҫҡындырып, автобусҡа ултырған. Әйҙә, еҙнә, алдағы ауылда һораштырайыҡ..."

Улар ауыл осонда мыйыҡлы бабайҙы осратты.

—Әле үткән автобустан һеҙҙең ауылда берәйһе төшмәнеме?— тип һоранылар унан.

— Төштө, минең әбей төштө. Ул һеҙгә ни[illegible] кәрәк?

— Беҙгә әбей түгел, һарыҡ кәрәк! Ул автобусҡа һарыҡ ултырғанын күрмәнеме икән? — Ҡоҙа һыйынын көсө бөтөп, Марат ауырый башлағайны.

— Һарыҡ етәкләгән ҡатын ултырманымы? — тип төҙәтеп һораны Мәһәҙи шул арала килеп сыҡҡан әбейҙән.



— Етәкләп йөрөргә һарыҡ кеше түгел дәһә! И вабшы, һарыҡ менән автобусҡа ултыралармы? — тип көйөп китте әбей. — Кемдәр әле һеҙ? Ҡайҙан?

— Беҙ күрше ауылдан. Мин — Мортаза улы Мәһәҙи, ә был Марат еҙнәм, — тине Мәһәҙи. — Саукалыкта арбабыҙ ыҫҡынып түңкәрелгән дә һарыҡ менән ҡатыным төшөп ҡалғандар.

— Улайһа, улым, ул саукалыҡ заманында атайыңдың да бик затлы бер йөгән алып ҡалғайны. Шунда эҙлә — табырһың, — тип кеткелдәп көлдө лә бабай, әбейен ҡултыҡлап, өйөнә инеп китте.

Еҙнә менән ҡәйнеш ары ҡуҙғалды. Баяғы күстәнәс алған магазинға етеү менән трактор шып туҡтаны.

— Солярка бөттө, буғай. Күп тә кәрәкмәҫ ине, алыҫ ҡалманы бит, — тип үртәнде Марат.

Мәһәҙи ауыл буйлап эҙләнеп йөрөп килде.

— Юҡ, бер тракторист та тапманым, — тине ул, еҙнәһенә шешә һоноп. — Көмөшкә барамы?

— Әллә, бер ҙә һалған юҡ. Былай барырға тейеш.

— Килде бит замана: соляркаға ҡарағанда көмөшкә табыуы еңелерәк, — тип һөйләнде Мәһәҙи.

Марат, баҡ артына ышыҡланып, шешәнең яртыһын һемерҙе лә тракторын ҡабыҙып ебәрҙе.

Ҡайтып еткәс, Мәһәҙи еҙнәһен өйгә инергә өгөтләне.

— Икәүләп аңлатайыҡ атай-әсәйемә, юғиһә, миңә генә ышанмаҫтар...

Ҡурҡып ҡына өй ишеген астылар. Унда әсәһе менән Шәрифәне күреп, Мәһәҙи үрле-ҡырлы һикерҙе.

— Йә Хоҙайым, рәхмәт инде һиңә! Бәғеркәйем иҫән-һау ҙаһа!

Шәрифә, арба ҡолағас, һарыҡтың ыҫҡынып ҡасыуын, ә үҙе автобус менән ҡайтыуын һөйләне.

— Һау ҡайтҡас булған. Туйға үҙебеҙҙең һарыҡты һуйырбыҙ әле, —тине тынысланып Мәһәҙи.

* * *

— Һуҙма, бабай, алып ҡайтыр кәрәк араҡыны, — тип ныҡышты көн дә әбей.

— Бергәләп бармаһаҡ булмаҫ, — тинем уға. — Мин бит ҡоҙаларҙың өйөн белмәйем.

— Бәй, ауыл ерендә өй тапмаҫмын тип ҡурҡаһыңмы?..

— Фамилияһы, исеме кем һуң уның? Адресы...

— Адресы нимәгә кәрәк. Тура бараһың да өсөнсө тыкрыктан һулға боролаһың. Кисеүҙе сыккас, унға, һарыға буялған ҡоҙоҡка еткәс, һулға борол. Күк рәшәткәле өйҙә еткәс тә тыкрыктан түбәгә күтәрел. Унға караһаң — ҡоҙаның өйө күренеп тора. Ҡыйығы йәшел. Ҡапкаһы "инегеҙ" тигән кеүек тауыш сығарып асыла. Ихатаһында егеүле ат тора. Ҡош-ҡорт тулып йөрөй. Әтәсе ҡыҙғылт-һары...

Әбейгә карап ҡул һелтәнем дә Мәрүәткә өндәштем:

— Кейәү кешенең исем-фамилияһы, адресы нисек?

— Исеме Рөстәм, ә фамилияһы менән адресын белмәйем.

— Ярай, исемен белгәс тә етер...

Мыйыҡ ауылының осонда хеҙмәттәшем Шамил йәшәй. Ғәҙәттәгесә, ул бөгөн дә капка төбөндә тәмәке көйрәтә. Ни тиклем ғәжәп булмаһын, Шамил да ҡоҙалар көтә ине. Кинйә ҡыҙы Фатима кейәүгә сыҡкан һәм туй үткәрәләр икән. "Ҡоҙалар трактор менән килергә тейеш", — тине хеҙмәттәшем.

Атыма бер һыҙғырып та өлгөрмәнем, юлдың һул яғындағы ҡайынлыҡка ла килеп еттем. Ошонда колаған инде трактор арбаһы. Килен һау ҡалыуына шөкөр, һарығы хәйергә булһын.

Мин буйҙаҡ сакта был ҡайынлыҡ йәш кенә саукалыҡ ине. Минең менән булған бер ваҡиғанан һуң "Кәләш төшөп калған саукалыҡ" исемен алды, бара-тора "Кәләш саукалығы" булып калды.Кырк йыл элек минә Гөлсөмөмдө урларға тура килгәйне бит. Дөрөҫ, быны үҙе менән килешеп эшләнек. Юғиһә, ата-әсәһе уны Фәрукка вәғәҙә иткәндәр ине.

— Фәрук мине көнө-төнө карауыллай. Шәберәк, ерән айғырыңды егеп кил, — тигәйне Гөлсөм. — Атай-әсәй төпкө өйҙә йоҡлайҙар, ә мин — ситке бүлмәлә. Толоп, ҡулды бәйләргә бау килтер. Ауыҙымды үҙем бәйләп сығырмын.

Бөтәһе лә килешелгәнсә булды: мин Гөлсөмдөң ҡулдарын артка бәйләнем дә, толопҡа төрөп, кошевкаға һалдым. "Бәғрем", — тиеп үбеү ниәте менән ирендәрен эҙләйем, тик сепрәк тойоп, еүеш танау осон ғына супылдаттым да толоп яғаларын кымтып ябып ҡуйҙым.

— Хәҙер Гөлсөмөм мәңгелеккә минеке! Быйа Арыҫлан дуҫыма барып етәйек. Шунда ҡауышырбыҙ. Бөгөнгә өйгә кайтып тормайбыҙ, юллап килеүҙәре ихтимал...



Шәп барғанда төшөп ҡалмаһын тип, толоптоң бер еңенә ултырҙым да, ерән айғырға ҡайтырға рөхсәт итеп дилбегәмде бушаттым...

Болотло, ҡараңғы төн. Буран сығырға торған кеүек. Атым һәлмәк кенә юртып бара. Татлы хистәргә бирелеп саукалыҡка яҡынлағанымды һиҙмәй ҙә ҡалғанмын. Ҡолағыма ат бышкырыуы ишетелгәндәй булды. Арттамы, алдамы? Әллә үҙемдекеме?

— Фаруктан башка кем булһын? Минең айғырҙы ҡыуып етә алғандай ат унда ғына булырға мөмкин, — тип үҙ алдыма һөйләндем.

Артта ат ҡыуған ир һәм катын-ҡыҙ тауыштары ишетелде. Айғырымды ҡырҡа уңға бороп, ағаслыҡтар араһына индем. Тынысланып та өлгөрмәнем, мин боролған урында шау-шыу ҡупты. Күп тә үтмәй Гөлсөмдәрҙең ауылы яғына егеүле ат сабып үтте. Бушка ҡуркҡанмын, ахры, тип, буласаҡ кәләшем алдында уңайһыҙланып киттем. "Өшөмәнеңме, бәғрем?" — тип өҫтөн йүнәтеп ябыу ниәте менән санаға эйелдем. Толопҡа тотоноуым менән ул һурылып килеп тә сыҡты. Яңынан төрөп ҡуяйым тип һәрмәһәм... Гөлсөмөм юк! Тиҙ генә сана тирәһен ҡараным, аяҡ-ҡулдарым менән көрттө актарҙым.

— Ҡайҙа булдың, йәнем? Гөлсөм, йәшенмә, сыҡ!

Тиҙ генә юлға сыктым, боролған урынды байҡаным. Юҡ. Юл буйлап бер алға, бер артҡа саптым. Бер нәмә лә күренмәй ҙә, ишетелмәй ҙә. Өмөттәрем һүрелгән һайын нәфрәтем көсәйҙе. Барыһы ла башыма етте: саукалыкта ҡапыл боролғанда Гөлсөм толоптан шыуып төшөп ҡалған, ә арттан килгән Фәрук уны тапҡан да, санаһына тейәп, кире ауылына боролған.

Саукалыкты пыр туҙҙырып әйләнеп сыктым да сыбыртҡы осо ла теймәгән айғырыма ҡолас йәйеп һуктым. Әйтерһең дә, тәртә араһында айғыр түгел, Фәрук тора!

Инде өйләндем тип торғанда кәләшендән ҡолаҡ ҡағыу егетлек түгел. Мин хатаны төҙәтеү ниәте менән шунда уҡ кире Гөлсөмдәрҙең ауылына юл алдым. Бәхетемә, капкаға ла, өй ишегенә лә бик һалынмаған ине. Көтөп, өмөтләнеп яталыр инде бәғрем. Тертләүҙән ҡысҡырып ебәрмәһен өсөн тәүҙә ауыҙын баҫырып бәйләргә кәрәк. Бесәй кеүек кенә баҫып ситке өйҙөң урындығына яҡынлаштым. Йөрәгем дөпөлдәүенә Гөлсөмдөң тын алыуы ҡушылды. Һөйгәнемдең татлы еҫтәре танауыма бәрелгәндә итәк остарын башы аша тартып бәйләп тә ҡуйҙым. Алдан әҙерләгән салбар ҡайышы менән ҡулдарын нескә билдәренә һыктырҙым. Боттарынан күтәреп, эсе менән

яурынымa һалдым. Ишектәрҙе лә япмай, тиҙерәк санама һалдым да толопҡа ураным.

Гөлсөмдө урлап алыу теләге миндә электән бар ине. Тик һуңғы минутта ғына уны күтәреп ҡасырға көсөм етмәҫ тип кисектерә килдем. Ә бөгөн ярһығанға күрәлер инде, Гөлсөмөм еп-еңел тойолдо.

Бер ауыҙ бешкәс, сыбыртҡы осо менән ҡыҙҙың аяҡтарын санаға бәйләп ҡуйҙым. Хәҙер Гөлсөмөмдө Фарук түгел, шайтан үҙе лә тартып ала алмаясаҡ. Икенсегә урлау мөхәббәтемде икеләтә дөрләтеп ебәрҙе. Теге саукалыкка еткәс, Фәрукка ус итеп, Гөлсөмөмдөң бәйле ауыҙын ысҡындырып, ирендәренән оҙон-оҙаҡ һурып-һурып үптем, "ыһ" итеп кенә ҡалды. "Хәҙер миң теге Мортаза түгел. Арыҫлан дуҫка ла барып тормай, туп-тура өйгә, атай-әсәй алдына индереп, мәсьәләне ярып һаласаҡмын!"

Өйҙә ишек бикле ине. Ҡарттарҙы уятырға баҙнат итмәй, кәләшемде күтәреп, һөтләккә йүнәлдем. Гөлсөмөмдө урындыҡҡа һалып, толобон яптым да мейескә ут тоҡандырҙым.

— Һөтләк имшене, Гөлсөм. Тор, сәй эсәйек! — тип, толопто асып, уның эске күлдәгенең итәген төшөрҙөм.

— Мортаза, һинме бында? Нинә өйҙә йоҡламайһың, һөтләктә һыуыҡ таһа! — тигән тауыш ишетелде.

— Атай! Хәҙер инәбеҙ, көтөп тор.

— Кем менән инәһең? Кем ята һуң унда?

— Атай, мин... мин кәләш алып ҡайттым. Гөлсөмдө...

— Эх, Мортаза, Мортаза! Киленде һыуыҡ һөтләктә тоталармы ни... — тип атайым, толопло йомғаҡты еңел генә күтәреп алды ла, өйгә индереп, әсәйем янына түшәккә һалды.

— Тор, әбей, Мортаза килен алып ҡайтҡан. Урлап, шикелле, шайтан малай...

Әсәйем минең баймабашлыҡҡа һукранғандай итте лә, тороп ултырып, толопто асып маташкан атайыма ярҙамлаша башланы. Шунда минең өҫкә бер биҙрә һыуыҡ һыу һипкәндәй булды: атайым менән әсәйем араһында ап-аҡ сәсле, кәүшәйеп бөткән тешһеҙ ауыҙлы, сырыш йөҙлө әбей ултырмаһынмы?! Был бит Гөлсөмдөң өләсәһе! Йәнде үртәп йылмая биреп ултыра, күҙҙәрендә өмөт осҡондары ялтырай.

Шулай ҙа һуңынан был осҡондарҙың файҙаһы тейәсәк әле. Гөлсөмөмдөң атаһы менән әсәһе Фәрук менән мине сағыштырып һайлағанда, тәүгеһе — көндәшемә, икенсеһе үҙемә өҫтөнлөк биргәндә, "Минә Мортаза оҡшай. Гөлсөмдөң кейәүе ул буласаҡ!" — тип, үлсәүҙе минең файҙаға ауҙарып ҡуясаҡ әле ул.



Ә әлегә күҙ алдарым ҡараңғыланып китте. Сайкала-сайкала барып ерән айғырҙы ҡосаҡланым. Арыҫландың өйөнә еткәнсе ҡолағымда атайымдың: "Мортаза, ҡайт!", "Мортаза, борол!" — тигән тауышы яңғырап торҙо. Дуҫымдың өйөнә яҡынлашҡас ҡына тыныслана төштөм. Арыҫлан да, ҡатыны Гөлсирә лә — киң күңелле кешеләр, һәр ваҡыт минең хәлемә инә торғайнылар. Был юлы ла уларҙың өйөндә мине яҡшылыҡ, бәхет көтә кеүек ине.

Тотҡаға ҡағылып та өлгөрмәнем, ишек асылып китте лә мине эскә тартып алдылар — күҙ асып йомғансы мин Гөлсирә менән... Гөлсөм ҡосағында инем!

Арыҫлан ҡатыны менән төнгә ҡалып ҡунаҡтан ҡайтып килгәндәр.

— Һуңға ҡалдыҡ, ҡыу атыңды, бурандан алда ҡайтайыҡ, — ти Гөлсирә.

— Шым әле, бисәкәй! Ниндәйҙер ат бышҡыра түгелме?

— Кем йөрөһөн төн уртаһында?

— Туҡта әле... — Арыҫлан атын уңғараҡ тартып туҡтай. — Ҡара әле... Юл ситен ҡара... Нимә ул? Ҡыбырлай...

— Төш һуң! Бир минә дилбегәңде...

Улар юл буйында ятҡан кешене саналарына һалыу менән ҡаршы яҡтан пар ат саптырып үтеп китә. Арыҫлан менән Гөлсирә өйҙәренә ингәс кенә Гөлсөмдө танып ҡала. "Арыҫлан, Мортаза юлда ҡалды бит. Әйҙә, алып ҡайтайыҡ!" — тип үтенгәс, өсәүләп кире саукалыҡҡа китәләр. Ә кәләш урлаусы егет һыуға төшкән кеүек юғала. Арыҫлан йоҡларға ята. Гөлсөм менән Гөлсирә таңға ҡәҙәр һөйләшеп, мине көтәүелләп ултыралар икән...

* * *

Ҡоҙаларҙың ауылына инеп, һарыға буяулы дүрт ҡоҙоҡто үткәс кенә үҙ ахмаҡлығымды аңланым.

— Үәт, нишана! Алйыған әбей һүҙенә ышанып сығып китсәле!

"Инегеҙ" тип шығырлап торған ҡапҡаны эҙләй-эҙләй тамам арығас, бер өйөр уҡыусы балаларға тап булдым.

— Егеттәр, Рөстәм исемле ағай ҡайҙа йәшәй икән?

— Беҙҙең урамда...

— Беҙҙең урамда ла бар Рөстәм ағай. Өйөбөҙгә ҡаршы йәшәй...

— Йылға аръяғындағын һорайһығыҙмы, әллә бирьяғындағымы?

— Иҫке тирмән эргәһендәгелер ул!

— Әбейенең исеме кем? Гөлбаныу түгелме? — тип һораны бер ҡыҙ бала.
— Юу-ук, уның әбейе юҡ. Кәләш алырға ғына йыйына.
— Улайһа, минең ағайым инде. Кәләш алам тип, аҡсамды тартып алды. Дүртенсе класты бөтәм дә Айгөлгә өйләнәм, ти.
— Ул Зарифаның Рөстәм ағаһылыр әле. Армиянан Хохлушка исемле кәләш алып ҡайтырға йыйына.
— Юҡ, уның кәләше Мәрүәт исемле буласаҡ, — тинем мин.
— Ә ул матурмы? — тип һораны бығаса шым ғына торған ҡыҙыҡай.
— Матур.
— Сәсе бөҙрә, күҙенә төшөп торамы?
— Эйе.
— Улайһа, минең Рөстәм ағайым инде. Әйҙә, ҡайтайыҡ.
Арҡаһына үҙенән дә ҙур портфель таҡҡан ҡыҙ арбама еңел генә менеп ултырҙы.
Нәк шул, Гөлсөмөм өйрәтеп ебәргән өй! Ҡапҡаһы ла шығырҙап асылды. Өтәстәре лә ҡыҙғылт һары. Тик егеүле ат ҡына күренмәй. Уның урынында ҙур ҡашҡа һарыҡ бәйле тора.
— Яҙған мал кире ҡайтты бит, ҡоҙа. Ат менән яйлап алып ҡайтырһың әле. Тракторға бер ҙә күңелем ятмағайны, — тип һөйләнде ҡоҙа.
Ҡыҫҡаһы, ҡоҙаларҙа һыйланып, бер йәшник араҡыны арбаның ал яғына ултыртып, артыма һарыҡты һалып ҡайтырға сыҡтым. Мөдәрис ойоҡ менән бәйләнс. Ҡайҙа китһен, янбаш-ҡабырғаларымды йылытып ҡына килә һарыҡ. Шулай ҙа Кәләш сауҡалығына еткәнсе артҡа боролмай ғына һарыҡты бер-ике, араҡы йәшниген өс-дүрт мәртәбә һәрмәштереп ҡуйҙым. Тукта әле, тейем, бынау шешәләрҙең береһенән бер-ике уртаһам ни була?! Арыҫландың ауылындағы магазиндан яңыһын алып ҡуйырмын әле урынына. Салғынан эшләнгән үткер бәкемде сығарып, бер аҡбашты "салып" ебәрҙем. Араҡы йылыһын һарыҡ йылыһы менән сағыштырып буламы инде! Эсте ҡыҙҙырып та ебәрҙе. Һул ҡулымды балтырыма терәп бәкене яптым, ә уңы менән һарыҡты эҙләйем...
— Тр-р-р, бр-р-р... — уртымда нимәләр булһа, барыһы ла сәсрәп китте. Әйләнеп ҡараһам, һарыҡ илле метр самаһы китеп тә өлгөргәйне. Атты сауҡалыҡҡа индереп туғарҙым. Дилбегә менән ыңғырсаҡты арбаға ырғытып, йәшник өҫтөнә бер нисә ус бесән йолҡоп һалдым да ҡоҙаларҙың ауылына һыбай саптым. Нисек булһа ла, ҡоҙаларға һиҙҙермәй һарыҡты тоторға кәрәк.



Икенсегә ауыҙ асып ҡалыуы әҙәм мәсхәрәһе бит. Фәрүк ишетеп ҡалмаһын!..
Ауылға һарыҡ менән ярышып барып индек. Күп кенә һарыға буялған ҡоҙоҡтар янынан сабышып үттек. Ҡаршы килгән автобустың мин ҡағиҙәгә ярашлы уң яғынан, ә һарыҡ һарыҡ инде, һул яғынан үттек. Хайуан туп-тура ике ҡатлы ҙур йортҡа ынтылды. Бәхетемә, был күләгә эҙләгән ваҡ малдың сандауы булып сыҡты. Беренсе ҡаттың коридоры тулы кәзәләр. Һарыҡ та шулар араһына инеп юғалды. Атымды бәйләнем дә, кеҫәмдән теге эсеп бөтмәгән яртыны эҙләнем. Ҡулым шешә урынына бәкс тартып сығарҙы. Ҡорал күргәс, ашҡаҙаным ярты түгел, литр төшкәндәй ҡыҙып китте. Һарыҡты ниндәйҙер дәрт менән коридорҙан һөйрәп сығарҙым да аша атланған көйө йортто бер нисә тапҡыр әйләнеп сыҡтым. Мөгөҙө лә юҡ, исмаһам. Ҡибла ҡайһы яҡта икән? Ни булһа ла булыр тип, һул ҡулым менән һарыҡтың маңлай йөндәрен тоттом да уң ҡулым менән, эстән доға ҡыла-ҡыла, үңәсен ҡырҡып та ебәрҙем. Ярһыған ҡан атылып китеп, йорттоң аҡ стеналарын ҡып-ҡыҙылға буяны. Ә үҙем Кәләш сауҡалығынан һуң тәүге тапҡыр иркен һулап, башымды күтәрҙем. Мине уилаған кеше уратып алған ине.

— Кем булаһығыҙ?
— Мортаза.
— Документығыҙ?
— Юҡ.
— Бәкегеҙҙе бирегеҙ әле...
— Ә һеҙ кем һуң?
— Мин — сельсовет председателе Вадим Фәрукович. Был йорт — ауыл Советы. Һеҙ беҙҙең күҙ алдында һарыҡ урлап һуйҙығыҙ. Атығыҙҙы, бәкегеҙҙе һәм һарыҡты алабыҙ.
— Мин урлашманым. Был һарыҡты мин ҡоҙанан алдым. Ул — туй һарығы.
— Ҡоҙандың исеме кем?
— Ҡоҙа.
— Өйөн беләһеңме?
— Беләм, шикелле. Һарыға буялған ҡоҙоҡ янынан үтергә кәрәк. Ҡыйығы йәшел. Ҡапҡаһы "инегеҙ" тип шығырҙап асыла. Өтәсе...

Күмәкләшеп ҡыҫҡа тиклем йәшел башлы өйҙө эҙләнек. Ахырҙа участковый мине үҙенең бүлмәһенә бикләп китте. Ат менән һарыҡты сельсовет хеҙмәткәрҙәре алып ҡайтты.

* * *

Төндә ямғыр яуғас, бригадир ауыл йәштәрен япраҡ аҙыҡ әҙерләргә ебәрҙе. Кәләш сауҡалығына барып, юл ситендәге ҡайындарға теймәй, төпкәрәк инеп ҡырҡығыҙ. Кискеһен миндектәрегеҙҙе Марат менән Мәһәҙи тейәп ҡайтырҙар", — тине ул.

Йәштәр арбалағы бер йәшник араҡыға юлыҡҡанда төш ауған ине. Ағастар ышығында һалҡын ғына килеш ятҡан эсемлек һыуһаған, эҫегә янған егеттәрҙең ҡорһағына күсте. Марат менән Мәһәҙи килгәндә шешәләрҙең яртыһы буш ине.

— Егеттәр, был минең атайҙың арбаһы ла баһа. Ә үҙе ҡайҙа икән? Аты?..

— Беҙ белмәйбеҙ. Арбаһы ла, араҡыһы ла беҙҙеке. Беҙ таптыҡ, — тип талашты иҫерек япраҡ бәйләүселәр.

Мортазаны ҡысҡырып саҡыра-саҡыра тейәнеләр Марат менән Мәһәҙи япраҡ аҙыкты "Беларусь" арбаһына. Ахыры, буш шешәләрҙе йәшниккә тултырып алдылар. Ат арбаһының тәртәләрен трактор арбаһының бортына таҡтылар. Бөтәһе лә ике арбаға бүленеп тейәлде. Был "поезд" ҡуҙғалмаҫ борон кемдер берәү: "Әйҙәгеҙ, быуа янында туҡтап, һыу инеп ҡайтайыҡ!" — тигән тәҡдим индерҙе. Бөтәһе лә уны берҙәм күтәреп алды.

— Егеттәр, давай, тағы бер-ике шешәне бушатабыҙ ҙа, эсенә һыу ҡойоп, ҡупшылап ябып ҡуябыҙ.

Был тәҡдимде шул һыуҙа ҡойоноп туйған Мәһәҙи индерҙе, һәм уны ла бөтәһе лә хупланы.

— Барыбер тиҙҙән сухой закон сығасаҡ.

— Туйҙарҙы араҡыһыҙ үткәрәсәкбеҙ. Горбачев указға иртәгә ҡул ҡуясаҡ, — тиеште йәштәр.

Көн эҫеһенә шешә градустары өҫтәлгән һайын быуа өҫтөндә "Сәрмән" көйө көслөрәк яңғыраны.

> Сәрмән буйкайҙары туғай-туғай,
> Туғайында һайрай бер турғай...
> Эй-й-й...

Егеттәр, күлдәк-майкаларын сисеп, "Беларусь" борттарына элде. Ҡыҙҙар яулыҡтары менән ат арбаһының тәртәләрен биҙәне. Марат Хәҙисәнең ҡыҙыл косынкаһын воздухоочистителгә ялбыратып бәйләп ҡуйҙы. "Поезд" туй карауанына оҡшап ҡалды.

Алда аҡ "Жигули" күренде.

— Милиция! — тип юраны ҡатындар.



— Араҡыны йәшерегеҙ! Өҫтөгөҙгә кейегеҙ! — Мәһәҙи, трактор тәҙрәһенән муйынын һуҙып, әмерҙәр бирҙе. Бөтәһе лә кейемдәрен кейҙе, ә ҡыҙыл косынка ялбырҙап тороп ҡалды. "Беларусь" аҡ "Жигули"ға терәлә яҙып килеп туҡтаны. Машинанан шешә-рюмкалар тотҡан егеттәр сыҡты.

— Хәйерле сәғәттә, ҡоҙалар! Исән-һау килеп еттегеҙме? Ғөрөф-ғәҙәт буйынса, рюмкаларҙы бушатмайынса, һеҙгә ауылға юл ябыҡ.

— Беҙ ҡоҙалар түгел, — тип әйтергә асылған ауыҙҙарҙы аштырып тултырылған рюмкалар ҡапланы.

— Кем алда килә — һебә шуға була! — тип ҡысҡырып хужалар машинаға тейәлде. Япраҡ әҙерләүселәр һебә артынан төштө.

— Бригадир туй тураһында бер нәмә лә әйтмәне ләһә, — тип аптыраусылар ҙа булды, тик уларҙың тауышын "Сәрмән" көйө күмде:

— Иртә лә һайрай, кисен дә һайрай,
Һарғайып та үлһен, ти, буғай...

Туй карауаны Шамил ҡарттың йорто алдына килеп туҡтағанда, хужа моңло йырҙан хисләнеп, күҙенән йәш урғылып тора ине.

— Ҡайһылай яҡшы ҡоҙалар! Минең "Сәрмән"де ятҡанды кем еткерҙе икән уларға? Мине хөрмәтләп, шуны йырлап инеп киләләр бит, — тип һөйләнде карт, йәштәрен ҡул һырты менән һөртә-һөртә. Өй ишегенән дә йола буйынса берәү ҙә рюмка тотмай инә алманы. Табын түренә барып етеүгә япраҡ әҙерләүселәр үҙҙәренең кем икәнен оноткайны.

Бер сәғәттәй ваҡыт үткәс, быуа артынан өс "Жигули" тулып ысын ҡоҙалар килеп төштө. Улар, тракторҙары боҙолғас, транспорт эҙләп оҙаҡлағандар икән. "Беларус"та килгән "ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар", һый етеп, кем ҡайҙа етте шунда ҡолап бөткәндәр ине. Аяҡта йөрөгәндәр бер-береһен һыйланы.

Марат ауыҙы кибеп уянғанда әтәстәр ҡысҡыра башламағайны. Ул йәшел һебә туҡымаһын баш аҫтына һалып йоҡлаған Мәһәҙине уятты. Икәүләп өҫтәл янында баш төҙәттеләр ҙә хәсрәт ҡоҙаларҙы берәм-берәм арбаға тейәнеләр. Шул арала уянған хужа менән хуш аяғын сәкәштереп эстеләр ҙә таң әтәстәрен ҡуҙғыртып ҡайтып та киттеләр. Шамил бабай күҙен асып ятҡан ҡоҙағыйына өндәште:

—Ниңә былары ығыҙ ҡайтырға ҡабаланды һуң?

— Аһ-аһ, улар һеҙҙең яҡтар түгелме һуң? Беҙ уларҙы ҡоҙалар тип уйланыҡ...

— Юу-уҡ. Беҙ һеҙҙекеләр икән тип һыйланыҡ. Ҡоҙалар тип яраттыҡ.

Шамил бабай ҡулдарын йәйеп ебәрҙе лә тәмәкеһен тоҡандырҙы:

— Кемдәр булһалар ҙа "Сәрмән"де матур йырланылар, әйтәгүр...

* * *

Үрге ос Сәбилә әбей бабайына аят уҡытты. Гөлсөм дә килде. Ашъяулыҡҡа тоҙ ҡуйып, аятты башларға торғанда Мәмәй ауылынан хужабикәнең һеңлеһе Мөхтәрәмә шаптырҙап килеп инде. Ул һайлап тороп Гөлсөм ҡаршыһынан урын алды. Ҡунаҡтың түҙмәй, ҡуҡандап ултырыуына ҡарағанда бик ҙур сере барлығы һиҙелә ине. Гөлсөмдөң йөрәге урынынан ҡупты. Һүҙенә һәр ваҡыт тоғро Мортазаһы ла ниңәлер һуңланы...

Мөхтәрәмә әбей Мортаза, Гөлсөм һәм Фәруктың "мөхәббәт өсмөйөшө" тарихын яҡшы белә. Заманында үҙе Мортазаны ла, Фәрукты ла тоторға тырышып ҡараны. Әммә яңғыҙ ҡартайҙы...

Доға ҡылыу менән Мөхтәрәмәнең серҙәре ашъяулыҡҡа түгелде.

— Гөлсөм, Мортазаң өйҙәме?

— Юҡ, һеҙҙең ауылға киткәйне...

— Шул иттем шул! Мин килгән автобустың бер яғынан һыбай Мортаза, икенсе яғынан Һаруҡ (Фәрукты ауыл халҡы шулай тип йөрөттө) сабышып үттеләр. Йәйәүләп аттан ҡасып буламы ни?! Бахыр силсәүит яғына һыттылғандыр инде... Улы Вадим шунда эшләй бит.

Өйҙәге барлыҡ тереклек Мөхтәрәмәгә тексәйҙе. Был ҡатындың ауыҙы менән шайтан үҙе һөйләнә:

— Мортаза Һаруҡты маңлай сәсенән тотоп ала ла... үлтерә лә ҡуя...

— Әстәғәфирулла. Ауыҙыңдан ел алһын! Ундай нәмәне ысын булһа ла һөйләмә, — тиеп берәүҙәр Мөхтәрәмәне тыйҙы, икенселәре әҙәм ышанмаҫлыҡ хәбәрҙең аҙағын белмәйенсә туҡтатырға теләмәне:

— Кем кемде үлтергән? Ни өсөн үлтергән? Иҫерек булғандармы? — тигән һорауҙар ямғыры яуҙы.



— Кем әйтте, Мөхтәрәмә? Башта үҙең күргән кеүек һөйләп киткәйнең? — Сәбилә апайының аш һыуынмаҫ элек был әңгәмәне тиҙерәк йомғаҡлағыһы ла, был шаҡҡатҡыс хәлдең айышына төшөнәһе лә килгәне йөҙөнә сыҡҡайны.

— Мин нисек күрәйем? — тип ҡулдарын йәйҙе Мөхтәрәмә. — Автобуста ауылдың был осонда ғына ултырҙым бит. Ә үлтереш тураһында алдан ултырып килеүселәр һөйләне. Ап-асыҡ ишеттем: "Мортаза Һаруктың үңәсен ҡырҡты", тинеләр.

— Хәҙер Мортаза ҡайҙа һуң?

— Милицияла инде. Кеше үлтергән кеше ҡайҙа булһын...

Аят ашының рәте китте. Әбейҙәр ҡабыр-ҡапмаҫ көйө доға ҡылдылар ҙа таралыша башланылар.

Гөлсөмдөң шаңҡытҡыс хәбәрҙән тамам ҡобараһы осҡайны. Мөхтәрәмә һөйләнеп ултырҙы, үҙе ҡаш аҫтынан ғына үсле күҙҙәре менән уны күҙәтте. "Шәп булды һиңә. Бер юлы ике абышҡанан да яҙҙың!" — тип үсәне ул. Бер нисә ҡарсыҡ Гөлсөмдө оҙата китте.

— Ышанма ул шардыуан Мөхтәрәмәгә!

— Күрмәгән дә инде, ишеткән генә. Ә ул һәр ваҡыт үҙе теләгәнсә ишетә.

— Мужыт, Мортазаң был ваҡытта өйҙә һине көтөп ултыралыр әле.

Юҡ, Мортаза ҡайтмаған ине. Гөлсөм, ултырып сыҙамай, Мәмәй ауылына барып ҡайтырға ҡарар итте. Тик автобуста барғанда планы үҙгәреп, Арыҫлан менән Гөлсирәнең ауылында төшөп ҡалды. Ә иртәгәһен ҡояш та ҡалҡмаҫ борон, ат егеп, өсәүләп Мәмәйгә киттеләр.

* * *

Иртүк ауыл Советы рәйесе менән участковый минән һорау алды.

— Һеҙ, гражданин Мортаза, йәштән урлашағыҙ икән, — тине милиционер бығауҙарын әҙерләп.

— Нисек йәштән үк? Беҙ йәштән колхозға бил бөктөк. Ҡайҙа беҙгә урлашырға ваҡыт! Ҡайҙа минең ат? Сығарығыҙ мине! Һарығығыҙ үҙегеҙгә булһын.

— Тынысланығыҙ, гражданин Мортаза. Йәш сағығыҙҙа Вадим Фәруковичтарҙың ауылынан Гөлсөм исемле ҡыҙҙы урлағанһығыҙ. Кисә хатта ауыл Советы йорто алдында һарыҡ урлап тотолдоғоҙ!

"Бөттө баш! Ҡаптың, Мортаза!" — тип уйланым. Силсәүит рәйесе теге Фәруктың малайы була лабаһа?! Шабаш! Фәрук былай ғына ҡалдырмаç. Иң тәүҙә атымдан яҙҙырыр...

Шул мәлдә бүлмәгә һарыҡ-кәзә есе тултырып ишек шар асылды, һәм бер-бер артлы Гөлсөм, Фәрук, Арыçлан менән Гөлсирә, мин исемдәрен белмәгән ҡоҙа-ҡоҙағый килеп инделәр. Ҡатыным йән дошманым менән йәнәш тороуына йәнем үртәлеп, мин ишеккә атылдым. Шуға аптыраным: силсәүит менән участковый мине туктатырға ла уйламаны. Ауыл Советы йорто янында атым бәйләүле тора ине, аҡ сепрәккә төрөлгән һарыҡ аттың арҡаһына һалынған. Дилбәгәне ысҡындырайым, тип үрелһәм, бәкем дә шул һайғауға ҡаҙалған булып сыҡты.

"Гөлсөмдөң өләсәһенеке кеүек кәүшәйеп бөткән ирендәренән хәҙер әйҙә Фәрук үпһен", — тинем дә йән асыуы менән атымды ҡыуаланым. Бер тынала Кәләш саукалығында булдым. Ҡалған яртыны эсеп, арбамды егеп, яйлап ҡайтырмын әле. Әллә кире Мәмәйгә барып, Гөлсөм менән Фәрукка үс итеп, Мөхтәрәмә әбейҙе алып ҡайтырға инде?!

Аттан төшмәй генә арба ҡалған урынға үттем. Йә Хоҙай! Бында әллә комета төшкәнме, әллә торнадо үткәнме?! Ҡайындар барыһы ла ботаҡһыҙ. Ә арба менән араҡыларҙан елдәр исҡән. Ул урында комета ярсығын хәтерләтеп берәү ята.

— Ҡайҙа минең арба, араҡы? — тип уға аяғым менән төрттөм.

— Кем һин? Ә-ә-ә, Мортаза. Милициянан ҡастыңмы ни?..

— Һин үҙең кем? Минең ҡасҡанды ҡайҙан беләһең? — тип яҡыныраҡ килһәм — Мөхтәрәмә икән! Тьфу, кемде уйлайһың, шул алдыңа килә.

— Һеҙҙәң ауылға аятка барғайным, автобусҡа һуңлап, төнгә ҡалдым. Ял итәм тип ятҡансы йоҡлап киткәнмен. Эй, асыҡтым, ашарға берәй нәмәң юҡмы? — тип һөйләнде Мөхтәрәмә.

Йәшлек һөйәркәһе йәл булып китте. Мин усаҡ ҡабыҙып, һарыҡтың ҡулын өтөргә куштым да үҙем бер ярты алып килеү ниәте менән күрше ауылға саптым.

Мин килгәндә Мөхтәрәмә сейле-бешле, тоҙһоҙ ит кисәген өҙгөләп ашап маташа ине. Кесәмдән бәкемде сығарҙым да шешәне асырға тотондом. Шул саҡ ҡоттарҙы осороп артта: "Ҡулдарығыҙҙы күтәрегеҙ, юғиһә, атам!" — тигән тауыш янғыраны. Бер аҙҙан: "Каршылашыу мәғәнәһеҙ! Саукалык ҡамалған!" — тип өçтәне. Мин баяғы участковыйҙың тауышын таныным һәм, ҡулдарҙы күтәргән килеш, уға боролоп баҫтым.



Миңә эйәреп Мөхтәрәмә лә шулай эшләне. Ошо ваҡытта Кәләш саукалығына бер "УАЗик" килеп туктаны. Унан шау-гөр килеп Гөлсөм, Арыçлан һәм Гөлсирә килеп төштө. Нисек Фәрукты эйәртмәгәндәр? Уларҙың көлкөләрен саҡ тыйып тороуҙарын һиҙеп, уғата һарыуым ҡайнаны. Участковый баяғы миңә әҙерләгән бығауҙарын алып ниңәлер Мөхтәрәмәнең ҡулдарына кейҙерә башланы.

— Ниңә мине аристауать итәң? Бына эргәмдә тора лаһа ҡасҡын! Ә мин уны тоторға ярҙамлаштым, — тип илаулап сәрелдәне Мөхтәрәмә әбей.

Мин тамам аптырауға ҡалдым. Милиционер: "Гражданин Мортаза, һин азат, ҡулдарыңды төшөр", — тине. Унан машинанан төшкәндәргә күҙ ҡыçып, "Гражданка Мөхтәрәмә, сит ауылға барып ғәйбәт һөйләп, "һарыкты" "Һарукка" әйләндереп йөрөгәнегеҙ өсөн һеҙгә бер тәүлек арест", — тип өçтәне.

Ағастар ышығында участковыйҙың "Урал" мотоциклы йәшерелгән булған икән, улар ҡуҙғалып та китте. Мөхтәрәмәнең илағаны бер аҙ ишетелеп торҙо ла тынды. Мин хәлден нисек булғанын ҡатынымдың һөйләгәненән генә аңланым. Баҡһаң, улар өсәүләп таң менән Вадимға килеп, ҡоҙаларҙы эҙләп табып, минең туй һарығын һуйғанымды аңлатҡандар икән. Иртәнсәк Вадим менән участковый мине сығарырға килгәндәр, ә йәш саҡта Гөлсөмдө урлауымды исҡә төшөрөп шаяртып алмаҡсы булғандар... Әле шаян милиционер Мөхтәрәмә әбейҙе лә үҙенсә әҙерәк өркөтөп алмаҡсы икән. "Зәрә шаштырып ебәрмәһә ярар ине, — тип тороп ҡалды Арыçлан. — Олоғайғас, кемдең булһа ла ҡолағы ҡата инде. Әле маладис әбей ул. Автобуста иң алда ултырып арттағылар нимә һөйләшкәнен ишеткән. Тик бер һүҙҙе яңылыш аңлаған: "һарыҡ"ты "Һарук" тип. Улай тиһәң, йәш саҡта беҙ уны былай ҙа "Һарыҡ" тип үсекләй торғайныҡ".

Шул ваҡыт беҙҙең ауыл яғынан "Беларусь" күренде. "Сәрмән" йырын һуҙа-һуҙа, тракторға тағылған ат арбаһынан Мәһәҙи, Шәрифә һәм Мәрүәт килеп төштө. Ҡыҙымды машинаға саҡырыуына ҡарап мин "УАЗик" водителенең кейәүем Рөстәм икәнен аңланым.

— Нимә ҡыланаһығыҙ? — тип екерҙем улыма. — Сисегеҙ арбамды!

— Атай, ауыл йәштәре араҡыңды табып эскән, ә беҙ арбаңды өйгә алып ҡайтҡайныҡ, — тине Мәһәҙи.

— Хәҙер арбаңды кире килтерҙек, араҡыһын да табып бирербеҙ, — тип өçтәне Марат кейәү.

Һәр кем Кәләш сауҡалығынан үҙ техникаһына ултырып таралды. Беҙ, Арыҫлан менән Гөлсирәне ауылдарына төшөрөп ҡалдырҙыҡ та, Гөлсөмөм менән йәнәш ултырып, “Сәрмән”де йырлай-йырлай ҡайттыҡ. Төшөп ҡалмаһын тип әбейемде һыңар ҡулым менән юл буйы ҡосаҡлап барҙым.



# Бәләкәй педсовет

Кеҫәгә диплом инеп ятҡас, беҙ, кисәге уҡыусылар, ҡапыл ғына уҡытыусылар булдыҡ та ҡуйҙыҡ. Дипломға “ауыл хужалығын механизациялау инженеры” тип мисәт баҫылғас, һөнәрселек училищеһы эш урыныбыҙ булып китте. Беҙ уҡытҡан тракторист, шофер, сварщиктар, йәнәһе, ауыл хужалығын механизациялайҙар.

Уҡытыу тиһәк тә, кем кемде уҡытҡандыр инде?! Тик егерме йыл тирәһе әйләнгес һарыҡ кеүек курсанттар менән парта тирәләй өйөрөлә торғас ҡына үҙемде инженер һымаҡ хис иттем. Гараждарҙа, мастерскойҙарҙа, машина-трактор араһында йөрөгән халыҡ ул бер төрлөрәк, башҡаларҙан айырылып тора тиһәм дә хата булмаҫ. Бик ябай, ышаныусан, ярҙамсыл, берҙәм һәм эшһөйәр кешеләр. Солярка, бензин, май еҫе улар өсөн хушбыйға әйләнгән. Эш хаҡын ары торһон, машина-трактор тауышынан да ләззәт табалар. Уларҙың үҙ ҡәғиҙәләре, үҙ закондары: бер ваҡытта ла һатмайҙар, һатып алмайҙар. “Бартер” тигән һүҙ ҙә шоферҙар араһынан сыҡҡан, тиҙәр. Инфляция юҡ, хаҡтар борон нисек, хәҙер ҙә шулай: поршень — бер ярты, коленвал — литр, ә артҡы мост, двигатель хаҡы “кубышка”ға барып етә. “Бер ваҡытта ла хаҡына ҡарап тормайбыҙ, иң мөһиме, училище майҙанында көнө-төнө трактор менән курсанттар тауышы гөрләп торһон! ” — бына шундай беҙҙең девиз.

Михайловка ауылындағы инкубатор менән ярышып булмаһа ла, СПТУ-ла йыл да 300 – 500 механизатор сығара инек. Механизатор ғына түгел, һалдат, танкист, яҡшы өй хужаһы, йә хужабикәһе ине улар. Араҡы, тәмәке, ҡыҙ-ҡатын менән дә үҙҙәрен нисек тоторға белеп, ҡайһы осраҡтарҙа бер ҡыҙ икәүгә әйләнеп, беҙҙең пландарҙы тултырып таралыша торғайны егеттәр. Тәрбиә эше буйынса беҙҙең махсус белем булманы, әллә шуға инде, бер ваҡытта ла араҡы, тәмәке еҫен татымаған, бер мәртәбә лә тәҙрә ярмаған, ҡыҙҙар үпмәгән егет механизатор, йә һалдат булырға хаҡы юҡ тип фекер йөрөттөк. Ул урамға ҡаҙап ҡуйылған бағана түгел дә баһа?!..

— Эс, сирҡанма, — тине Раил Тәлғәткә. — Беҙ заманында отстойник түгел, поршендән эсә торғайныҡ.

— "К-700"кымы, әллә "Алтай"ҙыкы менәнме?! — тип һораны Тәлғәт. Унын күк күҙҙәре сеялка тәгәрмәсендәй булғайны. Тәлғәт — коммунист, быйыл ғына институт бөтөп килгән татар егете. Һүҙ һайын үҙенең белемен күрһәтергә маташып көлкөгә лә ҡалып бөтә. Бөгөн дә шулай Илфаттың: "Пусковой двигателенең поршене менән", — тигән яуабына: "Тултырыппмы?" — тип һораны. Ул һаман да отстойникты бушатмаған ине әле.

— Поршенде тултырып булмай, уның ике яғында ла "палец" урыны — тишеге була, — тип аңлатты был бәләкәй "педсоветты" алып барыусы хужаның урынбаҫары Нәғим. "Педсовет" Тәлғәттең класы төбөндәге бәләкәй генә бүлмәлә — кондейкала бара. Көн тәртибендә бер мәсьәлә: "Тәлғәтте үҙебеҙҙең араға ҡабул итеү, взнос — ике шешә".

— Тәлғәт кустым, айлыҡ эш хаҡың күпмегә барып етә? — тип атайҙарса ҡыҙыҡһынды пенсияла булһа ла эшләп йөрөгән Юнир ағай. Ул "взаимопомощь" кассаһының председателе ине.

— Шул 80 һум инде, — тине Тәлғәт, — ярай әле, ҡатын да эшләй. (Уныһы участка больницаһында фельдшер ине).

Отстойник Тәлғәттән Раилға күсте. Раил — бик хәйләкәр, оҫта һүҙле, мәҙәк, техниканы яҡшы белгән тәжрибәле мастер. Шуға күрә лә уға трактор дәрессен алып барырға рөхсәт бирелгән ине.

— Бошонма, Тәлғәт, беҙҙә егеттәр ир кешене юлда ҡалдырып китмәйҙәр, поможем, — тип эсеп ҡуйҙы ла һүҙен дауам итте, — бына бында ултырғандарҙың бөтәһенең дә ҡатындары 8 айлыҡ трактористар курсына яҙылғандар. Уларға айына 86 һум стипендия түләнә. Быйыл да ике төркөмдөң берәүһенә кеше тултыра алмайҙар, буғай...

— Кемгә мөрәжәғәт итергә һуң? — тип Тәлғәт тимерҙе ҡыҙыуында һуҡты. Уның күҙҙәрендә әллә ҡомһоҙлоҡ, әллә хәйләкәрлек оҫҡондары ялтыраны.

— Директорға инде, — тине Юнир ағай. — Минең пенсионер әбейем дә котельныйҙа эшләһә лә яҙҙылар. Хәҙер ай һайын 86 һум аҡса алып "уҡып йөрөй".

— Ә оператор эшен уның урынына кем башҡара һуң? — Тәлғәттең йәш кенә булһа ла түҙемлеге бөткәйне.



— Эштәрен улар үҙҙәре башҡара инде, ә курста ситтән тороп уҡыйҙар, — тине урынбаҫар Нәғим.

"Минең ҡатын төрлө сменаларҙа эшләй шул, төндәрен дежурға йөрөй, етмәһә, бәләкәй бала ла бар, уҡый алмаҫ шул", — тип бошона башлаған Тәлғәтте беҙ: "Аптырама, уларҙы үҙебеҙ уҡытабыҙ ҙаһа, прогул ҡуймайбыҙ, мәҫәлән, һин ҡатыныңа "Электрооборудование"нан, мин "Трактор"ҙан, Илфат "Сельхозмашина"нан дәрес бирә, ә Нәғимдең эше экзамен ҡабул итеп, документ яҙып биреү инде, — тип йыуаттыҡ. — Тик шуныһы, Тәлғәт кусты, ун биш көнгә бер булһа ла ауыҙҙы майлап торорға тура киләсәк шул..."

— Ул беҙҙең өсөн проблема түгел, — тине Тәлғәт тиҙ генә күңелдән иҫәпләп сығарып, — хәҙер үк бер шешә килтерәм.

Бер шешә янына икенсеһе килеп ултырыуын, ғәҙәттә, һиҙмәй ҙә ҡалаһың. Тағы ла ике шешә бушатып, еңде еҫкәп, Тәлғәткә иртә менән ҡатыны исеменән ғариза яҙып директорға инергә ҡуштыҡ та, училищеның кәзәләр генә йөрөй торған тишек-тошоғонан сығып, үҙебеҙ генә белгән һуҡмаҡтарҙан өйҙәргә таралыштыҡ. Иртән барыбыҙҙы ла ауыр, катмарлы эш көтә. Һәр кемдең ваҡытында килеп, ысын күңелдән үҙ бурыстарын үтәп ҡайтыуына мин шикләнмәйем. "Шул егеттәрҙең берәүһе килмәһә, училищеның бер мөйөшө емерелеп барған төҫлө", — тип торғайны хужабыҙ. Ысынлап та, шундай кешеләрҙә инде училище тотҡаһы! Уларҙы курсанттар ҙа, иптәштәре лә нык яратты... Эсмәгән, эшләмәгән иптәштәребеҙ ҙә юҡ түгел ине арала. Улар күберәк хужа бүлмәһенең ишеген һаҡланы, хужа тирәһендә өйөрөлдө. Училищела бер сөй ҡатмаһалар ҙа, грамоталар, бүләктәр, миҙал-ордендар алды. Уҡыу йортонда, төрлө яҡлап уйлаһаң, ундай кешеләр ҙә артыҡ түгел инде. Уҡыусыларға кемдәндер фәһем, ғибрәт алырға кәрәк тә баһа?!

Икенсе көндө төшкә тиклем дәресем булмағас, хәлен белеп сығайым әле тип, Нәғимйән ағай янына индем. Ул "инженер" тигәнде аңлатҡан ромбикты кейгән бер кейеменә ҡаҙай һалып ҡуйыр ине. Бөгөн дә күлдәгенә шул ромбигын тағып йыйыштырылмаған койкаһында ултыра.

Ул "Технология" тигән фәнде алып бара. Дүрт-биш ҡатмарлы агрегат кәрәк булғанлыҡтан дәресте ойоштороп

тормай, урынына курсанттарҙы көндә тигәндәй ҡара эшкә егәләр ине. Бөгөн бәҙрәфтәрҙе таҙартырға ҡушҡандар икән.

Нәғимйән ағай утыҙынсы йылдарҙа институт тамамлап, ғүмере буйы баш ҡалала, министерствола эшләгән. "Ауыл хужалығы машиналарының тиҙәген ашап бөткәнмен, мин белмәгән трактор-машина юҡ ул был донъяла", — тип ҡабатларға ярата ул.

Хәҙер Нәғимйән ағайға етмеш йәш, пенсияла. Дөйөм курсанттар ятағында бер бүлмәлә йәшәп ята. Тормош иптәше мәрхүмә булғас, күрше ауылдан бер әбейгә өйләнгән ине. Шуның мал-тыуарына бесән һатып алған да, алып бара алмай, транспорт мәсьәләһе менән интегеп йөрөгән мәле булған икән.

— Ниңә үҙебеҙҙән трактор алмайһың? — тип һорағас, ул:

— "К-700" менән "Т-150К"-ның гусеницалары ашалып бөткән, "МТЗ"ларға бензин алырға бер айлыҡ эш хаҡы талап итәлә, "Т-40"-тың радиатор тишек, ә "ДТ"-ларҙың кардандары һынып бөткән, — тип теҙеп китте.

— Был мәғлүмәттәрҙе кемдән алдың һуң? — тинем.

— Шул Раилдән инде, башҡа кемдән булһын?! — тип тыныслана төштө .бабай. Мин мастерҙың сираттағы этлегенә эстән генә йылмайып, ишек тотҡаһына тотонғанда, тәҙрә янына шаулап колхоз инженеры Камилдең "ЛуаЗ" машинаһы килеп туҡтаны. Ул мине эҙләп йөрөй икән. Инженер инженер инде, "ЛуаЗ"ды күргәс, Нәғимйән ағай ҙа сыҙамай килеп сыҡты.

— Тауышына ҡарағанда бик шәп машинаға оҡшай, маркаһы ниндәй? Мин белмәгәс, яңы эшләнгәндер был, ҡайҙа сығаралар? — тип һорауға күмеп ташланы ул.

— Маркаһы юҡ, үҙе эшләп алған машина, — тинем мин, тиҙ генә Камилға күҙ ҡыҫып.

— Шәп эшләгәнһең, ҡустым, бик шәп эшләгәнһең, молодец, — тип һөйләнде Нәғимйән ағай һәм хужа кабинеты яғына юл тотто. — Бер сыҡҡанда директор менән транспорт мәсьәләһен дә хәл итеп ҡайтайым.

Был ваҡытта директор кабинетында Тәлғәт ултыра ине. Икеһе лә ҡыҙарышып-бүртенешеп киткәндәр.

— Пенсионер әбей уҡып йөрөгәндә минең ҡатындың ни ере кәм?! — тип ырғып торҙо Тәлғәт. — Булмаһа, мин министерствоға барам.

— Туҡта әле, Тәлғәт Исламович, һеҙҙе беҙҙең егеттәр шаяртҡандар ғына, — тип хужа уны оҙата ҡуйҙы. —



һөйләгәндәрегеҙҙе эҙмә-эҙ яҙып алдым, кәңәшмәләрҙә тикшереп хәл итәсәкмен.

Директор урынына ултырып та өлгөрмәне, Нәғимйән ағай үҙ ҡайғыһы менән уртаҡлаша башланы. Ул Раилдең һүҙҙәре буйынса тракторҙарҙың нисек, ҡайһы урындары боҙолоуын бәйнә-бәйнә һөйләп киткән генә ине, хужа бүлдерҙе:

— "Т-150К", "К-700"-тың гусеницалары булмай. "Т-40"тың радиаторы юҡ. Ә "МТЗ"-лар бензин менән түгел, солярка менән эшләй. Һеҙҙе, Нәғимйән Юлдашевич, егеттәр шаяртҡан. Ана, любой тракторҙы алығыҙ ҙа алып ҡайтығыҙ бесәнегеҙҙе. Башҡаса юҡ-барға ышанып, ҡаңғырып йөрөмәгеҙ. Һеҙ оло кеше бит, етмәһә, инженер ҙа!

— Шулай шул, иптәш директор, техниканың тиҙәген ашап бөткәнмен инде мин...

Камил менән әңгәмәләшеп тә өлгөрмәнек, "Кәңәштәрегеҙ берекһен", — тип янибыҙға Нәғим килеп баҫты. Камил: "Әйҙә, баштарығыҙҙы төҙәтәйем", — тип машинаһынан бер шешә килтереп сығарҙы. Шешә ауыҙына гәзиттән төрөп эшләнгән бөкө тығылған ине, көмөшкә булһа кәрәк. Уның көмөшкәһе, ғәҙәттә, бик көслө була, үҙәктәрҙе яндырып төшөп китә. Шешәне миңә бирҙеләр ҙә Нәғим Камилды үҙ өйөнә алып китте. Ул ҡәйнәһенән бик ҡурҡа, шуға, йәнәһе, алдан уны "әҙерләй" торалар. Ә мин аҙағыраҡ инергә тейешмен.

Нәғимдең өйө өс бүлмәле, соланына инһәң, ике яғында ла келәт. Һул яҡтағы келәттә һәр ваҡыт йоҙаҡ эленеп торҙо, ә уң яҡ келәттең ишеге лә юҡ. Унда төрлө запчасть, китап-журналдар, буш шешәләр, ҡумталар тулып ята.

"Туҡта әле, тәүҙә инеп, хәлде күреп сығайым да, ҡәйнәһе өйҙә булмаһа, сығып алырмын", — тип шешәне уң яҡтағы асыҡ келәттең стена буйына, ҡарамай ғына ҡулды һоноп ултырттым да, өй ишегенә табан атланым. Шешәм шешәгә тейгән кеүек тауыш сығарып ҡуйҙы. "Төптәрәк тағы ла буш шешәләр ултыралыр" тип һығымта яһаным.

Тотҡаға тейеүем булды, ишек үҙе асылып китте лә алдымда Ғәйникамал инәй пәйҙә булды. Ирекһеҙҙән тертләп китһәм дә, һаулаштым да: "Нәғим өйҙәме?" — тигән булып инеп киттем.

Егеттәр өҫтәл түрендә ултыралар ине инде.

— Ҡайҙа, тиҙ генә ҡой, — тине Нәғим, өҫтәлгә өс стакан ҡуйып, — ҡәйнәм инмәҫ борон.

Урынбаҫарҙың һүҙҙәре ни миңә приказ инде. Тиҙ генә теге шешәне алып индем дә өс стаканға ашыға-ашыға бүлеп ҡойоп та ҡуйҙым. Буш шешәне өҫтәл аҫтына ҡуйғансы, тегеләр "Иҫәнлеккә-һаулыҡҡа" тип ҡарһаланып эсә лә башлаған ине. Мин дә тиҙ генә стаканымды бушатыуға, ишек асылып, Ғәйникамал инәй килеп инмәһенме?! Уның өҫкә күтәрелгән уң ҡулында — бөкө менән ябылған шешә, ә һул ҡулы менән оҙон итәктәрен төрөп тотҡан. Ул шешәне беҙҙең өҫтәлгә шап иттереп ҡуйҙы ла, өҫтәл аҫтындағыһын һөйрәп сығарып, сатанлай сығып та китте. Нәғимдең ҡобаралары осто. Гүйә, ҡәйнәһе шешәне түгел, ә Нәғимде артына шапылдатып ултыртып китте. Шулай ҙа иң тәүҙә хужа һушына килде. Ул өҫтәлгә ҡәйнәһе ҡуйған шешә төбөндәге шыйыҡсаны еҫкәп ҡараны ла кәзә кеүек бышҡырып ебәрҙе: "Көмөшкә ләһә был!" Шул ваҡытта ғына беҙҙең ауыҙҙар тәм һиҙеп, эсеп ҡуйған стаканда йылы һыу булыуын аңлар хәлгә килдек. Ғәйникамал инәй мин ҡалдырған шешәне алып тәһәрәткә киткән, ә мин уның йылы һыу тултырған шешәһен тотоп ингәнмен икән...



# Сиңерткә бәләһе

Самолет тауышы, ишетелгәндәй бейеклектә йөҙгән төйләгәнде иҫәпкә алмағанда, күк йөҙө шул тиклем аяҙ. Етмәһә, эҫе, томра. Беҙ район комсомол комитеты ағзаһы Әхмәтов иптәш менән йәйләүгә китеп барабыҙ. Мин — колхоз комсоргы. Ул мине бюро кәңәшмәһенә әҙерләй. Беҙҙең колхоз фермаларына (бөтәһенә лә түгел инде, лайыҡлыларына ғына) "Комсомол-йәштәр һөтсөлөк-тауар фермаһы" тигән почетлы исем бирергә тейештәр.

Юлдашым миңә ҡарағанда ике мәртәбәгә тупышыраҡ. Ҡырҡ литрлыҡ фляганың ҡапҡасын асып, төбөнә бер-ике кәкере тояҡтар ҙа йәбештерһәң, нәҡ Әхмәтов иптәш була ла ҡуя инде.

Фермаға тиклем алыҫ ҡына. Йәйәүләп барабыҙ. Юл ситтәрендә хас Әхмәтов иптәш кейеп алған шаровар төҫөндәге ҡып-ҡыҙыл еләктәр ултырып ҡала.

Минең егеп йөрөгән айғырымды, ҡартайып бара тип, һабан туйына һуйып ҡуйҙылар. Мотоциклым да бар. Тик уны Әхмәтов иптәш бөтә фермаларға ла барып өлгөрмәһен тип "боҙоп" ҡуйғайным. Йәйәүләп ул бер ферманы ла йүнләп тикшереп өлгөрә алмаясаҡ.

— Әйҙәгеҙ, Әхмәтов иптәш, бынау еләктәрҙе ҡапҡылайыҡ. Эҫе бит, һеҙ ҙә һыуһағанһығыҙҙыр инде? — тигән булам.

— Була ул. Ҡайҙа ашығабыҙ һуң әле? Алдағы көн беҙҙеке бит, — тип ул юл ситенә сығып баҫыуы булды, граната ярсыҡтары кеүек, тирә-яҡҡа эреле-ваҡлы сиңерткәләр атылып ырғып киттеләр. Беҙ еләк ашай-ашай әҙерәк атланыҡ та, һүҙһеҙ генә ултырып ял иттек. Бер аҙҙан Әхмәтов иптәш арҡаһына ятып күкте күҙәтте. Мин дә эргәһенә йөҙтүбән тәгәрәнем.

...Комсомол райкомы бюроһы бара. Мине маҡтанылар, бюро ағзалығына кандидат итеп бер тауыштан һайлап ҡуйҙылар. Тик нишләптер Әхмәтов иптәш ҡыҙара бүртеп ҡаршы тауыш бирҙе. Ярһып, йоҙроҡтарымды төйөп килеп торһам... Бәй, төш күреп ятам икән! Икәүләшеп еләктәр араһында ҡаты ғына йоҡлап киткәнбеҙ. "Әхмәтов иптәш, торорға ваҡыт", — тип уның яғына әйләнһәм, ни күрәйем... райком вәкиленең еләк төҫлө шароварынан һәм трусигынан резиналары ғына билен ҡыҫып тороп ҡалған. Шунда сиңерткәләрҙең ебәк әйберҙе ашай тигәндәре иҫкә төштө. Ә минең күлдәктең артын кимергәндәр.

Ал яҡтан шыр яланғас, арттан шароварының иҫән өлөшө генә елгә елпелдәп торған Әхмәтов бөтөнләй илар хәлгә еткәйне.

Мин шунда уҡ уны ниндәй юлдар менән район үҙәгенә оҙатыу мәсьәләһен сисә башланым. Ахырҙа уның трусигын шул көйөнә ҡалдырып, шароварының артын алға кейҙерҙек. Үҙемдең яртыһы ҡалған күлдәк менән осаһын ябып, ең ҡалдыҡтары менән биле аша бәйләп ҡуйҙым. Шулай ҙа арттан ҡарағанда аяҡтары ялтырап, тағы ла кәкерәйә төшкән кеүек ине. Мин салбар урынына өҫкә өлөшө ҡырҡылған, майға буялған комбинезон кейгән инем. Әхмәтов иптәшкә кейҙерһәм, муйынынан булды ла ҡуйҙы. Икенсенән, бюро ағзаһы район үҙәгенә солярка еҫе сығарып, комбинезон кейеп ҡайта алмауы икәүебеҙгә лә уның осаһы кеүек асыҡ ине...

* * *

Йәйләү мөдире Ғәзизйән ағай һауынсы ҡыҙҙарҙы ашыҡтырҙы:

— Улар килмәҫ инде бөгөн. Төшкө һауынға тиклем үҙәк бүлексәнең ырҙын табағын һепереп ҡайтырға кәрәк, — тине ул, һәм ферма комсоргы Мәрйәмгә ҡарап өҫтәне. — Мин тоҙға киттем. Һин ойошторһаһың инде был эште. Итек, халат, триколарығыҙҙы кейегеҙ, юғиһә, трактор арбаһына кесерткән сабып тейәлгән. Юл ыңғайы тауыҡ фермаһына инеп, кесерткәнде йомортҡаға алмаштырығыҙ. Улар менән һөйләшелгән...

Һауынсылар сыр-сыу килеп трактор арбаһындағы кесерткән өҫтөнә ҡуйылған эскәмйә өҫтөнә теҙелде.

— Ҡалғандарығыҙ кесерткәнгә ултырығыҙ. Кейенгәнһегеҙ бит. Баҫып барырға ярамай! — тине тракторсы Шәйәхмәт. Уның янына ҡыҫылып районда беренсе һауынсы егет Ишбулат ултырҙы.

— Даһи юлынан барабыҙ,
Ауыр юлдар булһа ла.
Туҫтаҡ-туҫтаҡ һөт һауабыҙ,
Ниндәй һыйыр булһа ла, —

тип ҡыҙҙар йырлап та ебәрҙе.

Мәрйәм менән Шәйәхмәт еләк бешер алдынан ғына өйләнеште. Мәрйәмден холҡо ирҙәрҙекенә тартым, ә Шәйәхмәт, киреһенсә, йыуаш, баҫалҡы, тыңлаусан. Буй-һынға икәүһе лә бер сама, "Беларусь"тың ал тәгәрмәсенән саҡ ҡына ҡалҡыуыраҡтар. Ә бына Мәрйәмден әхирәте Әнисә!.. Комсомолка булмаһа ла,



мыҡты кәүҙәле, көслө. Ниндәй генә һыйыр булмаһын, йығып һауа ла ҡуя!..

Эргәләге генә түбә аша һауынсылар тейәлгән трактор килеп сыҡҡанда, Әхмәтов иптәштән комбинезонды систереп, үҙем кейеп тора инем...

— Бына бит беҙ көткән комсомол әһелдәре! Ҡояшҡа ҡыҙынып яталар ҙа баһа!

— Һаумыһығыҙ, Әхмәтов иптәш! Гармун килтерҙегеҙме?

— Әйҙәгеҙ, йыйылышты ошонда үткәрәйек...

Трактор беҙҙең янға уҡ килеп туҡтаны. Әхмәтов иптәштең нисектер, ә минең баштан йәшен тиҙлеге менән унарлаған төрлө котолоу сараһы теҙелеп үтте. Үҙем дә һиҙмәҫтән ҡулдарымды күтәреп ҡыҙҙарҙы тынысландырҙым да:

— Барығыҙ ҙа арбаның теге яғына төшөп үләнгә ултырығыҙ. Беҙ Әхмәтов иптәш менән арбаға менеп өҫтән һөйләрбеҙ, — тинем. Үҙем күҙ ҡырыны менән генә Әхмәтовты күҙәтәм. Ул ҡыҙҙарға алды менән генә торған да ике ҡулы менән шаровар ситтәрен баҫҡан.

Ҡыҙҙар үләнгә урынлашҡан арала мин тиҙ генә арбалағы эскәмйәне борт буйлап ҡуйҙым, йәнәһе, "трибуна". Әхмәтов арбаға нисек менгәндер, аңғарманым, әммә күп тә үтмәй ул да минең кеүек тубыҡланды. Хәҙер йыйылыш бөткәнсе Әхмәтов иптәштең шәрә урындары борт һәм эскәмйә менән ышаныслы көпләндә. Минең күлдәк юҡлығына иҫ китерлек түгел, көн эҫе бит.

Тиҙ генә йыйылышты асып, һүҙҙе Әхмәтов иптәшкә бирҙем дә, үҙем алғы борт аша Шәйәхмәт менән Ишбулатҡа эйелеп (ярай әле, МТЗ-2-нең кабинаһы булмай), ҡыҫҡаса ғына хәлде аңлаттым. Ирҙәр ирҙәр инде, аңланылар.

— Шәйәхмәт, һинең салбарың ярарға тейеш. Иплэп кенә сис тә, бөклэп трактор аҫтына төшөр.

— Ә мин? Трусигым да юҡ бит, исмаһам!.. — тип тынысһыҙланды Шәйәхмәт.

— Һин ултырғысыңа түшәлгән фуфайканың еңдәрен кей ҙә, билең аша элеп, тракторҙа тик ултыр.

— Салбар хаҡына бер яртылыҡ аҡса биреп китегеҙ, исмаһам!

— Миндә бер тин дә юҡ бит әле. Әхмәтовта ғына булмаһа...

Мин сығыш яһаусының ҡолағына бышылданым. Ул тиҙ генә шароварының артҡы "кеҫәһен" һәрмәне лә аптырап миңә текәлде:

— Сиңерткә ашаған...

— Кеҫәң хәҙер алда бит, — тигәс кенә аҡсаны табып минә һуҙҙы. Беҙ һөйләшкән арала һауынсылар шаулаша башланы. Шәйәхмәткә һонолоп аҡса биргәндә ул фуфайка төймәләрен эләктереп ултыра ине...

— Халаттарҙы йыуырға һабын кәрәк!

— Кәрәсин алып килегеҙ!

— Яҡшыраҡ сәй ебәрегеҙ!

Ҡыҙҙарҙың геүләүе трактор тауышынан да көслөрәк яңғырай башланы.

— Тр-р-р-р! Аты ла үҙе кеүек тиҫкәре!

Тауышҡа әйләнһәм, артыбыҙҙағы бортка Ғәзизйән ағайҙың ҡатыны атын бәйләп тора, имеш. Етмәһә, арбаһында ике еткән ҡыҙы ултыра.

— Еләккә китеп барабыҙ. Ғәзизйән ағайығыҙ йәйләүҙәме? — тип һораны ла, сығыш яһаусы Әхмәтовты күреп, — Был ни ғәжәп тағы?! Ниндәй әтәс ул, осаһы ялтырап, ҡыҙҙарға ҡысҡырып тора? — тип йөҙөн күрергә ынтыла башланы.

— Әтәс түгел ул, еңгә, комсомол райкомынан иптәш...

— Әстәғәфирулла, комсомолка тигәндәренең рейтуз һатып алырлыҡ та аҡсаһы юҡ микән?!

— Әхмәтов иптәш ҡыҙ түгел бит, ир кеше... Еңгәй, Ғәзизйән ағай китергә йыйына ине. Тиҙерәк барығыҙ, — тип мин уларҙың арбаға бәйләнгән теҙген остарын ысҡындыра һалдым. Ҡыҙҙары менән еңгә шырҡылдаша-шырҡылдаша китеп барҙы. Уларҙың "осаһы ялтырап" тигән һүҙен ишетеп ғәрләнгән Әхмәтов иптәш кесерткәнгә лып ултырҙы ла ҡуйҙы. Хәйерсегә ел ҡаршы тигәндәй, артына бәйләнгән күлдәк тә ябылмай, юбка кеүек елгә ялбырлап тороп ҡалды. Меҫкендең маңлайында еләктәй тир бөртөктәре калкып сыҡты. Үлемдән оят көслө шул. Ул сирнаясирная тағы трибуна артына килеп тубыҡланды...

Һауынсылар көҙимге йыйылыштағы кеүек ҡыҙа барҙы. Мәрйәм хатта арба мөйөшөнән тырмашып өҫкә күтәрелә башланы. Уға аҫтан Әнисә ярҙамлашты. Борт ныҒытылған тимерсыбыҡ осона эләгеп Мәрйәмдең бер ҡолағынан ысҡынған зәңгәр ҡашлы һырғаһы "трибунаға" ҡунаҡланы. Ул тиҙ генә икенсеһен дә систе лә, "Шәйәхмәтемдең туйға биргән бүләге", — тип, халат итәген күтәреп, икәүһен дә трико кеҫәһенә һалды. Мәрйәм бортка менеү менән Әхмәтов иптәшкә тағы ла кесерткәнгә йәшеренергә тура килде. Осаһы, балтырҙары ғына түгел, йоҡа шаровар аша тубыҡтары, сандырҙары ла ут кеүек яналар ине...



Мәрйәмде тыңлап бөтөү менән мин тиҙерәк йыйылышты ябыу сараһын күрҙем. Әхмәтов арты менән сигенә барып арбанан төштө лә минә һыйынынҡырап баҫты.

Трактор күҙҙән юғалыу менән Әхмәтов иптәш Шәйәхмәт ташлап киткән салбарға атылды. Билдәрен резинкаларҙан азат итеп салбарҙы кейҙе. Мин унын шаровар һәм трусик ҡалдыҡтарын ҡыҙыл йөшмә таш аҫтына йәшерҙем. Күлдәгемде кейеп, "Әхмәтов иптәш, ошо тау аша тура ғына төшһәк, район үҙәге алдыбыҙға баҫасаҡ. Мин дә бер йүнен табып ҡайтырмын әле", — тинем.

* * *

Тауыҡ фермаһына барыу өсөн тәрән генә баткаҡ кисеү аша сығырға кәрәк. Трактор шунда етеп бер ике пырхылданы ла һүнеп ҡалды.

— Ишбулат, һин төшөп, пусковойҙы токандыр инде. Минең ыштан юҡ бит, — тине Шәйәхмәт.

— Мин һыйыр имсәгенән башка техника тотканым юҡ. Һыуға төшһәң, осаң күренмәҫ әле... — тип каршылашты тегеһе.

— Шәйәхмәт, нәмә ҡарап ултыраһың? Төш, ек үгеҙеңде, һыу эсеп туйҙы бит! — тип шаулашты арбалағы ҡыҙҙар. Шәйәхмәт фуфайка салғыйҙарын эсенә ҡыҫып кисеүгә төштө. Пусковойҙың бауын ике ҡуллап урағын арала фуфайка бот буйлап төшөп китмәһенме! Шәйәхмәттән күҙҙәрен алмай көтөп ултырған ҡыҙҙар:

— Ә-ә-әй, карағыҙ әле! Шәйәхмәттең ыштанын суртан систереп алды ла ҡуйҙы. Трусигы ла юҡ икән да баһа... Ха-ха-ха! Хи-хи-хи!

— Уй, ҡоромағыр! Шәйәхмәт, кайҙа салбарың?

Мәрйәмдең һорауына ире яуап таба алманы. Уға биленә кәҙәр кисеүгә батырға тура килде. Мәрйәм менән Әнисә эштең асылын Ишбулаттан һөйләтеп алдылар ҙа, арбанан һикереп төшөп, кемуҙарҙан артка, йыйылыш булған ергә йүгерҙеләр...

* * *

— Әхмәтов иптәш, тиҙерәк булығыҙ. Салбар артынан ҡыуалар, — тинем. Ул кесерткән саҡкан урындарын тырнап торҙо ла, тәрән һулап, тауға ынтылды. Әнисә менән Мәрйәм дә тиҙлектәрен арттырҙы.

— Арҡаһынан тартып йыҡ та, шунда уҡ салбарҙы систереп ал! — тип ҡысҡырҙы Мәрйәм алда барған Әнисәгә. Мин дә

Әхмәтов иптәште сыбырткылап карайым. Тик ҡайҙа ул сәй менән көн иткән кешегә һөттә йөҙгән әҙәм менән ярышыу! Әнисәнең оҙон, көслө ҡулдары ҡағылыуы булды, тегеһе йөҙтүбән барып та төштө.

Мәрйәм менән мин килеп етеүгә Әхмәтов инәнән тыума ята ине.

— Бахыр ғына! Ҡайҙа шул тиклем йәрәхәтләнгән? Әллә янған инде?! — әллә йәлләүҙән, әллә сирканыуҙан Мәрйәмдең йөҙө һытылды.

— Был ауырыуға оҡшай бит! Район һауынсыларын өйөрөп йөрөп, өйөр айғыры ауырыуын йоҡторған, — Әнисә ҡулындағы салбарҙы ситкә ырғытҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Әхмәтов иптәш шунда уҡ боролоп салбарға ынтылды. Ләкин Мәрйәм сосораҡ булып сыҡты.

— Мин уны солярка менән йыуам, Шәйәхмәт унан бөтә зараза ҡойолоп төшә, ти.

— Ҡыҙҙар, хафаланмағыҙ. Һеҙҙең кесерткән касафаты был, — тигән булдым мин. Үҙем тағы ҡулләгемде сисеп, райком вәкиленең яланғас урындарын ҡапланым. Ҡыҙҙар әҙерәк тынысланды. Әхмәтов иптәш әйләнеп ултырҙы ла, боронғо ҡиәфәтенә инеп:

— Салбарҙы систергәс, өс һумды бирегеҙ, — тине.

— Ниндәй өс һум тағы? Мин взностарҙы ай башында уҡ тапшырҙым.

— Әйҙә, ҡыҙҙар, тыныс ҡына һөйләшеп килешәйек әле, — тинем мин, һүҙҙе икенсегә бороп. — Һеҙ Шәйәхмәттең салбарын биреп тороғоҙ. Әхмәтов иптәш ҡайтып етһен дә иртәгә уҡ килтереп бирер. Өҫтәүенә, ул Мәрйәмгә Почет грамотаһы ла яҙып алып килер.

— Юҡ инде, бында Мәрйәм генә түгел, мин дә йүгереп йөрөйөм. Ана, Шәйәхмәт оялышынан биленән батҡаҡта ултыра. Биргәс, бөтәбеҙгә лә бирһен грамота, — тип Әнисә ҡыҫылды.

Һатыулаша торғас, салбарға алмаштырып Мәрйәм үҙенең трикоһын ҡалдырырға ризалашты. Ә Әхмәтов иптәш Мәрйәм менән Әнисәгә мисәт баҫылған "Похвальная грамота" вәғәҙә итте...

Тау аша төшөүгә "Урал" мотоциклына ҡатынын ултыртып Әхмәтов иптәштең күршеһе Фазыл пәйҙә булды. Улар елэктән киләләр икән. Фазыл ҡатынын өйөндә ҡалдырҙы ла күршеһен райкомға илтте. Унда Әхмәтов иптәштең папкаһы эсенә ике "Похвальная грамота" инеп ҡыҫылды...

* * *

— Ишбулат ҡусты, өшөттө бит. Инструменттар аҫтында өс һум ята. Тиҙ генә ауылға барып, бер ярты килтер, — тип үтенде Шәйәхмәт батҡаҡта ултырған килеш. Оҙон аяҡлы Ишбулат бер-ике баҫып кисеүҙе сығып та китте...

Шешә үҙәсе Шәйәхмәт ауыҙына инеп юғалды. Араҡы кәмегән һайын Шәйәхмәт өсөн кисеүҙә һайый барҙы. Бына ул биленә тиклем батҡаҡка буялған килеш пусковой янына ла килеп баҫты.

— Шәйәхмәт, ҡайҙа бараһың? Көтәйек Мәрйәмдәрҙе! — тип ҡысҡырҙылар арбанан. Уларҙың тауышы трактор гөрһөлдәүенә күмелде.

Тауыҡ фермаһы мөдире Сәлих ағайҙың ихатаһына туктау менән Шәйәхмәт башын рулгә һалып йоҡлап та китте... Ишбулат һәм һауынсылар кесерткән бушатты. Эргәләге генә ферманан биҙрә тулы йомортҡа күтәреп Сабира апай сыҡты. Уны Сәлих ағай янына ҡуйҙы ла:

— Ҡасан ҡайттың? Әйҙә, тракторҙы оҙат та сәйгә ин, — тип өйгә кереп мейес тирәһендә сыуалды. Сәлих ағай яңы ғына ҡаланан семинарҙан ҡайтып тора икән...

— Ҡыҙҙар, йомортҡа араһына үлән булһа ла һалып ултырығыҙ, ярылып бөтмәһендәр, — тип биҙрәне трактор арбаһының алғы мөйөшөнә генә йәтешләп ултыртты.

— Әйҙә, ҡайтайыҡ. Төшкө һауынға өлгөрөр кәрәк!

— Ырҙын табағына барып тормайбыҙ инде, һуңлап киттек бит.

— Мәрйәм менән Әнисә ҡайҙа йөрөйҙәр икән?

— Бәй, һеҙҙең тракторсы ҡайҙа һуң? — тип аптыраны Сәлих ағай, буш ултырғысҡа ҡарап.

Күмәкләшеп Шәйәхмәтте эҙләргә тотондолар. Трактор арбаһы аҫтарын, хатта яңы ғына кутарылған кесерткәнде лә актарҙылар. Юҡ. Трактор иҙәнендә һыу фуфайкаһы ғына ята...

Сәлих ағай үҙ ихатаһында еүеш ялан аяҡ эҙҙәрҙе күреп ҡаушабыраҡ торҙо ла өйөнә атланы. Сабирә апай бер ни булмағандай мейес тирәһендә урала. Эҙҙәр хужаны төпкө бүлмәгә саҡырҙы. "Был ни хәл? Кем юрған аҫтында тумырайып ята?" Сәлих ағай юрғанды һыпырып ебәреүгә шәрә Шәйәхмәт

кирелеп алды ла йәнә бөгәрләнеп, ирендәрен супылдатып йоҡоға китте...

— Ни ҡыланыуың был, Сабира? Бына ҡартая белмәгән бисә! Йәш һөйәркә индереп алған икәнһең! Ҡайҙа унының салбары?.. — Сәлих ағай, Шәйәхмәтте күлдәк яғаһынан тотоп, кухняға сығарып баҫтырҙы. Ҡатындың тәрилкәһе төшөп ватылды. Нимә әйтергә белмәй, ирекһеҙҙән салбар эҙләй башланы. Яҫтыҡ, урындыҡ аҫтарын ҡараны. Шифоньер, шкафтарҙы асып бөттө...

— Ә-ә-ә, һин һөйәркәң таң менән ҡасып китмәһен тип хатта салбар-трусиктарын йыйып бөткәнһең икән?!

Иҫерек Шәйәхмәт бер күҙен көскә асып Сәлих ағайҙы танының ла:

— Һин миңә йомортҡа бир, Ғәзиз ағай, — тип мығырҙаны.

— Нахал, тағы минән йомортҡа һорап тора! Булған күкәйҙәреңде ярa тибәм бит хәҙер!..

Өй ихатаһында шау-шыу ҡупты. Кемдәрҙер йүгереп өйгә үк килеп инде.

— Типмәй тороғоҙ инде, Сәлих ағай. Беҙ яңы ғына өйләнешкәйнек. Йүнләп бергә йоҡлағаныбыҙ ҙа юҡ әле, эштән бушап... — Мәрйәм ҡулындағы салбар менән иренең оят урындарын япты ла соланға һөйрәне. Шәйәхмәт талаша-тартыша кире инде. Көскә күҙҙәрен асып, берсә Мәрйәмдең яланғас аяҡтарына, берсә ҡолаҡтарына ҡараны ла салбарын ырғытып ебәрҙе:

— Трикоңды кем систерҙе? Ҡайҙа һырғалар? — тип Мәрйәмдең сәстәренә барып йәбеште. Ярай әле, эргәлә генә Сәлих ағай менән Әнисә торалар ине.

— Шәйәхмәт иҫергән дә ҡуйған. Нисек ҡайтабыҙ инде?

— Ҡайғырмағыҙ, ҡыҙҙар. Шәйәхмәт ағай руленә йәбешеп алһа, йәһәннәм төбөнән дә үтеп сығасаҡ, — тип тынысландырҙы һауынсыларҙы Ишбулат. Ысынлап та, улар теүәл төшкө һауынға ҡайтып етте. Хатта бер йомортҡа ла ярылмаған ине...

* * *

Әхмәтов иптәш йоҡлағанда, кеҫәләрен, портфель-папкаларын аҡтарыу Зифа еңгәйҙең ғәҙәтенә инеп киткәйне. Бөгөнгө аҡтарыу бик мул уңыш килтерҙе. Бөкләп кенә ултырғысҡа һалған трико кеҫәһенән һырғалар килеп сыҡты. "Кем кейеме һуң был? Ҡайҙа һуң үҙенең трусигы менән шаровары?" Ҡатындың иғтибарын өҫтәлдәге папка йәлеп итте. Унда бөтә һорауҙарға ла яуап бар ине.



— Мәрйәмдеке!

Зифа асыуын йәшерә алмай, иренең өҫтөнән одеялын тартып алды. "Тор әле!" — тип әйтте лә, аҫкан ауыҙын башҡа яба алманы. Әхмәтов иптәштең билдән аҫкы өлөшөн күреп, унын күҙҙәре ҙурайғандан-ҙурайҙы.

— Атаҡ, атаҡ, нимә был?! Һауынсылар менән бутала торғас, кәрәгеңде алған икәнһең! Йыйыш постелеңде, тышҡа сығар.

— Зифа...

— Асма ауыҙыңды, киттек больницаға!

Район больницаһында бер генә врач ине. Уныһы ла балаларҙыҡы. "Диатезға ла оҡшаған... Бындай ауырыу менән осрашҡаным юҡ, — тип систе ул резина бирсәткәләрен. — Баш ҡалаға йүнәлтмә яҙам. Унда венеролог бар. Анализдарҙы ла шунда алырҙар әле..."

Дауахананан ҡайтыуҙа Әхмәтов иптәш хәлде бәйнә-бәйнә һөйләп бирһә лә Зифа еңгәй ышанманы:

— Әйҙә, йәйләүгә, Мәрйәм менән күҙләштерәм, — тине ул. — Ҡайҙа һуң шаровар менән трусигыңдың ҡалдыҡтары?

—Юл буйында, ҡыҙыл йәшмә таш аҫтында. Әйҙә, киттек, күрһәтәм...

Уларҙың өй алдында комсомол райкомының егеүле күк аты тора ине. "Әхмәтов иптәш, һеҙҙе саҡыралар", — тине, тәмәкеһен тоҡандырып, йомошсо Марат ағай. Әхмәтов иптәш райкомға барып инде лә өҫтәл артында ултырған партия комитетының өсөнсө, комсомол комитетының беренсе секретарҙарына ҡулын һонҙо. Ләкин улар урындарынан да торманы, ҡулдарын да бирмәне. Әхмәтов иптәш артына әйләнеп ултырғыс эҙләне...

— Ултырып торорға ваҡыт юҡ, Әхмәтов. Һеҙ бик алама сир йоҡторғанһығыҙ икән. "Үҙ теләгем менән китәм" тип ғариза яҙығыҙ. Баш ҡалала дауаланып ҡайтҡас, тағы бер мәртәбә һөйләшербеҙ, — тип секретарь сығып та китте.

Ҡайтышлай Әхмәтов юлын ҡыйып үтеп барған ҡара бесәйҙе ҡыуып китте. Баҫтырышып барып өй мөйөшө артында торған "Урал" мотоциклы өҫтөнә менеп китә яҙҙы. Фазыл менән Зифа еңгә уны көтөп торғандар икән. Күп тә үтмәй улар юл ситендә ҡыҙыл йәшмә таш эҙләй башланы...

* * *

Ғәзизйән ағай "Ҡыҙыл мөйөш"тә бисәһе алдында яуап тотто:

— Ҡайҙа йоҡланың?

— Күрше ауылда, арбала.

— Тоҙҙарыңды ҡайҙа иттең?

— Береһен һаттым, икенсеһен юғалттым.

— Кемгә, нисә һумға һаттың?

— Бер яртыға инде. Күрше ауылдағы класташым, уҡытыусы Миңлегәлгә...

— Уға тоҙ ни бысағыма кәрәк булған? Ире лә, балаһы ла, малы ла юҡ.

— ...

Ғәзизйән ағайҙың бисәһе ишектән ярһып килеп сыҡты ла ҡыҙҙарына екерҙе: "Кайтабыҙ, егегеҙ атты!.."

Ғәзизйән ағайҙың ҙур ҡыҙы ат етәкләп арба яғына китте. Ә кесеһе яңы ғына килеп туҡтаған "Урал"дан төшкән Әхмәтов иптәш янына килеп:

— Беҙҙе лә комсомолға алығыҙ әле, — тип үтенде.

— Колхоз комсоргына мөрәжәғәт итегеҙ.

Беҙ трактор арбаһындағы йыйылыштан һуң комсомол билетын һеҙҙең ҡулдан алаһыбыҙ килә, — ҡыҙыҡай көлөүенән саҡ тыйылып тора ине.

— Һеҙ унда йыйылышта булдығыҙмы ни?

— Беҙ арбаның икенсе яғында торҙоҡ, — тип һүҙ ҡыҫтырҙы атын арбаға бәйләп торған Ғәзизйән ағайҙың ҙур ҡыҙы.

— Ярай, ярай, һауынсы булып килһәгеҙ — алырбыҙ, — тип ҡып-ҡыҙыл булған Әхмәтов иптәш, Зифа еңгәйҙе ҡултыҡлап, китеү яғын ҡараны. Ҡыҙыл йөшмә таш аҫтынан резинкаларҙы тапҡандан һуң улар бер аҙ ярашҡан кеүек булғайны.

Әхмәтовты кесерткән сабылған урында Мәрйәм менән Әнисә көтә ине. Ул тиҙ генә грамоталарҙы килтереп сығарҙы:

— Һеҙҙе юғары уңыштарға ирешеүегеҙ менән ҡотла...

— Юу-у-уҡ, Әхмәтов иптәш, һеҙ беҙҙе һауынсылар алдында тәбриҡләгеҙ, — тип туҡтатты ҡыҙҙар.

— Ярай, улайһа, әлегә һырғаларығыҙҙы алағыҙ. Трико кесәһендә ятҡандар. Бир әле, Зифа, шуларҙы.

Әхмәтов иптәш артына килеп баҫҡан Шәйәхмәтте һиҙмәне. Райком вәкиленең ҡатынына һоноլған ҡулында Мәрйәмдең һырғаларын күреп ҡалған Шәйәхмәт: "Ә-ә-ә, бына ҡайҙа икән ул минең кәләштең һырғалары! Оялмай кеше әйберен бисәңә бүләк итеп тораһыңмы? Трикоһын да һин систергәнһеңдер әле?!". Был һүҙҙәрҙән һуң Әхмәтов иптәш ирекһеҙҙән папка араһынан Мәрйәмдең трикоһын килтереп сығарҙы. Шәйәхмәттең танау осо көрән төҫкә инде, күҙҙәренә ҡан һауҙы. Бер секунд үтеүгә улар бер-береһенә йәбешеп, кесерткән төптәрен үтекләне. Шау-шыуға килеп еткән Фазыл, Ғәзизйән ағай Әнисә ярҙамында көскә һүтеп алдылар был йомғаҡты. Ғәзизйән ағай Шәйәхмәтте ҡултыҡлап "Ҡыҙыл мөйөш"кә инеп китте.

— Трикоңы бирмәһәң, кәрәгенде алырһың! — тип ҡыҫҡырҙы Шәйәхмәт артҡа боролоп.

— Өс һумды бирһәгеҙ — алырһығыҙ, — тине Әхмәтов Мәрйәмгә ҡарап. Ул ҡулъяулығы менән ауыҙ-моронон һөрттө. Зифаның арҡаһын сүп-сарҙан таҙартты.

— Беҙҙең бер тин дә аҡса юҡ, — тине Мәрйәм, Әнисә менән кәңәшләшкәс.

— Колхозниктың аҡсаһы буламы трудодендән башҡа? — тип ҡыҫылды арбала ултырған Ғәзизйән ағайҙың ҡатыны.

— Беҙ һеҙгә өс литр һөт бирәбеҙ. Ризалашығыҙ инде, Әхмәтов иптәш, — тине Әнисә. Ул өндәшмәйенсә Зифаһына ҡараны. Уныһы башын һелкте.

— Ғәфү итегеҙ инде, Әхмәтов иптәш, бөтә һөттө иртән трактор алып киткән. Обратка булһа ла алмаштырайыҡ инде. Ҡатыҡ ойоторһоғоҙ...

Әхмәтов иптәш көрһөндө лә, Зифаны ҡулынан триконы алып, Мәрйәмгә бирҙе, "Похвальная грамота"ларын йүнәтеп һалып, папка кнопкаһын баҫты ла ҡатыны менән мотоциклға табан йүнәлде...

* * *

Тиҙҙән Әхмәтов иптәш урынына мине бюро ағзаһы итеп үрләттеләр. Беҙҙең барлыҡ фермалар ҙа почетлы исемгә лайыҡ булды.

Әхмәтов иптәш бер ай самаһы баш ҡалала "дауаланып" ҡайтты. Зифа еңгә күпме генә йүгерһә лә, ирен элекке эшенә ҡайтара алманы. Шул рәүешле теге "Похвальная грамота"лар ҙа тапшырылмай ҡалды...

# Серҙәш бабайҙар

Кәҙимге ауыл “двухэтажка”һы. Бер осонда ишекһеҙ бәҙрәф, икенсеһендә һаҫып яткан сүплек. Бындай йорттарҙағы халыҡ, ауыл менән ҡала йөйө юйылыуын көтә-көтә ҡартайышып, әбей менән бабай булып бөттө инде. Дәүләтов, Ахунйәнов, Мөхитдинов, Сәйфетдинов, Витька исемле бабайҙар, мин һәм Зәйтүнә әбейҙән башҡа тағы бер зәғиф афганец көн итәбеҙ был йортта. Тора-бара “двухэтажка” һүҙенең “в.х.э.” өндәре төшөп ҡалды, хәҙер “дуташка” тип кенә атала. Ә бабайҙар бер-беребеҙҙе Дәүи, Әхү, Мөхи, Сәйфи, Виткә тип кенә йөрөтәбеҙ. Ауыл халкы ла был атамаларға күнегеп бөткән инде. Виткә паспортында ғына урыҫ, ә ауылда башҡорт...

Бабайҙар әңгәмәгә бик маһир, татыу, үҙ-ара кәңәшләшеп кенә йәшәйҙәр. Халыҡ-ара, район һәм ауыл хәлдәреме, башҡа килеп тыуған мәшәҡәттәрме, кәрт кеүек, өҫтәл уртаһына һалып хәл итәләр.

Күп кәрт уйындары дүрт кешене талап итә. Ә Дәүи бабай бөгөн ниңәлер юк та юк. Ул булмағас, өсәүләп: Әхү, Мөхи, мин “дурак” уйнай башланыҡ. Сәйфи менән Виткәнең кәрткә әүәҫлеге булманы. Шулай ҙа Сәйфи һәр ваҡыт түребеҙҙә шәм кеүек яктырып ултыра. Ул һуғыштан зәғифләнеп ҡайтты. Беҙҙән күпкә оло. “Дан” ордены ла бар. Шуға күрә ауылда уны “Слава” тип кенә йөрөтәләр. Аҡыллы, сабыр әҙәм. Арабыҙҙа ул булмаһа кәрт теүәл булмаған кеүек.

— Дәүи иртә менән, һайыҫҡан тиҙәккә лә төшмәгән ине әле, ҡалаға китте. Керйыуғыс машинаһын төҙәттермәксе, буғай... — тине Мөхи, тәмәкеһен көйрәтеп.

— Яңы ғына һатып алғайны лаһа, нишләгән һуң? — тип аптырай төштөм мин.

— Хәҙерге әйбергә ышаныс бармы? Яңы әйбер алырға ҡурҡып тораһың, — тип кәрт таратты Әхү бабай. — Ана, кисә генә уландар ҡаланан берәр тоҡ шәкәр менән он алып ҡайттылар. Бер ҙә һын теймәгәс, шәкәрен үлсәп ҡараһам, ун килограмм тулмай, ә юғары сортлы он тигәндәре сортһыҙ, ҡап-ҡара булып сыкты.

— Хәҙер дәүләт үҙе алдаша, — тип һүҙ ҡыҫтырҙы Сәйфи бабай. Уның ҡуйы, аҡ ҡаштары аҫтындағы күҙҙәре Әхү тараткан кәрттәр артынан йүгергеләнә.



— Кер йыуыу порошогы, хатта шырпы ҡаптары ла яртылаш тултырыла. Ә араҡыны әйтеп тораһы ла юҡ. Ун биш төрлө шешә — ун биш төрлө хаҡ. Ә эсендәге шыйыҡлыҡ бер төрлө: уксус... Нисек халыҡ ағыуланмаһын инде...

— Шуға күрә мин һәр ваҡыт күрше ауыл Көнһылыуҙың көмөшкәһен хуп күрәм, — тине Мөхи ҡарт, Сәйфинең һүҙен бүлеп. Нишләптер башҡаларҙы “бабай”, ә Мөхине “ҡарт” тип йөрөттәләр ауылда.

Бабайҙар янына Виткә һәм көндәлек ғәмәлдәренән йонсоған Зәйтүнә әбей килеп ҡунаҡланы.

— Исанмыхыз, кордаштар! — тип сәләмләне лә Виткә бабайҙарҙы, ултырып, көрәктәй устарына табынды.

— Бисмиллахир рахманир рахим... — тип доға ҡылды. Зәйтүнә әбей һәм башҡалар ҙа уға ҡушылды.

— Алла барлығына үҙең ышанаһыңмы һуң? — тине доға ҡылыу өсөн кәрттәрен ҡуйып торорға мәжбүр булған Әхү бабай. Виткәгә бирелгән һорауға нишләптер Мөхи ҡарт яуап бирергә булды.

— Бөтә ер йөҙөндә миллионлаған әҙәм бер юлы, бигерәк тә Ҡорбан, Рождество байрамдарында, “Йә раббым” тип көрһөнгәс, “Йә хоҙай” тип уфтанғас, Алланың булмауы мөмкин түгел! — тине ул. — Шулай бит, Зәйтүнә корҙашбикә!

— Һүҙҙәреңә ҡеүәт, Мөхи ҡарт. Хоҙайҙың булыу-булмауына шикләнеү — үҙе ҙур гонаһ!

Бабайҙар әңгәмәһен дауам итте.

Ауылда яңы әйбер һатып алыусы ла һирәк. Бер-ике баш мал һуймай тороп, бер әйбер ҙә һатып алам, тимә. Ә бер һыйыр малын һуйыу хәленә еткереү өсөн, бухгалтер Әхиәр әйтмешләй, утыҙ-ҡырҡ мең һумлыҡ аҙыҡ талап итеlә. Шуға күрә бер һыйыр көтөүе лә ауыр ауыл халҡына.

— Кәзә-һарыҡты тиҙҙән зоопаркта ғына күреп буласаҡ, — Сәйфинең һуңғы һүҙҙәре выжлап килеп туктаған “Волга” тауышына буталды.

— Әссәләмәғәләйкүм, апай һәм ағайҙар! — Машина хужаһы ырғып төшөп күреште лә бабайҙарға әйәреп доға ҡылды.

— Кәңәштәрегеҙ берекһен! Иҫән-һау ултыраһығыҙмы?

— Бер ҙә үлеп булмай. Ай һайын пенсияны өҫтәп тик торалар бит! — тип шаяртты Мөхи ҡарт.

“Волга” хужаһы яңы тәғәйенләнгән хакимиәт башлығы ине. Ул Мөхи менән Сәйфи араһына килеп баҫты ла, арҡаларынан һөйөп:

— Һорауығыҙ төштән һуң үтәләсәк, — тип, нисек килгән шулай китеп тә барҙы.

— Ашығалыр, "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" ойоштороп йөрөй бит, — тинем мин башлык өсөн уңайһыҙланыңкырап.

— Башын тыкмаған, ә "Волга"ға ултырып та алған, — тип мығырҙаны Әхү бабай.

— Район главаһы үҙ машинаһын бүләк иткән. Силсәүит ҙур бит, — тинем тағы ла.

— Ана, күрше ауыл мәктәбенә автобус бүләк иткән ул глава, — тине Мөхи карт. — Тик минең бер нәмәгә баш етмәй. Түрәләрҙең әбейҙәре "нишана, тулкһыҙ, ыштанһыҙ, бөтә аҡсаһы бүләккә түҙҙырып йөрөйһөң" тип әрләмәй микән?! Кыҙык микән әбейҙән тиргәлеп ултырыуы?

— Алйот хин, Мөхи. Уларҙын абейзары беззен абейзар кевек сай шамахын киптереп икенсе мартаба бешереп эсалар тип уйлайхындыр. Шулай булмаха ярар иды. Ул абейзардын устында сатин кулдак, кышамир яулык, белагында кумыш белазык. "Волга" кайгыхы бар ти уларда. Такси менән гена теттыралар алар! — Виткә бабай уйлап йөрөгән уйҙарын ысынбарлык итеп тасуирланы беҙгә...

— Мал көтөүе бер ҙә кыйын булмаҫ ине лә ул. Бесән әҙерләүе сей елкәгә тейә, — тип Әхүгә караны Сәйфи. Әхү елкәһен һыйпап куйҙы ла:

— Анау мотоблок тигәндәрен алғайным. Уны һөйрәп йөрөр өсөн үҙенә бер ат кәрәк. Һин һөйрәйһең, унан һуң ул һине һөйрәп алып китә. Әкәмәт инде. Огород һөрәм тип бер сәғәттәй ыҙалағас, бил-аяктан яҙып ташлап куйҙым. Ята шунда металлом булып.

— Ул бензинда эшләйме?

— Бензинды һыйыр кеүек эсә. Рәсәйҙә ГСМ-ды аҙ ашаған техника бармы? Ниңә шул Т-25, Т-16 кеүегерәк тракторҙы салғыһы, тырмаһы, бесән тейәгесе менән сығармаҫка? — Әхү, йәш сағында алдынғы тракторсы, ҡотлауҙар, грамоталар алып эшләне. — Шундай техника хакы ауыл халкы һатып алғандай булһа, пенсионер башым менән 5 — 6 һыйыр аҫырар инем. Бесән әҙерләйем тип ниндәй генә киәфәткә инмәй ауыл халкы. Боронғо ат салғыһын мотоцикл, мотороллер, машинаға тағып карайҙар. Ә тракторҙыкын атка, үгеҙ-һыйырға, хатта ишәккә лә егеп маташалар. Ахыр сиктә, шул олатайҙар ысулы булған кул салғыһы, һәнәк-тырмаға таянып калалар.



— Эҫе йәй буйына йәйәү йөрөтөп бесән эшләтеп карарға кәрәк ине шул техниканы эшләүсе завод хужаларын һәм конструкторҙарын. Белә микән улар ауыл халкы Нух заманындағы "копейка"һы менән көс-хәлгә йәй буйына бер һыйырлык кына бесән әҙерләй алғанын? Хатта 30-сы йылдарҙа сығарылған ике метрлык ат тырмаһы менән дә тәьмин итә алмай бит улар ауыл халкын...

Әңгәмә кыҙҙы...

— Дави бабай кызына инеп, берай стакан какмай кайтмай инды ул, — тине Виткә, Әхүнең телмәрен бүлеп. Бәхәстәре ҡыҙған бабайҙарҙың йоҙроктары алда йөрөүен белгән Виткә, шулай теманы алмаштырып, һәр саҡ әңгәмәне "һыуытып" ултыра.

...Дәүи кыҙы Нәфисә тәки күрше ауылы Иванға кейәүгә сыкты бит. Хәҙер калала йәшәйҙәр. Ниндәй генә кәртәләр ҡорһалар ҙа мөхәббәтте еңә алманы Сабира әбей менән Дәүи бабай. Бер көн шулай Дәүи бер һүҙҙәш бабайҙарын йыйҙы ла лавкала рассыпуха менән һыйланы. Ҡыҙып алғас, ҡулға-ҡул тотошоп, Иван килер ауыл осона йүнәлделәр. Йәнәһе, егетте ауылға индермәйҙәр. Улар араһына ығы-зығы килеп малай-шалай ҡыҫылды. Иван бензовозын шәп иттереп бабайҙар ҡамауына йүнәлтте.

— Кара-кара, коромагыр! Калай шап кила!.. — Виткә бабай ҡурҡыуынан кулдарын ыҫкындырып ебәрҙе.

Бабайҙарҙың доғаһы өҙөлдө. Мөхи карт:

— Ҡустым, тукта әле! — тип кыскырған тауышка бензовоз тиҙлеген кәметеп маташкан арала Дәүи бабай машинаның цистернаһына "һыбай" менеп алмаһынмы! Быны һиҙеп алған Иван тиҙлеген өҫтәп, ой янында көтөп торған Нәфисәһен ултырта һалып, ауыл урамдарын пыр туҙҙырып елдерә икән. Дәүи бабайҙың иң тәүҙә йөмшек эшләпәһе осоп магазин түпһаһына барып яткан. Ҡыҙғылт плащының төймәләре өҙөлөп, әләм кеүек ялбырап йөрөгән. "Бабайҙарым, зинһар, коткарығыҙ. Үлемдән ҡотолһам, һеҙҙе тағы һыйлайым", — тип һөрән һалып ауылды ҡуҙғыртып бөткән. Иван буласак ҡайныһын ауылдан биш саҡрым алыҫлыкта калдырып киткән...

Виткә һүҙҙе ошо темаға күсерергә маташһа ла килеп сыкманы, карттар үҙҙәренекен дауам итте.

— Һе, биш-алты һыйыр көтә, имеш! Ә бызауҙарыңды ҡайҙа ҡуйырға уйлайһың? Бызауһыҙ һыйыр үрсейме?! — Мөхинең тауышында үпкә ноталары яңғыраны.

Ысынлап та, ауылдарҙа бызау сығарырлыҡ та урын юҡ. Йорттар бер-береһенә етә яҙып ҡоролған. Ә өйҙәргә терәлеп хужалыҡтарҙың сәсеүлектәре ята. Бызауҙы сығарып та өлгөрмәйһең — күрше ауылдың иген көтөүсеһе алып китә. Ә иртәгәһен беҙҙең объездчиктар уларҙың бызауҙарын ҡорһағына тиклем батҡаҡҡа батырып көнө-төнө ас тота. Ә бер-ике йылдан, шул эсе үткәшеп батҡаҡта көн иткән бызауҙар һыйыр ҡорона тулһа, фляга һөйрәп, меҫкендәрҙең һөтөн йыя башлайҙар...

Мөхи ҡартың үпкәләрлек урыны ла бар ине. Былтыр көҙ ул ярты ҡыҫтырып күрше ауыл "концлагерына" эләккән бызауын ҡоткара барҙы. Мал бикләнгән һарайҙы шулай атайҙар беҙҙә. Бер шешәне объездчик менән бушатҡас, дәртләнеп алған Мөхи:

— Әйҙә, ҡустым, Сәйфи бабайҙың да бызауын алып ҡайтайым әле. Икәүҙе бергә ҡыуалауы еңел бит, — тине.

— Улайһа, тағы бер шешә кәрәк була инде.

— Сәйфи — һуғыш ветераны. Буш булырға тейеш, — тиһә лә тегеһе үгеҙҙәй киреләнде лә ҡуйҙы.

— Былай булғас, ауыл осондағы Көнһылыуҙан һорап тормаһам, — тип Мөхи ҡарт һикертә баҫып китеп тә барҙы.

Көнһылыуҙың шешәһен бушатыуға объездчик та, Мөхи ҡарт та "концлагерҙағы" бызауҙарға оҡшап ҡалды. Һарай ҡапҡаһы Мөхи менән Сәйфи бызауҙарын сығарҙы ла башҡа ябыла алманы. Объездчик ҡапҡа алдында йығылды ла йоҡлап китте. Шуны ғына көтөп торған бызауҙар һәм һыйырҙар, уның аша сабышып, тағы игенлек өҫтөнә барып тулды. Бөгөн уларҙы башҡа ҡыуалаусы булманы. Ашап-туйып, кис кенә ҡайттылар ауыл хужабикәләрен шатландырып. Мөхи ҡарт ауыл әбейҙәре алдында герой уҡ булмаһа ла, Сәйфи кеүек, "Слава" исеменә лайыҡ ине.

Бызауҙар ҡайтһа ла, Мөхи ҡарт үҙе тиҙ генә ҡайта алманы. Ҡайнаған самауыр һыуып бөттө. Ул юҡ та юҡ. Беҙ, бабайҙар, уны ҡотҡарыу сараһын эҙләй башланыҡ һәм Виткәнең яңы ҡолонлаған бейәһен егеп барырға булдыҡ.

Виткә бабай — минең олатайымдың знакумының ейәне. Ул беҙҙә үҫте тиһәң дә хата түгел. Атайым колхоз аттарын ҡараны. Виткә уның иң яҡын ярҙамсыһына әүерелде. Аттарҙы яратты. Атайым менән бергә ат көйҙөрөп, айғыр ҡүкәйе ашап үҫте.



Зоотехник, хәҙер ҙә атһыҙ йәшәй алмай. Гөлниса әбейе менән йылҡы ҡаҙыһы һәм ҡымыҙҙан өҙөлмәйҙәр. Араҡы эсмәйҙәр, суҫҡа ашамайҙар, хатта ураҙа тоталар. "Дуташка"ла йәшәгән ике аяҡһыҙ афганец та — улар ҡарамағында. Квартираһы айырым булһа ла, улдары кеүек ҡарайҙар.

Ҡумаҡлашып оҙон ҡуҡрәкле арбаға тейәлдек тә, ҡолон эйәртеп, күрше ауыл "концлагерына" Мөхи ҡартты азат итергә киттек. Ике ауыл араһында ағып ятҡан шишмәлә бейәгә һыу эсергәндә "Көнһылыу, Көнһылыу!" — тигән тауыш ишетеп барһаҡ, Мөхибеҙ ялан аяҡтарын шишмәгә тығып йоҡлап ятмаһынмы...

— Мухи курдаш, тор, ҡайтайыҡ!

Мөхи ҡартты оҙон ҡуҡрәккә тейәп, үҙебеҙ йәйәүләп, артынан төштөк. Арба һикерткән һайын Мөхи ҡарт башын күтәрә биреп: "Һәүкәш! Безәүкәй!" — тип мыңғырҙап ҡайтты...

Әңгәмә артабан дауам итте. "Бызау мәсьәләһен дә хәл итеп була уйлап эш итһән", — тине Әху бабай, Латвияны иҫенә төшөрөп. Унда һаман эҫкертләп ятты улар йәш саҡтарында.

Латвияла йорттар бер-береһенән саҡрым арала. Бесәнлеге лә, көтөүлеге лә йорто янында. Малай тыуһа, инселәп йорт һала башлайҙар. Эргәһендә генә булғас, йәйләп, бөтә ғаиләһе менән буш ваҡыттарында ғына төҙөйҙәр. Малай үҫә килә үҙе лә ярҙамлаша башлай. Һуңғы сиктә ул үҙе төҙөп бөтөрөп, өйлө булып, кәләш ала һәм балалар үҫтерә. Төҙөүсе һәм башҡа күп һөнәрҙәрҙе лә үҙләштерә бит инде. Беҙҙә ни йорт янында бәҙрәф төҙөргә лә урын юҡ, — тип тамамланы ул һүҙен.

— Улай булһа, торлаҡ, бала табыу мәсьәләләре лә килеп тыумаҫ ине. Ятып сығыр йорто булмай тороп бисәләр нисек бала табырға батырсылыҡ итһен?! — тине быға ҡәҙәр өндәшмәгән Зәйтүнә әбей. — Ана бит, Хәким бабай ваҡытында нисектер киңлеге егерме биш метр урынына илле метр майҙанды биләп алғас, янында ғына улына йорт төҙөнө. Бәләкәйерәк булһа ла йорто янында бесәнлеге лә бар. Һыу һибеп үҫтерә лә, ике мәртәбә сабып ала. Бызауҙары өсөн дә ашап йөрөрлөк урын һаҡлап ҡуйған.

Йорт төҙөүсе йәштәргә бөгөн бушлай берәр гектар ер бирергә кәрәк, тип һөйләшеп ултырған арала "дуташка" янына бер кубометрҙай гәрбил һөйрәп ЮМЗ-6 экскаваторы килеп туҡтаны.

— Слава бабай кәрәк, — тип ҡысҡырҙы тракторсы ярыҡ тәҙрәһенән. Сәйфи менән Мөхи барып һөйләштеләр ҙә трактор һуңғыһын ултыртып китеп барҙы. Сәйфи бабай: "Зәйтүнә, кәрәк менән һәнәгеңде алып торайыҡ әле", — тип һарай яғына йүнәлде. Тракторсы Мөхи хужалығына гәрбилен ҡалдырып, арба тағып килгәндә Виткә, Сәйфи, Әхү һәм мин кәрәк-һәнәктәр тотоп сүплек янында тора инек инде. "Баш ауырта бит әле", — тине тракторсы. Бераү ҙә өндәшмәгәс, "Солярка етмәҫ микән?" — тип шик белдерҙе лә эшкә тотондо. Беҙ сүплектең экскаватор ала алмағанын арбаға тейәнек. Сәйфи бабай менән тракторсы түгә китте. Әхү бабай канистры менән ун литр солярка, Зәйтүнә әбей бер шешә настойка сығарҙы. Сөнки сүплек өсөн яңы соҡор ҡаҙҙыраһы ла бар ине.

"Дуташка" янында тағы күк "Волга" күренгәндә соҡор ҡаҙылған, ә Мөхи менән афганец гәрбилдән ҡупшы итеп яһалған бәҙрәф ишегән резина "шарнирҙар" менән нығыталар ине. Экскаватор ҙур тимер чан һөйрәп килтерҙе. Подъезға "Газель" килеп туҡтаны. Ул кер йыуыу машинаһы тейәгән ине. Дәүи "дуташка" халҡын сәләмләне лә "Газель" шоферына аҡса бирҙе. Әбейе яулыҡҡа төрөлгән йомортҡа тотторҙо ла подъезға иғлан йәбештереп йөрөгән Зәйтүнә янына китте. **"Йәмәғәт! Соҡорға һыу ғына түгегеҙ. Ҡағыҙ, пластмасса һәм ҡаты сүп-сарҙы чанға ташлағыҙ. Соҡор ҡапҡасын бала-саға төшмәгәндәй итеп ябып йөрөгөҙ"**, — тип яҙылған ине унда.

Мөхи ҡарт экскаватор менән гәрбилдән яһалған йәшник килтерҙе лә бабайҙар менән бергәләп соҡор өҫтөнә ҡуйҙы. Сәйфи бабай ҡапҡасын ябып ҡараны ла: "Берҙә юҡ һымаҡ булмаҫ әле", — тине.

Был эштәрҙе күҙәтеп торған башлыҡ:

— Яҡшы булды. Рәхмәт инде һеҙгә, бабайҙар! — тип "Волганан" бер шешә һәм сало сығарып өҫтәлгә ҡуйҙы...

— Ауылдаштар байрамы була тип ишеткәйнек...

— Эйе, килеп сыҡһа, көҙгә йыйылабыҙ.

— Улайһа, шул иҫәптән берәй 70 – 80 ҡыҫҡа ғына булһа ла бағана бүлеп булмаҫ микән?

— Тағы нәмә уйланығыҙ, бабайҙар? — тип башлыҡ кәрт өҫтәле янына уҡ килеп баҫты.

— Хәҙергә бағана ғына булһа ла ярай. Һуңғараҡ, мужет, сетка ла килеп сығыр, — тине Әхү бабай.



— Бынау тыҡрыҡтан сығып, йылға аша быҙауҙар өсөн көтөүлек ҡамарға ине ниәт, — тине эшен бөтөп өлгөргән Дәүи бабай.

— Бер яғы халыҡтың огородтары менән ҡамаулы. Ҡалған өс яғына 80 – 90 бағана етергә тейеш.

— Ағас түгел, тимер торбалар кәрәк ине, — тип ҡыҙыҡһынып китте башлыҡ.

— Торбалыҡ уҡ хәл булмаҫ инде ул. Беҙ бағаналарҙы пасынкаларға тип тимер-томор, угольник, торба киҫәктәре йыйып ҡуйғанбыҙ. Ана, Мөхи ҡарт ҡапҡаһында яталар.

— Соҡор казыу да каракмай. Шул тимерзы кувалда белан катабыз да байлайбыз баганаларды. Тимерсыбык та бар. Телефон уткарганда йыйдыҡ.

— Ишетеүемсә, асфальт буйлап кәртә тотһаҡ, ыштанһыҙ осаға ҡайыш быуған кеүек була бит әле, иптәш Хантимеров. Бирегеҙ шул бағаналарҙы беҙгә? — Башлыҡтың элекке уҡытыусыһы Зәйтүнә әбейҙең был һүҙҙәре приказ төҫлө яңғыраны. "Дуташка" янына килеүенә үкенеп ҡуйҙы башлыҡ, тик сигенергә һуң ине...

Шешә лә булғас, беҙ тағы өҫтәл янына йыйылдыҡ. Башлыҡ Зәйтүнә әбей сығарған сынаяҡтарға шешәһен бүлеп бушатты ла, сало телергә бысаҡ эҙләп, кеҫәһен ҡапшаны. Мөхи ҡарт:

— Виткә, һин бысаҡһыҙ йөрөмәй торғанһың. Бир әле бәкеңде? — тине.

Мөхи Виткәнең сусканан сикәнгәнен белә. Салоны телеп бөткәс көләмһерәп:

— Ғәфү ит инде, Виткә дуҫ! Мин һинең салонан сикәнгәнеңде бөтөнләй онотканмын. Бәкеңде һабынлап йыуып алмаһаң?

Виткә өндәшмәй эскәндәрен һәм салоны ҡапҡандарын көттө. Бәкеһен бөкләп кеҫәһенә һалды ла: "Зыян юҡ, Мухи карт. Мин унын менан иртансак Нурикамал абейден каза такахын койдорткан инем", — тине. Мөхи ҡарттың ауыҙынан салоһы ырғып китте. Зәйтүнә әбей ҡулына алған киҫәген шым ғына өҫтәлгә кире ҡуйҙы ла, еңен еҫкәп, өйөнә инеп китте. "Һеҙҙең менән күңелле икән", — башлыҡ дәртләнеп хатта кәрт тотоп алды. Әңгәмә дауам итте.

— Керйыуғысың боҙолған икән. Сәүит машинаһына етеү ҡайҙа? — тине Әхү Дәүигә ҡарап. — Бына мин ҡырҡ йылдан ашыу тотонам. Боҙолғаны ла, төҙәткәнем дә юҡ.

— Булмаҫ, — тинем мин. — Ҡарағаның да, майлағаның да юҡмы?

— Майламай булмай инде. Майлаһаң, йырлап китә. Майлауы ла еңел, бер нөктәнән генә. Хәҙер ни кер ҙә күп түгел бит.

— Аһ-аһ, Әхү бабай. Һин һәр ваҡыт тормоштан артта һөйрәлдең, — тип яуапланы Дәүи. — Хәҙергә машинаға етәме инде ул: йыуа, һыға, киптерә, үтекләй...

Керйыуғысын төҙәттереүгә күп көс, акса һәм биш тауығының ун көнлөк йомортҡаһын сарыф иткән Дәүи Әхүнән көнләшеберәк тә ултыра, буғай.

— Минеке лә йыуа, һыға, киптерә... — тип һүҙен башлағайны Әхү, Мөхи ҡарт:

— Ҡайҙан алдың, марҡаһы ниндәй? Хаҡы? — тип һорауға күмеп ташланы. Төҫөнә ҡарағанда Мөхинең дә керйыуғысы юҡҡа оҡшай. Һатып алырға уйлай, ахыры.

— Баймаҡтан алғайным. Борон ҡул менән йыуылар ине уларҙы. Бер ғаилә, ирле-ҡатынлы өйҙәрендә эшләне. Барыһы биш-алты бөртөк кенә сығарҙылар.

— Ә хаҡы?

— Хәҙер исемдән сыҡҡан инде. Акса юҡ мал. Һарыҡ бирҙек шикелле. Магарычы ла булды.

— Марҡаһын әйтмәнең бит әле. Марҡаһы ниндәй? — Мөхи ҡарттың бөтөнләй түҙемһеҙлеге бөттө. Кәртен дә онотоп, ауыҙын асып көттө ул яуапты.

— Сони! — тип мут йылмайҙы Әхү бабай.

— О-о-о, хәйләкәр Әхү! Ул япон машинаһы ла инде, — тип шаулаштыҡ беҙ.

— Күрһәт беҙгә "Сони"ңды, — тип Мөхи ҡарт, кәрттәрен күтәреп һыҡты. Бөтәбеҙ ҙә Әхү артынан эйәрҙек.

— Дөрөҫөн әйткәндә, ул — беҙҙең марка. Япондар уны Баймаҡтан урлағандар, — тип Әхү бабай ишеген асты ла:

— Сания, сыҡ әле, бабайҙарҙың һине күрһәләре килә, — тип ҡысҡырҙы.

— Ни булды тағы һеҙгә? — тип касандыр Баймаҡтан килен булып төшкән Сания әбей ишек төбөнә үк килеп баҫты... Ул ҡулына һабынланып бөткән тулҡынлы кер йыуыу таҡтаһын тотоп тора ине.



# "Әпипә"

Урыҫ колхозында эшләйем. Еңел кошевка санаға ерән айғырҙы егеп, тыуған ауылыма ҡайтып барам. Һуңғы урыҫ ауылын үтеп, Сатра һыртына менгәс, атымды тиҙләтеү ниәте менән дилбегәмде өҙөп кенә сирттерҙем. Ләкин атым шып туҡтаны ла ҡуйҙы. Толоп яғаларын ҡайырып алға ҡараным. Ат башында ҡулына ниндәйҙер торба тотоп мыҡты, йыуан кәүҙәле бер әҙәм тора. Күршем Юлай ҙаһа был!

Иҫәнләшкәс, "Ҡайҙан киләһең?" — тинем мин, уның ҡулындағы торбаға ымлап.

— Район клубына ҡурайсы булып эшкә инергә ине ниәт, — тине ул, уфтанып. — Фәридә ноҡот һалып, минең өйҙә эшһеҙ ятыуымды белеп ҡалған.

— Алманылармы һуң?

— Уйнатып ҡаранылар ҙа, беҙгә ҡурайсы кәрәкмәй тинеләр.

— Ниндәй көй уйнағайның һуң?

— Шул "Әпипә"не инде...

Бала саҡтарҙа Юлай менән көнө-төнө тальянка сыйылдаттыҡ. Ҙурая биргәс, мин ике рәтле гармунға, ә ул ҡурайға күсте. Тальянкала ла, ҡурайҙа ла Юлай "Әпипә"нән башҡа көй уйнай алманы. Дүртенсе класта уҡығанда "Пионер" журналында дүрт юллыҡ шиғырым баҫылғайны. Шул көндән алып Юлай: "Фәридәгә арнап таҡмаҡ яҙып бир", — тип арттан ҡалманы.

"Өсөнсө синыфта Фәридә,
Икенсеһендә Юлай.
Фәридәгә көй бағышлап
Ҡурайын уйнай Юлай", — тип яҙып биргәйнем, "икенсе"

һүҙен "дүртенсе"гә төҙәтеп, уны биш көн самаһы ятлап ыҙаланы. Аҙаҡ шул "Әпипә"не уйнай ҙа "Фәридәгә һин яҙған таҡмаҡты уйнайым" тип шатланып йөрөр булды.

Фәридәләр күрше ауылда йәшәй, атаһы Хәсән бабай — балта оҫтаһы. Әсәһе Заһира инәй — өй хужабикәһе. Ноҡотто бик дөрөҫ һала. Хатта өйҙә ултырып та Хәсән ағайҙың ҡайҙа йөрөгәнен белә, тейҙәр. Бер мәл шулай ноҡот Хәсән ағайҙың Һауа исемле бер янғыҙ әбейҙә сәй эсеп ултырыуын күрһәткән. Заһира инәй юл буйлап мығырҙап китеп бара икән:

— Ҡоромағыр, ҡайҙа булһын, шул һауалалыр инде?!

— Юу-у-ҡ, әбей, мин һауала түгел, ерҙә! — тигән һүҙҙе ишетеп, юл ситендәге һыулы канауҙан алып ҡайтҡан Хәсәнен...

— Һин эшләгән колхозда кәрәкмәйме ҡурайсы? — тип һүҙен дауам итте Юлай.

— Ярай, белешермен әле, — тигән булдым мин. — Йә, уйнап ҡара әле...

Ул ҡурайы эсенә тулған ҡарҙы өрөп сығарҙы ла һыҙғыртып та ебәрҙе. Көйө "Әпипә"гә лә, ҡарҙа ышҡылған сана табаны тауышына ла, буран һыҙғыртыуына ла оҡшап ҡуя ине. Ҡалай ҙа Юлай уйнап бөтөүгә көн боҙола төштө, юл ауырайҙы, юртып барған атым да атлай башланы.

— Юлай, эш эҙләп йөрөмә, атайың менән йылҡы көтөшөү үҙе ҙур һөнәр инде, — тинем мин. — Коҙгәһен мул итеп иген бирәләр.

— Атайым миңә дүрт тоҡ бойҙай алдым тип әйткәйне. Дүрт тоҡ бойҙайҙан нисә тоҡ он сыға? Нимәлер иҫенә төшкәндәй Юлай дәртләнеп китте лә тағы моңһоуланды. — Ат менән йөрөү эш буламы тип әйтмәһә ярар ине Фәридә. Ат менән эшләү ноҡотка төшә микән?

Был һорауҙар миңә бирелгән хәлдә лә минең уларға яуабым юк ине.

— Атыңды ниңә ауыҙлыклап йөрөтәһең? Һинең ауыҙыңа арҡыры тимер тешләтеп, ул-был яҡка тартҡылап торһалар яҡшы булырмы? — тине ул миңә ҡарап. Эстән генә уның менән килештем. Сөнки минең янда йылҡы белгестәренең берәүһе ултыра ине...

Тау итәгендә ултырған ауылыбыҙ ҙа күренде. Әсәй-атай көтмәйҙер инде. Ҡайтам тип хәбәр ҙә ебәрмәгәйнем...

— Дуҫ, — тине Юлай, ҡурайын һыйпап. — Әйҙә, атың менән Фәридәгә барып киләйек. Ҡатыраҡ һөйләшеп ҡарайым әле. Һин дә ярҙам итерһең. Әрмегә китһәм, өйҙә килен кәрәк.

Өйгә лә барып тормай, аттың башын шаҡара тартып, Юлайҙың кәртә артына барып туктаныҡ. Юлай йәшенеп кенә барып аҙбарынан санаға ике тоҡ он сығарып һалды. Оҙонораҡ булһа ла атаһының толобон кейеп алды. Күңелебеҙҙә беҙ Хәсән бабайҙың түрендә ултыра инек. Фәридәләрҙең ауылы мин



эшләгән колхоз яғында булғас, ерән айғыр дәртләнеп йүгереп тә китте.

Ҡайны йортона шешәһеҙ барып булмай. Лавкаға боролдоҡ. Ул бикле булып сыҡты. Һатыусы Ғәлиә өйөнән дә һата, тигәстәр, барып бер тоҡ ондо биш шешәгә алмаштырҙыҡ. Юлай өс шешәне алды ла, икәүһен иртәгә кәләш әйттергәндә алырбыҙ, тип, Ғәлиәгә ҡалдырҙы.

Хәсән бабайҙы беҙгә ҡарағанда кошевка сана, ерән айғыр хайран ҡалдырҙы. Юлай бер тоҡ ондо соланға күтәреп индергәс, ул тағы кәйефләнеп китте. Мин саналағы өс шешәне лә килтереп сығарғас, ихатаһының өс баҫҡысын бер баҫып өйөнә инеп киттe. Фәридә аҡ алъяпкысын бәйләп тора. Миңә ҡарап йылмайҙы ла атаһының гармунын һөрткөләне. Ингәс тә мин ҡарашым менән урындыҡ өҫтөндәге һандыкка йыйылған ҡаралдыны барланым. Сөнки аҫтан өҫөнсө булып яткан кейеҙ аҫтында Зарифа әбейҙең ноҡот таштары йыйылған. Юлай менән алдан һөйләшкәнсе, мин уларҙы сәлдерергә тейеш. Юғиһә әбей ноҡот һалып, Юлайҙың эшкә төшә алмауын белеп ҡалыуҙары бар...

— Афарин, килен буласаҡһың! — тип Фәридәнең арҡаһынан һөйөп ҡуйҙым. Зарифа әбей менән Хәсән бабай түйға әҙерләнгәндәй сәбәләнде. Хатта мейес янында бер-береһе менән төкөшеп тә алдылар. Юлай ингәнсе бер һүҙеҙ ултырып булмай бит инде.

— Фәридәнең кулын коҙалап йөрөгән һын инде, — тигән булдым мин, үҙемдең яусы икәнемде белгертергә теләп.

— Ярай, ярай. Хәйерле сәғәттә, — тине Хәсән бабай ашъяулыкка, стакандар теҙеп.

Юлай килеп ингәс тә, күрешеп тә тормай, түргә менеп китте. Ул был өйҙә үҙ кеше инде, тип уйланым да, ашъяулыктың һандыҡ яғындағы мөйөшөн биләнем...

Тәүге стакандарҙы иҫәнлеккә-һаулыкка, ҡалғандарын Юлайҙың ат тураһындағы һүҙҙәрен һәм ҡурай тауышын кеүәтләп күтәрҙек. Хәсән бабай гармунда уйнай. Зарифа әбей оҙон көйҙәрҙе ярата. Борон үҙешмәкәр түңәрәктә халыкты хайран ҡалдырып йөрөнөләр. Әле лә Юлай үтенеүе буйынса Хәсән ағай гармунда "Сәрмән"де һыҙҙырып ебәрҙе.

—Гармун менән ҡурайҙың бергә уйнағанын ишеткәнең дә юҡтыр әле, — тип Юлай ҡурайын алды. Тик Хәсән бабай "Сәрмән"де, ә Юлай "Әпипә"не уйнанылар. Шунан буласаҡ кейәү Зарифа әбейҙең "Уйыл"ын "Әпипә" менән оҙатты..

Юлай был кисәлә Фәридә тураһында бер һүҙ ҙә күтәрмәне лә, һорамаңы ла. Күҙем менән ымлап ҡараһам да, ул һүҙҙәрен тик ат һәм ҡурай тураһында алып барҙы... Хәсән ағай менән Зарифа әбей "Әпипә" көйөнә бейеп алдылар ҙа, Фәридәне эргәләренә ултыртып, яуап ала башланылар.

— Кейәүгә сығырға ризаһыңмы?

— Риза... — тине Фәридә оялып.

— Ихтирам итерһеңме, яратырһыңмы иренде?

— Әйе...

Шул арала мин ҡарамай ғына ҡапшап теге кейеҙ аҫтындағы ноҡот таштарын әләктереп салбар кеҫәһенә һалып та ҡуйҙым... Ноҡотто өшкөртөлгән таштар менән генә һалалар. Зарифа әбей ҡасан яңы таштар өшкөртөп алғансы, Юлай Фәридәгә өйләнеп тә өлгөрөргә тейеш...

Иртәгә килергә вәғәҙә итеп ҡайтырға йыйындыҡ. Шул ваҡыт "туҡтағыҙ әле" тип Зарифа әбей камзул кеҫәһенән ноҡот таштарын килтереп сығармаһынмы! Юлайҙың хуш көйө "Әпипә"не уйнарға тип асылған ауыҙы башҡа ябылманы. Зарифа әбей: "Иртәгә бирәүегеҙ өйләнә", — тине Зарифа әбей, юлдашыма ҡарап. Юлайҙың ауыҙы ябылды, ә минеке асылып ҡалды...

— Иртәгә Фәриҙәнең аҡ кәзәһе бәрәсләй... — Зарифа әбей ноҡоттарын шылдыра торҙо. Фәриҙәнең ҡустыһы йүгереп урындыҡҡа менеп теге кейеҙ аҫтына ҡулын тыҡты ла: "Шәкәремде урлағандар", — тип илап ебәрҙе.

...Юл ыңғайы Юлайҙың ҡалған ике шешәһен алырға тип Ғәлиәнең өйөнә индек. Ләкин Ғәлиә Юлай менән һөйләшмәне лә, индермәне лә.

— Биш шешәгеҙҙе лә бая биреп сығарҙым даһа, — тине лә ҡуйҙы.

Ғәҙәттә, төн уртаһында буран тынысланы торғайны. Бөгөн ул, ҡарҙы өйөрөлтөп, юлға һалып ҡына торҙо. Айғырыбыҙ тыныс ҡына юрғалап барҙы. Ауылға боролорға теләп, дилбегәне тартһам да, башы боролмай, тура барыуын дауам итте. Аптырағас, Юлай менән икәүләп тарттыҡ. Айғыр башын бирмәне, киреһенсә, тиҙлеген арттырып саба башланы. Туп-тура эшләгән колхозыма, ҡайтыу яғына сапты. Юлай менән күпме



генә ыҙалаһаҡ та уны туктата ла, бора ла алманыҡ. Сана айғырҙың артҡы аяҡтарынан ырғыған ҡар менән тулды. Ул арала ауылдың уттары ла күренде...

Юлайҙың ҡулында тотоп килгән кәпәсе елгә осоп китте. Боролоп ҡараған арала, сана ҡыйшайып, дуҫым да толобо менән сананан төшөп ҡалды. Уға "йүгер" тип ҡысҡыра-ҡысҡыра атты туҡтатырға тырышам. Тик бер нәмә лә килеп сыҡманы. Юлай алыҫлашҡандан-алыҫлашты...

Айғырым мин фатирҙа йәшәгән мәрйәнең ҡапҡаһына килеп еткәс кенә тынысланды. Мин Ғәлиәгә ингәндә Юлай уның ауыҙлығын ыҫҡындырған булған икән. Тиҙ генә өйгә инеп, еп-еүеш салбарымды ултырғыс арҡаһына элдем дә, икенсеһен кейеп, дуҫымды эҙләргә йыйындым. Салбар кеҫәһенән дүрт-биш баш шәкәр иҙәнгә төшөп шаҡылданы. Атты ауыҙлыҡлап, Юлайҙы таң атҡансы эҙләһәм дә тапмай ҡайттым. Башҡа ауылыма ҡайтып тормай эшкә керештем. Гел генә төндәрен ат көтөп өйрәнгән Юлайҙың бирешмәүенә ышана инем...

Өс-дүрт көн үткәс, колхоз правлениеһы кәңәшмәһенән сыҡҡанда ветврач Василий мине туҡтатты ла: "Тыңла әле, һинең Юлай исемле иптәшең бармы?" — тип һораны. Мин тертелдәп киттем.

— Әллә берәй хәл булдымы?

— Юу-ук. Ул в полном здравии, — тигәс кенә тынысланып, уның күҙҙәренә ҡарап, һөйләүен һораным.

Төн уртаһында Василий ишек шаҡыуға сыҡһа, ҡурай тотоп, толоп кейгән егет тора. Ул бөтөнләй русса һөйләшмәй. Тик минең исем-шәрифте генә әйтә икән. Василий уның танышым булыуын аңлап, икенсенән, өшөгәнлеген күреп, өйөнә индерә лә мейес башына мендереп толобон ябып ҡуя. Ул үҙен Юлай тип таныштыра. Таң атыуға Василий ҡатыны Мария менән көслө буран тауышына уянып китә лә аптырап ҡалалар. Буран ыжғырыуы мейес башынан ишетелгәндәй булғас, пәрҙәһен асып ебәрәләр ҙә күҙҙәренә ышанмай торалар.

— Юлай ҡурай һыҙҙыртып ултыра. Мейес башында, мөйөштә Марияның бер мискә алма настойкаһы тора ине. Краны аша яртыһын һурып өлгөргән, — тине ул, китергә йыйынып. Мин түҙемһеҙләнеп: "Шунан ни булды?" — тигәс, санаһына ултыртып һөйләй башланы:

— Сәй эсереп, толобо менән ҡурайын тоттороп, ферманан һөт ташыған тракторға ултыртып ҡайтарып ебәрҙем. Тик ул кире килде, фермала эшләгән Фуаттың Әпипә тигән ҡыҙына өйләнде.

Беҙҙең тыуған ауылда сепаратор бар ине. Уға көн дә иртән һәм кис күп кенә колхоз-совхоздар һөт ташыны. Мин эшләгән урыҫ колхозында ла көн дә ДТ-54 тракторына сана тағып флягалар тейәйҙәр ҙә, шунда алып китәләр ине. Тракторист менән флягалар күтәрешеүгә берәй һауынсы ла бара торғайны. Хәҙер саналағы флягалар араһында һауынсы Әпипә менән Юлай ҙа була. Ул Әпипәгә толобон кейҙереп, барып ҡайтҡансы ҡурайҙа бейетә.

Бөгөнгә көндә бергә йәшәп яталар. Тик ишетеүемсә, хәҙер Әпипәгә Юлай бейей, тейҙәр.

# Йәйләүҙә

***Йәшләй генә яҡты донъя менән хушлашҡан улым Арсендың яҡты иҫтәлегенә бағышлайым.***

— Өләсәй, Ринаттың әсәһе кисә егерме һыйыр һауҙы... — тип һүҙ башланы Артур иртә менән.

— Ә "Ҡыҙыл мөйөш"тә Таҡыя апайҙың ун биш һыйыры бар тип яҙылған, — тип ҡыҫылды Арсен урындыҡта ятҡан килеш кирелеп.

— Һин ундан артыҡ һанай белмәйем тигәйнең дәһә? — тине өләсәһе Арсенгә.

— Ҡалған бишәүен Артур ағайым һанап миңә ҡушҡайны — ун биш булды.

— Торогоҙ, йылғаға барып йыуынығыҙ ҙа сәй эсәбеҙ.

Малайҙар йүгерешеп шишмәгә китте. Артур, беренсе класты ғына бөтһә лә, бик зирәк, иғтибарлы, сос һәм тиҙ уйлап табыусан малай. Бер мәл көндәлек биттәренә һарымһаҡ һөртә башлаған Артурҙы әсәһе күреп: "Ни ҡыланаһың, улым?" — тигән һорауына "Математика уҡытыусыһы һарымһаҡ еҫен күтәрә алмай, — тип яуапланы. — Хәҙер ул көндәлегемә ике билдәһе ҡуя алмаясаҡ".

Арсен әле уҡымай. Биш йәштә. Ул күп хәрефтәрҙе таный, иҫәпләй белә. Үткер күҙле, яҡшы иҫле, яғымлы, илгәҙәк малай.

Шишмә бик һалҡын. Малайҙар килгәндә совхоздың һөт ташыусы машинаһы һыу һурҙыра ине.

— Нинә һөт өҫтөнә һыу ҡояғыҙ? — тип төбәште малайҙар.

— Мин машина эсен сайҙыртып торам, хәҙер түгеп китәм, — тип алданы шофер һәм был урындан тиҙерәк тайыу яғын ҡараны.

Артур, атаһы өйрәткәнсә, биленә тиклем сисенеп йыуынды. Ә Арсен балыҡ тешләй тип ярҙан ғына күҙҙәрен, танау аҫтын һыуланы ла йүгереп ҡайтып та китте. Ҡайтыуҙа ем һибеп йөрөгән Ринаттың әсәһе янында туҡтап тауыҡтарҙы һананы:

— Бер, ике, өс, биш, туғыҙ...

Ҡапыл малайҙың елкәһенә әтәс килеп ҡунды. Артур менән Таҡыя апай көскә айырып алдылар.

— Суҡынымы?

— Юҡ, ул мине яратты ғына, — тип яуапланы Арсен. Әтәс ҡанаттары менән инбаш-яуырындарын ғына ҡаҡҡылағайны.

Малайҙарҙың өләсәһе Өмөкамал инәй ғүмере буйы һыйыр һауҙы. Йәш сағында үк ҡышҡыһын тар ғына ферма эсендә батып, аяғын сығара алмай торғанда яратҡан Йөнтәҫ исемле һыйырының мөгөҙө эләгеп күҙен зәғифләгәйне.

Ҡыш совхоз бүлексәһендә, ә йәй тау-урман араһындағы йәйләүҙә санаторийҙағы кеүек йәшәне улар. Бында өс мәртәбә һыйыр һауыуҙан башҡа эш тә булмай. Малдар көнө-төнө көтөүҙә. Кешеләр мал-тыуары менән күсеп киләләр йәйләүгә. Күп кенә яңғыҙаҡ егеттәр һәм ҡыҙҙар ҙа эшләй. Шуға күрә киске һауындан иртәнгеһенә ҡәҙәр йәйләү һабантуға әйләнеп китә. Уйын-көлкө, йырлап-бейеп эшләй улар. Совхоз һәр береһенә йәйге йорт төҙөп, мейес сығарып, электр уты үткәреп, хатта магазин да эшләп даими рәүештә аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеп тора. Матур бәләкәй генә ауылға әйләнә совхоз-колхоз йәйләүҙәре йәй осоронда...

Малайҙар өҫтәлгә ҡуйылған яртылыҡ банкаларҙағы һөттө күтәреп эстеләр ҙә, көсәйҙек тип, бер-береһенең мускулдарын тотоп ҡараны. Артабан өләсәйҙәренән рөхсәт алып, шишмәнең иң тәрән урынына балыҡ тоторға киттеләр. Күпме торһалар ҙа өс сабаҡтан ары балыҡ ҡапманы.

— Артур ағай, минә лә ҡармаҡ яһап бир әле? — тип үтенде Арсен, ҡайтҡас.

— Ҡармаҡ бирәм, ә бауын үҙең бәйләп алырһың.

— Мин бәйләй белмәйем. Өйрәт һуң...

— Өйрәтһәң ни була. Ул бәләкәй бит әле, — тине өс литрлыҡ банкаларға еләк вареньеһы тултырған Өмөкамал инәй.

— Еләк күп быйыл, ә бына банкаларым бөтөп ҡуйҙы, — тип зарланды ул, — иртәгә "банка ебәрегеҙ" тип молоковозға әйтеп ҡайтармаһам инде...

Артур Арсен ҡустыһына епте ҡармаҡҡа һәм ҡалҡыуыска бәйләргә өйрәтте. Арсен тиҙ генә отто.

Киске һауын ваҡыты ла етте. Көтөүселәр малды кәртәгә бикләп, һауынсылар һауған арала киске ашҡа таралды. Ферма мөдире Шәкир ағай ҙа атын тышаны ла, өй алдында торған Артур менән Арсендең баштарынан һыйпап, Таҡыя апайҙың өйөнә инеп китте.

— Ринат өйҙә юҡ. Молоковозға ултырып олатайҙарына китте, — тине малайҙар. Шәкир ағай Ринатты һыбай йөрөргә өйрәтә ине. Ләкин ул бер нәмә лә әйтмәй инеп китте, тик, нимәнәндер шикләнеп, кире ишекте асты ла:

— Хәҙер ҡояш байымаҫ борон хәйер генә бирәм дә сығам, — тип эстән бикләп ҡуйҙы.

— Ринаттың әсәһенең һыйыры былай ҙа күп. Шәкир ағай тағы ла бирәү бирһә, егерме бер була инде, — тине Артур Арсенгә.

— "Ҡыҙыл мөйөш"тә лә ун бишкә бирәү ҡушып яҙып ҡуйырға кәрәк, — тине Арсен.

— Әйҙәгеҙ, малайҙар! — тип ишеген бикләне лә Өмөкамал инәй киске һауынға китте.

Нишләптер Таҡыя апай һуңланы. Уны һыйырҙары көтөп баҡыра. Береһенең имсәктәренән һөтө саптыра. Тукал исемле һыйыры өләсәй һауып ултырған Һәүкәшкә арты менән терәлеп торғанда көйшәй генә. Өләсәй Фиалкаға күсте.

— Арсен, кил бында, һыйырҙар тибеп ҡуймаһындар, — тине ул. Ләкин малай ике һыйыр араһында сыуалды. Таҡыя апай килеп Тукалын һауырға ултырҙы ла, йәнә аяғына баҫып:

— Һәүкәш, ҡамасаулама әле! — тип өләсәйҙең һыйырын этәреп ебәрҙе. Һәүкәш бер-ике аҙым атлауға Тукал да унын артынан шыуҙы.

— Быларға ни булған? — тип Таҡыя апай көскә тайшанып өлгөрҙө, Тукал Һәүкәште үкереп һөйрәй башланы. Ике һыйырҙың ҡойроғон бәйләп, Арсен ҡармаҡ бәйләү буйынса күнегеү үткәргән булып сыҡты. Һыйырҙар үкерешеп, ерҙе тырнап тартыштылар ҙа, Тукалдың ҡойроғо өҙөлөп, ул тоҡоска, ә Һәүкәш оҙон ҡойроҡлоға әүерелде. Таҡыя апай Тукалдың ҡанап торған ҡойроғон бәйләп ҡуйҙы.

— Өләсәй, Тукалдың ҡойроғо булмаһа ла быҙауы сығыр микән? — тип ҡайғырҙы Арсен.

Артур менән Арсен — Өмөкамал инәйҙең ҙур ҡустыһының улдары. Ата-әсәләре — ҡала янындағы ҙур ауылда уҡытыусылар. Мал көтә алмайҙар. Өмөкамал инәй: "Малайҙар миңә иптәш булырҙар", — тип йәйләүгә алып килгәйне. Уларға бында рәхәт. Бәшмәк, еләк, сейә йыйыштылар, балыҡ тоттолар, һөт эстеләр, ҡаймаҡ яланылар. Һауын барғанда һыйырҙар араһында сыуалдылар, атта йөрөп маташтылар.

Артур менән Арсен, һауын бөткәс, фляғалар тейәлгән Шәкир ағайҙың арбаһына йәбешеп йөрөнө. Ҡайтыуҙарына Өмөкамал инәй мейескә икмәк ултыртып йөрөй ине. Арсен йүгереп килде лә:

— Өләсәй, мейесеңде япма, беҙ икмәктең нисек ҡайнағанын ҡарайбыҙ, — тип үтенә башланы.

— Япмаһаң — бешмәй, икмәкте ҡайнай тип әйтмәйҙәр, — тип аңлатты өләсәһе.

— Беҙ башка һинең менән уйнамайбыҙ, — тип әҙерәк өләсәһенә үпкәләнеләр ҙә, малайҙар берәр банка һөт эсеп, иртәгә балыкка барырға килешеп йоҡлап китте.

* * *

Артур менән Арсен иртәнсәк уяныуға йәйләү геүләп тора ине. Баҡһаң, меҫкен Тукалды айыу һуккан икән. Такыя апай илай, уға кушылып бөгөн иртән һөт ташыусы машина менән килеп төшкән Ринат ла һулкылдай. Шәкир ағай ауылдан һунарсылар саҡыртырға, көтөүсе Митька менән Нурғәле ағайҙы Тукал яткан ерҙәге ағас башына һунарсыларға айыуҙы аңдып ултырыу өсөн тағарак яһарға ебәрергә өлгөргән.

Малайҙар өлкәндәрҙең ығы-зығыһын тиҙ онотто, һәм кистән һөйләшкәнсә, көрәк алып, селәүсен эҙләргә йыйынды. Шишмәлә бағры балығы бар, тик ул фәкәт селәүсгә генә каба. “Яр буйында булмаһа, һыйыр тиҙәге аҫтынан эҙләп карағыҙ”, — тип өйрәтеп калды өләсәләре.

Ринатты ла саҡырыу ниәте менән малайҙар Такыя апайҙарға инде. Улар икеһе лә һаман илауҙан туктамаған.

— Ҡайғырма, Ринат дуҫ, Тукал үлһә лә, Шәкир ағай һеҙгә тағы бер һыйыр бирҙе һин өйҙә юкта, — тип йыуатты Арсен. Ринат аптырап Артурға караны.

— Эйе, кискеһен “һыйыр бирәм” тип һеҙгә инеп киткәйне...

Яр буйында ярты сәғәт соконғандан һуң селәү тапмай, малайҙар кәртә янында өйөлөп яткан һыйыр тиҙәгенә табан йүнәлде. Улар киткәс, Ринат өйгә инеп:

— Әсәй, Шәкир ағай беҙгә һыйыр бирҙеме? — тип һораны.

— Нindәй һыйыр тағы? Бер ниндәй ҙә һыйыр бирмәне! — тип аптырай төштө әсәһе. Ринат Артур менән Арсендең һүҙҙәрен бәйнә-бәйнә һөйләп биргәс кенә ул:

— Әй, онотоп та торам. Биргәйне шул. Тик һыйыр түгел, ә хәйер, — тине Такыя апай, Ринатты тышка сығарырға ҡабаландырып.

— Хәйер нимә була ул? — тип һорап караһа ла, әсәһенән башка яуап булманы.

Өмөкамал инәй төшкө һауынға йыйына башланы, сыр-сыу килеп, Артур менән Арсен килеп инде. Артурҙың һәр кулында — икешәр өс литрлык банка.



— Өләсәй, беҙ һиңә варенье һалырға банкалар таптык. Шоферға әйтеп тә торма. Кәрәкһә, тағы килтерәбеҙ, — тип шатланышты кем уҙарҙан малайҙар. Артур дүрт кубышканы тиҙ генә урындыкка ҡуйҙы. — Өләсәй, уларҙы йыуып ал. Эсендә быҫраҡ һыу ине. Беҙ түктек.

Шул арала өй эсендә ниндәйҙер әсе, һаҫык ең таралып өлгөрҙе...

— Өләсәй, — тине Арсен, Артурҙы бүлеп: — Мәктәптә бәҙрәфкә барһаң килһә, кул күтәрәһең, ти Артур ағай. Ә бында тиҙәккә күмелгән банкалар, аҫтарына селәүсән йыйылһа, мәктәптәге кеүек кул күтәрә икән.

— Ҡулдарын күтәрмәгән банкалар ҙа бар. Тик улар аҫтында селәүсәндәр юк, — тип һүҙен кеүәтләне Артур Арсендең. Эштең нимәлә икәнен аңлап алған Өмөкамал инәй көйөргә лә, көлөргә лә белмәне. Сөнки малайҙар һауынсыларҙың тиҙәк йылыһына әсетергә ҡуйған балдарын тапкандар ине. Етмәһә, әсегәндәрен, был шәмбеләгә уйынға тәгәйенләнгәндәрен генә түккәндәр... Бал әсеп өлгөрһә, банка ауыҙына кейҙерелгән резина бирсәткәләр, газ тулып, “мин бында” тигән кеүек кул күтәреп ултыралар.

* * *

Артур, Митька ағай өйрәтеүенсә, шишмә ятыуына етмәҫ борон Ринат менән Арсенде ҡалдырҙы ла, һаҡ кына баҫып, селәү ҡуйылған, калкыуысһыҙ кармағын һыуға ташланы. Ул һыуға төшөп тә өлгөрмәне, бер балыҡ ырғып кармакты тешләне лә һөйрәп алып китте ҡумырык төбөнә.

— Ҡармакты каты тартһа ла, ашыкма. Селәүен йотканын көтөр кәрәк, — тигәйне Митька ағай. — Юғиһә, ул ыскынып төшә лә ҡала.

Артур һак кына кармағын тартып караны. Ул арала малайҙар ҙа йүгереп килеп етте.

— Теймәгеҙ кармакка! — тине Артур, үҙе уны иплэп кенә ярҙың һөҙәгерәк урынына тарта башланы. Күп тә үтмәй кармак осонда ҙур балыҡ башы күренде лә кире һыу аҫтына инеп юғалды. Өс малайҙың да йөрәктәре ат тояктарындай тукылданы. Епте өҙөү ниәте менән аркыры килеп маташһа ла яйлап кына ярға сығырға мәжбүр булды бағры. Арсен “ура” кыскырырға ауыҙын асһа ла тауышы сыкманы. Тамактарын шатлык кепләгән ине малайҙарҙың.

Ҡармағына кило ярым батша балығы килеп капкан оло йәштәге балыксыны күҙ алдына килтерһәм дә, бишете йәшлек

балалар ҡыуанысын бер нисек тә тулыһынса тасуирлап булмаҫ кеүек.

— Былай ҙур булғас, эсендә себештәре лә барҙыр әле, — тине Арсен, бағрының ҡорһағын һыйпап.

— Балыҡ эсендә — бәләкәй генә суртандар, ә себештәр әтәс йомортҡаһынан сыға, — тип аңлатты Артур.

Малайҙар ҡармаҡтарын урап ҡайтырға йыйына башлағанда шишмә буйына фләгалар тейәп Шәкир ағай килеп туҡтаны. Төшкө һауын һыуға инеп ултырғас, Шәкир ағай тирә-яғына ҡарап алды ла тиҙ генә һәр бер фләгаға яртышар биҙрә һыу ҡойоп сыҡты. Ул ағас араһында балыҡты күрһәтергә күтәреп торған малайҙарҙы аңғармағайны. Улар маҡтау көттө.

— Шәкир ағай, ҡара әле! — тип ҡысҡырҙы Арсен сыҙамай. Тегеһе тертләп ҡуйҙы ла:

— Афариндар, ҡайһылай ҙур балыҡ! Әйҙә, ултырығыҙ, — тип малайҙарҙы тейәп тә алды арбаһына.

— Шәкир ағай, нимә һөткә һыу ҡойҙоң? — Ул Артурҙан быңдай һорауҙы көтә ине.

— Иртәгә молоковоз килгәнсе әсемәһен тип ҡойорға тура килә шул, ҡустым, — тине ул алдан әҙерләгән яуабын.

— Һыу ҡойғас, эсеп булмай, сысҡаҡлата лаһа?! — тип ҡуйҙы Ринат.

— Шәкир ағай! — тип һүҙҙәрен бүлде бөтәһенең дә Арсен. — Мин әсәйемдең эсендә ултырғанда ошондай суртан тотто атайым, — тип ҡулдарын йәйеп ебәреүе булды, ҡосаҡлап ултырған бағрыһы төшөп, арбаның артҡы тәгәрмәсенә эләкте. Атын туҡтатып Шәкир ағай эсе ярылған балыҡты арбаға, бесән өҫтөнә күтәреп һалды.

— Әйттем бит эсендә себеше бар тип! — Арсен уны ҡулына уҡ күтәреп алды. Бағры эсенән бәләкәй генә коштоң ҡанаты һәм суҡышы сығып күренеп тора ине.

— Бағры, суртан кеүек, йыртҡыс балыҡ. Йоҭҡандыр тегеһе ҡумырыҡ өҫтөнә ҡунһа, — тине Шәкир ағай.

Малайҙар, сәй эскәс, "Ҡыҙыл мөйөш"кә йыйылырға һөйләште. Унда Ринат менән Арсен шашка уйнаны. Ә Артур район газетаһы уҡыны. Был юлы уға Таҡыя апай ҡарап ултыра.

— Ринат, ҡара әле, әсәйең, — тине ул, газетаны күрһәтеп.

— Беҙҙең балыҡты тапаған арбала ултыра икән, — тине Арсен, һирпеп кенә ҡараны ла һүрәткә. Ринатты әсәһенең һүрәте ҡыҙыҡһындырманы. Ул күнегеп бөткән. Таҡыя апай күп йылдар инде алдынғы һауынсы.



Ринаттың бөгөн кәйефе юҡ. Туҡалына ҡайғыралыр, тип уйланы Артур. Ысынлап та, үлгән һыйыр һөтлө була шул. Тик Ринатты Туҡал түгел, ә "хәйер" һүҙе борсоно. "Нимә була ул?" — тип малайҙарға биргән һорауына ла йүнле яуап ала алманы.

— Шәкир ағай кисә әсәйемә һыйыр түгел, ә хәйер биргән, — тине ул, кәңәшкә өндәп. Малайҙарҙың күҙҙәрендә шунда уҡ ҡыҙыҡһыныу осҡондары тоҡанды.

— Өләсәйҙән һорайыҡ, — тип иң тәүҙә Арсен тәҡдимен әйтте.

— Юҡ, — тине Артур. — Беҙ уны үҙебеҙ асыҡларға тейешбеҙ. Юғиһә, кеше ишетеп ҡалыуы бар. Шәкир ағай хәйерен Таҡыя апайға бирмәй, икенсе һауынсыға биреп ҡуйыуы ихтимал...

— Йәки анау йәш һауынсылар Шәкир ағайҙың хәйерен тартып алып китеүҙәре лә бар!.. — тип хупланы ағаһының һүҙен Арсен.

— Ринат, һин ҡояш байымаҫ борон өйөңә ин дә, йәшенеп күҙәтеп ҡара. Нимә бирер икән Шәкир ағай әсәйеңә?

— Урындыҡ аҫтына йәшенмәһәм, башҡа урын да юҡ, — тип ризалашты ла Ринат ҡайтып та китте. Сөнки көн кисләп бара ине...

Ул арала Шәкир ағай һауынсыларҙы киске һауынға саҡыра ла башланы. "Эше менән булышып, Ринаттың әсәһенә бирә торған хәйерен онотоп ҡуймаһын", -- тип уйланы Арсен һәм ферма мөдиренең эргәһенә барып хәйләкәр төҫ менән:

— Ринат күренмәнеме ул? – тип һораны.

— Ҡайҙа булһын, өйөндәлер, — тине Шәкир ағай.

— Өйөнә барҙыҡ, унда юҡ шул, — тине малайҙар, оҫта алдай алыуҙарына ҡыуанып. Шунан улар "Ҡыҙыл мөйөш"кә дуҫтарын көтөргә китте.

Ун минут үттеме-юҡмы, Ринат йүгереп килеп тә инде.

— Малайҙар, "хәйер" аҡса икән! — тине ул шат тауыш менән. — Хәйерҙе ҡояш байымаҫ борон бирәләр ҙә, байыһа, кире алалар икән. Был юлы Шәкир ағай кире алып өлгөрмәне. Урындыҡ аҫтынан килеп сыҡҡанда әсәйем, итәген күтәреп, эсенә бәйләгән аҡсаны сисә башлағайны, мине күргәс, кире бәйләне. Тиҙүк миңә сәпиткә аҡса тула, тинеләр икәүләшеп, — Ринат велосипедта йөрөгән кеүек һикерә-һикерә сығып та китте.

— Ринат, сәпитеңдә мин дә йөрөп ҡарармын, йәме! — тип ҡысҡырып ҡалырға өлгөрҙө Арсен.

* * *

Һунарсылар килеүе тураһында хәбәр йәйләүҙә йәшен тиҙлеге менән таралды. Уларҙың береһе Өмөкамал өләсәйҙең бабайының ҡустыһы Ғәләүи булып сыҡты. Икенсеһе Насирйән исемле ағай ине. Көн кисләүгә Шәкир ағай менән Митька һунарсыларҙы ултыртып тағараҡ ҡоролған урынға алып китте.

Тиҙҙән ҡараңғы төштө. Һәр ваҡыттағыса йәйләүгә киске уйынға яҡын-тирә ауылдарҙан йәштәр йыйылды. Шишмә янындағы бәләкәй генә аҡлан уйын-көлкө, йыр-таҡмаҡ менән тулды. Тик гармунсы Митьканың түңгәге генә буш торҙо. "Ул хәҙер килә" тип көттөрҙө белеүселәр.

Һыйыр үләкһәһе ятҡан урын алыҫ түгел. Ғәләүи, ҡайын башына менеп, тағараҡты ҡарап төштө лә, Насирйәнгә күтәрелергә ымланы. Шәкир ағай менән Митька аттарын йәйләүгә табан борҙо.

— Арба тауышы тынып, йәйләүҙә ығы-зығы башланһа, таңды көтөп ятмай килергә тейеш, — тине Ғәләүи бышылдап ҡына. — Иҫәндә тот, башта һин атаһың...

Күп тә үтмәй йәйләүҙәге таҡмаҡтарға гармун моңо ҡушылды...

Һунарсыларҙың күҙҙәре ҡараңғыға күнегеп тә өлгөрмәне, ҡаршылағы ҡурай еләге араһында бер шәүләне абайлап ҡалдылар. Ҡурайҙар һыныуы, хатта айыуҙың мышылдауы ла ишетелә башланы. Ул ҡурҡмай ҙа, тайшанмай ҙа, туп-тура үләкһә өҫтөнә килә. Әйтерһең, бөтә донъяға ул хужа. Айыуҙың ҡыйыулығы алдында һунарсылар әҙерәк баҙап ҡуйҙы. Йөрәктәр дөп-дөп типте. Мылтыҡтарҙы айыу күкрәгенә тоҫҡанылар. Ул һуңғы һулыш алырғамы, әллә һунарсыларҙы һиҙепме, моронон өҫкә күтәреүе булды — төнгө сихри тынлыҡты бер-бер артлы дәһшәтле шартлауҙар ярып үтте. Бөтә йыһан, айыуҙың һуңғы йөрәк тибеше менән бергә уфтанды ла, уны оҙатҡандай, бер генә минутҡа тынып ҡалды...

Айыу көсһөҙ генә үкереп, һул ҡулын күтәрҙе һәм уны Туҡалдың башына һалып, йөҙтүбән йығылды. Ғәләүи ҡайындың аҫҡы ботағына баҫып йәнә төбәп атты.

— Хәҙер төшһәң дә була, — тине Насирйәнгә. Улар икәүләп айыуға табан йүнәлде.

Ярты сәғәт үттеме-юҡмы, урманды йәйләү халҡы килеп баҫты. Һуң булыуға ҡарамаҫтан, асыумы, әллә ҡыҙыҡһыныуымы бөтәһен дә айыу янына йыйҙы. Таҡыя апай януарҙы илай-илай



типкесләне. Уға ҡайһы бер һауынсылар ҙа ҡушылды. Егеттәр айыуҙы кемеһе аяҡ-ҡулынан, кемеһе башынан тотоп, ҡайҙа күтәреп, ҡайҙа һөйрәтеп йәйләү яғына алып китте. Шул арала Шәкир ағай атын егеп килеп, арбаһына айыуҙы һәм һунарсыларҙы тейәп алды.

Өмөкәмал еңгәһе менән алдан һүҙ ҡуйышыу буйынса, Ғәләүи ағай Артур менән Арсенде үҙе менән алырға тейеш.

— Бер-ике көн беҙҙә йөрөрҙәр ҙә, үҙем алып барырмын әсәйҙәренә, — тигәйне. Ә хәҙер айыу кәүҙәһе менән бергә малайҙарҙы алырғамы-юҡмы тип икеләнеп торғанда Арсен:

— Ағай, мин айыуҙың толобон сискәнегеҙҙе күргем килә, — тип үлсәүҙе үҙе яғына ауҙарып та ҡуйҙы.

— Ярай, алыҫ түгел бит. Бер нисек барып етербеҙ әле, — тип Насирйән малайҙарҙы оҙон күкрәк арбаға үле януарға һөйәндереп ултыртып та ҡуйҙы.

— Айыу һаҫыҡ, — тип сырылдашты малайҙар. Ғәләүи ағай өндәшмәй генә арбалағы кейеҙҙе тартып сығарҙы ла айыуҙың ауыҙ-моронон, башын ябып ҡуйҙы. Алыҫлаша барған арба тауышы араһынан Өмөкамал инәй Арсендең: "Айыуҙың әсендә быҙауы бармы?" — тигән һорауын айырым-асыҡ ишетте...

* * *

Нәзифә еңгәй ҙур ҡапҡаны асып юлаусыларҙы индерҙе. Арба янына килеп, йоҡлаған Арсенде күтәреп өйгә инеп китте, Артурҙы Ғәләүи ағай индерҙе. Нәзифә еңгәй — егәрле, туп-тумалаҡ ҡатын. Ғәләүи ағайҙың ҡасан килеүенә лә ҡарамай һәр ваҡыт ҡапҡаһын асып көтөп ала. Бер шулай ҡапҡа асырға өлгөрмәгәндән һуң еңгәйҙең сандырҙарында ярты йылға яҡын сыбыртҡы эҙҙәре ҡыҙарып йөрөнө, тип һөйләнеләр.

Малайҙар уянғанда урындыҡ ситендә ҡаҡса ғына апай ултыра ине.

— Мин Нәркәз булам. Ғәләүи еҙнәйҙәр ҡалаға айыу тиреһе менән итен алып китте. Нәзифә апайҙың бөгөн тыуған көнө — утыҙ йәш. Уға матур күлдәк алалар. Мин һеҙҙе ҡарап торорға ҡалдым.

Нәркәз малайҙарға сәй эсерҙе лә, өгөт-нәсихәттәрен уҡып, оҙаҡламай килерен белгертеп сығып китте.

Артур менән Арсен донъяны тикшереп сыҡты. Ғәләүи ағай эшләнә торған түбәнең аҫтына инеп туҡтанылар. "Бер балта менән сүкеш һапһыҙ яталар икән. Һаплап ҡуйғанда ағай шатланыр ине. Үҙе бушамайҙыр шул. Ана, кухняһында ла бер

тумбочкаһы ябылмай. Шифоньеры менән дә шул уҡ хәл", — тип уйланды Артур.

— Ағай, анау бысҡыны алып бир әле? — Арсен стеналағы ике ножовканың береһенә күрһәтте. Ә Артур икенсеһен алып, кәрәк һабын бысып — балта, ә тырманыҡынан сүкеш һапланы. "Һаптарығыҙ ҡайһылай оҙон. Ә сүкеш менән балтаныҡы бөтөнләй юҡ", — тип һөйләнде ул кәрәк менән тырмаға. Ә Арсен тышылдай-тышылдай түбәлек бағанаһын бысып ҡараны ла һөтләк тупһаһының таҡтаһына барып тотондо. Артур һалҡында эленеп торған салғы менән картуф һабаҡтарын сабып ҡараны. Атаһының "Бесән сапҡан кеше көслө була" тигәне иҫенә төшөп, ул мускулдарын һәрмәне. Картуфы ғына түгел, помидоры, еләге, өләсәй әйтмешләй, "өгөрсөһө"лә сәскә атып ултыралар ине Нәзифә еңгәйҙең!

Егеттәр, һеҙ ҡайҙа? Әйҙәгеҙ, төшкө сәйгә! — тип Нәркәз апай өйгә инеп юғалды. Батҡаҡ, әпилкәле кейемдәре менән түргә үтеп китте "егеттәр". Ҡурылған йомортҡаны юҡ иттеләр ҙә, Нәркәздең һорауы буйынса йоҡларға яттылар.

— Һеҙ торғансы еҙнәйҙәр ҙә ҡайтып етер. Мин өйҙәге бабай менән әбейҙе ашатып киләйем, — тип сығып китте ул. Ҡапҡа шығырҙап ябылғас та, малайҙар һикереп тороп, һөтләккә инеп юғалды. Мөйөштә ултырған бер биҙрә иҫке картуфты ике биҙрә һыу эсенә һалып йыуҙылар ҙа ҡаҙандағы эсе ҡатыҡҡа тултырҙылар. Уны яғып, картуф бешерергә ине уйҙары. Шырпы юҡлығы ғына туҡтатты.

— Арсен, һин аяҡ кейемдәрен йыу, ә мин ағайҙар килеүгә йомортҡа жарит итәм, — тине Артур, Ғәләүи ағайҙың туфлиһы өҫтөндәге саңды күрһәтеп. Үҙе тауыҡ ояһына инеп юғалды.

Нәркәз ингәндә солан тупһаһында умывальник аҫтындағы тас һыуына "йыуылған" аяҡ кейемдәре ултыра. Арсен үҙе төпкө өйҙәге түңәрәк мейес эсенән сығып килә ине:

— Нәркәз апай, был кер йыуыу машинаһымы?

—Түгел. Бар сығып, өҫтөңдә ҡаҡ, көлгә буялып бөткәнһең!

Артур йомортҡаларҙы әсәһе кеүек бысаҡ менән яра ла табаға ағыҙа. Нәркәзгә боролоп ҡараған арала бармағын да сабып өлгәрҙе. Аҡ йомортҡа өҫтөндәге ҡыҙыл ҡан бөртөктәрен күрмәһә, иларға ла уйы юҡ ине. Ярай, баҫып ултырған сыбар тауыҡ аҫтынан алынған йомортҡалар себешкә әйләнеп өлгөрмәгәндәр ине әле.



Ғәләүи ағай ҡайтып төшөү менән донъяһын әйләнеп сыҡты. Маңҡаға буялып, теҙелеп ултырған аяҡ кейемдәренә ҡарап:

— Хәтһеҙ эш эшләп ташлағандар икән был егеттәр! — тип көлдө.

— Атай-әсәйегеҙ сәләм әйтте. Һағынғандар, — тине Нәзифә еңгәй малайҙарға. — Иртәгә килеп алабыҙ тинеләр.

— Ура-а-а-а! — Малайҙар кәртә-кура тирәһендә йәшенмәк уйнарға китте.

Нәзифә еңгәй тыуған көнөнә алған зәңгәр ҡулдәген кейҙе лә, шифоньер эсендәге көҙгөгә ҡарамаҡ булып, ишеген тартты. Ул асылманы. — Аһ-аһ, Ғәләүи, ниңә шифоньерҙы бикләнең? Асҡысын килтер әле... Уныһы тартты ла:

— Бында асҡыс түгел, сөйһурғыс кәрәк, — тип тышҡа сығып китте... Кухнялағы тумбочка, мейес артындағы бәрәс ояһының ишектәрен һәм урындыҡ таҡталарын да сөйләгән ине малайҙар.

Нәзифә еңгәй Нәркәзгә:

— Ҡаҙан аҫтына ут яғып, айыу итен бешерә ҡуй әле. Көтөүҙән һуң атай-әсәйең менән бергә беҙгә инерһегеҙ. Үҙең миңә әҙерләшерһең. Мин һыйыр һауайым, тип, башына яңы алған ҡыҙыл яулығын бәйләне.

Малайҙар Ғәләүи ағай менән көтөү ҡаршыланы.

— Мартаның ҡойроғон һындырһаҡ, айыу төнөн ҡураға килерме? — тип төбәште Арсен. Артур ҡырҡылған бармағын күтәреп:

— Айыу ҙа, акула кеүек, ҡан еҫен һиҙәлер ул. Юғиһә, ни өсөн күпме һыйыр араһынан ҡойроғо өҙөлгән Тукалды тукмаған? — тине.

Арсен еңгәһе янына китте. Нәзифә еңгәй бер ҡулына малайҙы етәкләп, икенсеһенә биҙрәһен алып, һөтләк яғына атланы.

— Ғәләүи, урындыҡ аҫтындағы дүрт банканы алып кил әле. Һөт тултырып, һыуытҡысҡа ҡуйыйыҡ. Иртәгә малайҙар алып ҡайтырҙар, — тип һөтләк тупһаһына баҫыуы булды, туп кеүек үҙе бер яҡҡа, биҙрәһе икенсе яҡҡа тәгәрәп тә китте. Яңы ҡыҙыл яулығы һөт өҫтөндә, байраҡ кеүек, өсөнсө яҡҡа аҡты. Был күренештең режиссеры Арсен бая үҙе бысып өҙә алмаған таҡта осонда тороп ҡалды...

— Нисек инеп-сығып йөрөгән Нәркәз апай ҡоламаны икән? — тип уйланы ул. Уның еңгәһенә ҡарағанда өс мәртәбә еңел булыуын иҫәпләргә башы етмәй ине малайҙың.

Был вакытта урындык аҫтында банкаларҙы тапмай килгән Ғәләүи ағай Нәзифә еңгәйҙе күтәреп торғоҙҙо.

— Еңгәй, кайғырма, беҙ хәҙер банкаларҙы табабыҙ, — тип Артур Ғәләүи ағаһын тиҙәклеккә алып китте. Унда дүрт банка күмелгән. Икәүһенең үңәсендә Ғәләүиҙең тыш бейәләйҙәре, ә калған икәүһенә еңгәйҙең һарык йөнөнән бәйләгән ак бейәләйҙәре кейҙерелгән ине.

— Ярай, ултырһындар. Хәҙергә банкаларҙың көрәге бөттө, һөт түгелде, — тине Ғәләүи ағаһы, Артурҙың аркаһынан һөйөп.

Еңгәй зәңгәр күлдәген кейеп, иҫке булһа ла һары яулығын кыя тартып, хушбый һөрткәнсе, Ғәләүи ағай менән Нәркәз апай табын әҙерләне. Һимеҙ, майлы айыу ите йөҙҙө казанда. Һөтлөктә үҙенсәлекле ер еҫе аңкып торҙо.

Шул аралы урамда шау-шыу купты. "Жигули" кыскыртып ебәрҙе, капка шығырҙаны. Йүгереп сыкһалар, малайҙарҙың атаһы, әсәһе, Такыя апай менән Ринат һәм Өмөкамал өләсәй баҫып тормаһындармы?!

Тост күтәреп, Нәзифә еңгәйгә бүләктәр тапшырҙылар. Малайҙар лимонад эсеп, бер-береһенә шым ғына карашты ла"хәҙер инәбеҙ" тип сығып китте. Күп тә үтмәй өсәүһе өс шәлкем сәскә тотоп еңгәләрен тәбрикләне. Тик Артур гөлләмәгә помидор, Арсен өгөрсө, Ринат ап-ак картуф сәскәләренән йыйғандар ине. Малайҙар ҙа бүләкһеҙ тороп калманы: өсәүһе лә Нәркәз апай кулынан матур ғына көсөктәр алды. Бер касан да һүҙһеҙ калмаған Арсен өлкәндәргә сираттағы һорауын бирҙе: "Ә өс эт бер айыуҙы еңә аламы?".



# Албаҫты каны

Мулла кыҙы әсәйем өйрәтеүенсә, гонаһлы булмайым тип, суска фермаһы, йә мәрйә кыҙҙары янынан үткән сакта һәр вакыт: "Бисмиллаһир рахманир рәхим", — тип йөрөй инем. Көндәрҙән-бер көндө әллә Хоҙай мине яңылыш аңланы, әллә еңпәрейҙәр бутаны, бер суска караусы Даша исемле сибәр генә кыҙға ғашик булдым да куйҙым. Сибәр тигәс тә инде, сибәр генә лә түгел, күҙ яуын алырлык, хәҙерге ярыштарҙа катнашкан һылыуҙарың ары торһон!

Ошо кайтканда әсәйемә: "Дашка исемле килен килтерәм әле һиңә", — тигәйнем, "Әстәғәфирулла, ташка өйләнмәһән, кыҙҙар бөткәнме һиңә", — тигәс, эс бошоңкорап тора әле...

— Бөгөн Дашканың атаһы менән әсәһе өс көнгә калаға, кунакка киттеләр, — тигән һүҙҙәрҙе ишетеп әйләнһәм, Тимерйән дуҫ тора икән. Ул минең Дашкаға ғашиклығымды белә. Кис икәүләп өйҙәренә барырға һүҙ куйыштык. Сөнки Дашканың әхирәте Люба ла уларҙа булырға тейеш.

Дашканың атаһы Кирилл бабай (уны шорник Кирюха тип йөрөтәләр) ат һарайында йүгәндәр, эйәрҙәр, ғөмүмән, ат егеү корамалдары эшләп, дегеткә майлау, йомшартыу, төҙәтеү менән шөғөлләнә.

Атайым менән Фирғәнәгә кунакка барғанда һатып алған ак салбар менән ак күлдәгемде кейеп бөткәндә ауыл тәҙрәләрендә һукыр шәм уттары күренә башлағайны.

Йылға күперенән һуң ярты сакрым араны Тимерйән менән һөйләшә-һөйләшә үткәнебеҙҙе һиҙмәй ҙә калғанбыҙ. Суска фермаһын үтеп, Дашкалар өйөнә лә килеп еттек.

— Фу! — тине Тимерйән. — Ошо суска еҫен яратмайым.

Ә минең өсөн ул еҫ хушбый төҫлө икәнен белгертмәҫ өсөн дуҫымдың ризаһыҙлығын яуапһыҙ калдырҙым.

Дашканың өйө дүрт мөйөшлө. Соланы талдан үрелгән ситән, һыйыр тиҙәге менән һылап куйылған, түбәһе һалам менән ябылған.

Солан ишеген тартып караныҡ. Эстән бикле. Шакылдаттык, берәү ҙә тауыш бирмәне. Тимерйән тәҙрә яғына барып караны ла кире килеп: "Әйҙә, солан башынан төшәйек", — тип которттo. Бер минут үтеүгә мин ап-ак кейем менән солан башындағы һаламды актара инем инде. Эскә төшөп, соланды асырға ниәт...

Солан түбәһе урҙаһында әҙерәк кенә асылып торҙом да, берәй нәмәгә ҡаҙала төшмәйем тип, иплән кенә ҡулдарҙы ысҡындырҙым. Төҙ генә аяҡҡа төштөм дә төшөүен... тик тәнем нисектер эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Тиҙ-тиҙ генә был урындан китәйем әле, тип, аяҡты ҡалҡытһам, нәмәгәләр тәртәләп салкатан колап та киттем. Кемдеңдер һыуыҡ ҡулдары эсемдән үтеп, үңәскә килеп етте. Башымды күтәрәйем тиһәм, көсһөҙ генә һыуыҡ ҡулдар сәсемдән тарта. Йөҙтүбән әйләнгән саҡта тиҙ-тиҙ тороп, Тимерйәнде индереү ниәте менән эстән соланды астым. Дуҫымдың күҙҙәре һауала йөҙгән тулы айҙай булды ла ҡуйҙы. Ул имәнес тауыш сығарҙы ла, ситәнде һикереп төшөп, картуфлыҡ аша әллә ҡайҙа һыпыртты. Тимерйән ҡаскас, аптырап үҙ өҫтөмә иғтибар иттем һәм шорник Кирюханың дегет тултырылған ҙур ағас мискәһенә төшөп, уның менән бергә колап, соланда тәгәрәп йөрөгәнемде аңланым. Күҙ-маңлайымдан башҡа бөтә ерем дә дегет! Әле генә ап-аҡ булып төшөп киткән кеше ҡап-ҡара булып килеп сыҡһын әле! Етмәһә, эйәк, колак һәм ҡулдарҙан һыҙылып ҡара тамсылар аға! Тимерйәндең нисек йөрәге шартламаған?!.

Ситәндәрҙе дегеткә буяй-буяй аша төшөп, Тимерйән артынан йылға яғына тайҙым. Картуфлыҡты үткәс, эҙ юғалтыу ниәте менән саңлы, ҡара юлға төштөм. Алда ҡыҙҙар тауышы ишетелде. Ошо ваҡытта һауынсылар ҡайта. Мөгәзәй артына йәшенәйем, тип, уның кәртәһе өҫтөнә менеп баҫтым. Ырғырға ғына йыйынғанда мотоцикл фараһына эләктем. Яктыла мотоцикл алдынан килгән һауынсы ҡыҙҙарҙы, егеүле атты абайлап өлгөрҙөм. Улар ҡысҡырышып мөгәзәйҙән ситкә ташланды. Ат өркөп китте. Һикереп төшөү менән ҡулдарым йомшаҡ, йылы ғына урынға барып тәртәлдө, аяҡтарымды кемдәрҙер күтәреп ебәрҙе. Мин колап киттем. Ниндәйҙер йән эйәләре дарһылдап ян-яҡҡа ырғыны.

Мөгәзәй тигәнем һоло келәте ул. Тирә-яғы кәртәләп алынған. Мөгәзәйҙең тишек-тошоғонан аҡҡан һолоно ашап туйып, йоҡлап ятҡан кәзәләрҙең өҫтөнә төшөп кузғыртканмын икән.

Мотоцикл тағы мөгәзәйҙе яктыртып ураны. Кәртә буйлап үҫкән оҙон кесерткән араһына йәшендем. Фар яктыһына мөгәзәйҙән тирә-яҡҡа эреле-ваҡлы кәзә-һарыҡтар баҡырышып саба ине. Мотоцикл кире яҡҡа, күпер аша сығып юғалды. Мин дә аҙыраҡ тынысланып, мөгәзәй стенаһына аяҡ-ҡулдарымды һөрткөләп алдым. Шунан тағы саңлы юлға сығып, йылға яғына ашыҡтым. Ләкин матай тағы әйләнеп килә башланы. Яктыһында



бер-ике һыбайлы, өс-дүрт йәйәүле кешеләр күренде. Ҡырҡа унға боролоп, күперҙән өҫтәрәк яткан Ташъярға йүгерҙем. Унда һыу тәрәнерәк. Аша йөҙөп сыкһам, туп-тура гармунсы Әнүәрҙең картуф баҡсаһына сығырға тейешмен.

Фар менән тирә-йүнде яктырта-яктырта барған мотоцикл артынан һыбайлылар һәм ирҙәр йүгереп үтте.

— Мөгәзәйҙе ҡамайыҡ. Мотоцикл менән һин түбәгә менеп, эргәһен яктыртып тор. Беҙ уны уратып алырбыҙ. Егеттәр, ситәндән булһа ла таяҡтар һындырып алығыҙ. Көслөләр ул. Буйы өс-дүрт метрҙай бар, тейҙәр бит. Ҡап-ҡара, маңлайында ҙур бер күҙен дә күргәндәр, — тип ҡысҡыра ине һыбайлыларҙың береһе. Тауышына ҡарағанда бригадир Мөхәмәт ағай булһа кәрәк. Уратып алһалар ҙа, береһе лә мөгәзәйгә яҡынламаны, кәртә аша ла инергә ҡурҡтылар...

Йылғала аяҡ-ҡулдарҙы, битте йыуып ҡараным. Бигерәк тә сәс ууҡмашҡан. Таш менән кейемдәрҙе, аяҡ-ҡулды ҡырҙым. Файҙаһы теймәне. Ахырҙа, кейемдәрҙе сисеп йылғаға ырғыттым да һыуға һикерҙем. Ҡолаҡ һыу өҫтөнә калкҡан һайын мөгәзәй янындағы шау-шыуҙы эләктереп ала ине...

Картуфлыктан боҫоп, Әнүәрҙең ҡапҡаһына барып индем. Мунса мөйөшөнә йәшенеп кенә ишектәрен күҙәтә башланым.

Ҡапыл артымда ғына ишек асылып ябылды, кемдер тәмәке токандырҙы. Шырпы яктыһында мунса алдында торған хужаны танып ҡалдым.

— Әнүәр, һинме был?!

— Әйе, мин, — тине ул. Артҡа сигенеп таяҡ тотоп алды.

— Һин кем, тиҙерәк әйт! Әйтмәһәң, тондорам...

— Әнүәр, тыныслан. Был мин, Ғәйзулла! Яланғасмын, ҡурҡма.

— Ә-ә-ә, нишләп йөрөйһөң? Нимә булды һиңә? — ул таяғын ташланы.

— Әйҙә, мунсаңа керәйек. Һөйләрмен. Шәмең, һыуың бармы?

Бәхеткә күрә, уның мунсаһы яғылған икән. Үҙе ситке бүлмәһендә кәзә һуйып бөтөп кенә торған.

Мин һөйләйем, Әнүәр эҫе һыу менән тәнемде ышҡый. Эҫегә дегет йомшара икән. Төн уртаһы үтеүгә көскә кеше рәтенә индем. Сәсле урындар ғына таҙарманы. Ҡырыуы ла бик ауыр, төбө һыбашып тик тора. Шулай ҙа бәке сығарып, ҡаштан башҡа бөтә йөндәрҙе сыйылдай-сыйылдай ҡырҙыртырға тура килде.

Сәсте Әнүәр эләүкәлә яткан сепрәккә йыйҙы. Унда кәзә тояктары ла ята ине. Башым ала һыйыр тиреһенә оҡшап ҡалды.

— Ничего, борон күп егеттәр шулай ала-сола таҙ булған. Берәй аҙнанан тигеҙләнергә тейеш, — тип Әнүәр минә иҫке тәрән фуражкаһын кейҙереп ҡуйҙы. Үҙе төргәкте тиҙ генә йылғаға ырғытып килде. Кәртә башында йоҡларға яттым. Әнүәр иртә тороп конторағаа йөрөп килгәндә, мине нисек уятырға белмәй ултыра, имеш. Күҙемде асыу менән ул ҡарһаланып һөйләй ҙә башланы.

— Ауыл гөж килә. Күрше ауылдарға ат саптырып, балаларҙы уҡырға ебәрмәҫкә бойорғандар. Мәктәп ябык. Мөгәзәйгә берәүҙе лә ебәрмәйҙәр. Уның стенаһынан албаҫтының ҡара ҡанын йыйып, районға экспертизаға ебәргәндәр. Һөйләүҙәренсә, ул мөгәзәй бейеклегендә икән. Ҡап-ҡара, ҡулдары ергә етеп тора, ти, хатта койроғон да күреүселәр булған икән. Берәүҙәр маңлайында ялтыр күҙ, икенселәр ауыҙ тип раҫлай. Берәүҙәр мөгәзәйҙең аҫтына инде, икенселәр осоп китте, тиҙәр. Балаларҙы өйҙән сығармаҫҡа тиһәләр ҙә, Милләт менән Риф ҡасып, Ташъярҙа һыу инеп, албаҫты ҡанына буялып ҡайтҡандар икән. Уларҙы медпунктта спирт менән эшкәртеп, повязка һалып, район дауаханаһына оҙатҡандар. Күп малайҙар хәҙер дәрескә бармаҫ өсөн, өйҙән ҡасып, албаҫты ҡанын эҙләйҙәр, ти. Әле күпселек халыҡ Ташъярҙа. Әйҙә, беҙ ҙә шунда барайыҡ! — тине Әнүәр һөйләп бөткәс.

Күперҙә халыҡ күп. Бригадир Мөхәмәт ағай сүкәйә-сүкәйә һыу буйын ҡарай.

— Ана, шул ерҙән һикерҙе. Әҙерәк уңғараҡ ҡара. Ташта эҙе барҙыр әле!

Бригадирға төнгә ферма ҡарауылсыһы ҡысҡыра икән. Ул албаҫтының һыуға һикергәнен ишеткән.

— Улар әбейе менән икәү инеләр. Һыуға бер-бер артлы һикерҙеләр ҙә ҡосаҡлашып йөҙөп киттеләр. Ай болот артынан сыҡкан сакта шәйләп ҡалдым. Береһе ҡара, икенсеһе һары, буғай. Тәүҙә кейемемде ташлап, унан һуң үҙем һикергәйнем бит.

— Һуҡыр күпте күрә, — тип һөйләнде бабайҙар яр буйында. Ҡарауылсының бер күҙе булмаған икән.

Кемдер Ташъярҙың һыуын һөҙөп ҡарарға тәҡдим индерҙе.

— Әгәр ул һыуҙа йәшәһә, ошо тәрәндә, йә күпер аҫтында инде!

— Кем төшә һуң һыуға? Һин төшәһеңме һөҙөргә? — тип бригадир теге тауыш яғына барҙы.



— Юу-у-ук! Мин нисек төшәйем. Йәштәр бар ҙаһа! — тип артын ҡуйҙы мыкты кәүҙәле Илдар ағай.

— Балыҡсыларҙың йылымын ташлап, ат менән тарттырайыҡ.

— Ташка эләктереп йыртыуҙан башҡа файҙаһы булмаясаҡ.

— Ҡаланан водолаз саҡырырға кәрәк. Төбөн тикшереп сыкһындар.

— Уларға кем акса түләр икән?!

Шау-шыу араһында һыбайлы килеп туктағанын да аңғармай торабыҙ.

— Мөхәмәт ҡоҙа! Мә, ошо әйберҙе ҡара әле!

Һыу түбәнендәге ауылда йәшәгән пенсионер Хәйбулла ағай икән. Ул бригадиргә кәпәс зурлығындағы төйөнсөк бирҙе. Мөхәмәт төргәкте актарыу менән, тертләп, ергә ташлап ебәрҙе. Уның эсенән ҡара ҡанға буялған йөндәр һәм кәзә тояктары килеп сыкты.

— Был кәзә тояктары лаһа, йөндәре лә бар. Ҡара ҡанға буялып бөткәндәр.

— Кәзәне тиреһе-ние менән ашаған да ҡуйған. Башы юҡмы? Башын да йотҡан инде!

— Йөнөн йолкоп, тарбайып торған тояктарын һындырған да йотҡан!

— Тояктары ауыҙына һыймағандыр инде!..

Хәйбулла ағай быларҙы мурҙаһына эләгеп торған ерҙә тоткан икән. "Төргәк һыуҙа булғас, үҙе лә һыуҙа булырға тейеш" тип һығымта яһанылар.

— Йәмәғәт! Кисә бөтәгеҙҙен дә кәзәләрегеҙ ҡайттымы? — тип кыскырҙы бригадир.

— Кәзәләр ҡайтмай. Мөгәзәйҙә төн үткәрәләр.

— Минең Тарбаҡ мөгөҙөм ҡайтманы. Иртән көтөүҙе лә ҡараным. Юк, — тине мөгәзәй янында йәшәгән Фәрүхә әбей. — Уның мөгөҙө аҡка буялған. Мин уны көндә ашатып һауам. Ҡайта торғайны.

— Әйҙә, һыбай ғына көтөүҙе карап килэйек, — тине бригадир ветврач Кузьмаға.

Сандауҙа яткан малдар араһында ҡара ҡанға буялған өс кәзә таптылар. Ә Тарбаҡ мөгөҙ күренмәне.

Улар икәүләп хәлде көтөүсегә һөйләне. Уныһы бер нәмә лә белмәгән булып сыкты.

— Мин дә һеҙҙең менән ҡайтам, — тип сәбәләнә башланы. — Бында киләсәк бит ул кәзәләренә. Яңғыҙым албаҫтыға нисек ҡаршы торайым? Үҙемде лә йолкколап китер...

Халыҡ иртә булһа ла көтөүҙе ҡаршылап, мал-тыуарын биклəп тә бөттө. Хатта мөгәзәй янында бер кәзә лә күренмәне.

Төнгә һыйыр фермаһына өс, сусҡа фермаһына ике мылтыҡлы һаҡсы ҡуйҙылар. Һауынсы һәм сусҡа ҡараусыларҙы иртәрәк аттарға тейәп алып ҡайттылар. Ауыл халҡы өйҙәренә балта, һәнәк индереп, күбеһе төнө буйы керпек тә ҡаҡмай сыҡты. Иртәгәһенә мәктәпкә өлкән класс уҡыусыларына ғына килергә рөхсәт булды. Мәктәп военругына куш көбәкле мылтыҡ бирҙеләр. Барыбер күптәр килмәне. Килгәндәре лә аяҡ-ҡулдарын ҡараға буяп килгәндәр ине. Уларға медпунктҡа барырға ҡуштылар. Дашаның ҡустыһы Сергей көнләшеп ҡарап ҡалды. Шорник улы еҫенән үк был "ҡара ҡандың" дегет икәнен аңланы. Малайҙарҙың күбеһе дегеткә үҙ арбалары күсәренән буялып килгәйне, ә Сергейҙың дуҫы Ирек кисә унан бер ҡалаҡ дегет һорап алғайны. Нисек малай уның нимәгә кәрәклеген аңламаған?!

— Нишләп, Сергей, бөгөн кәйефең юҡ әле? — тип һораны уҡытыусы Валя апай. Малай бөтәһен дә һөйләп бирҙе. Валя директорға инде. Директор албаҫты ҡанының ҡәҙимге дегет булыуы, төндә кемдер шорниктың дегет мискәһенә ҡолауы тураһында хат яҙып, 10-сы класс уҡыусыһы Дамирҙы Мөхәмәт ағайға ебәрҙе. Бригадир районға киткән ине. Дамир хатты кесәһенә һалды ла башҡа дәрескә барманы.

Был көндө күп кеше көтөүгә малын ебәрмәне. Көтөүсе лә күренмәй ине. Кәзәләрҙе бөтөнләй сығарманылар. Теге өс кәзәне хужалары салып соҡорға ташлаған икән.

Тимерйән теге кистән алып күренмәне.

— Әйҙә, барып сығайыҡ әле, — тип өгөтләнем Әнүәрҙе. Өйөнә ингәндә, әсәһе Тимерйәндең маңлайына яулыҡ һыулап ябып тора ине.

Минең тауышты ишетеү менән Тимерйән ырғып торҙо ла күҙҙәре аларып кире ятты. Шунда уҡ яҡын барып ҡулын ҡыҫтым.

— Люба, Даша ҡайҙа? Улар тереме?! — тип һораны ул ҡабаланып.

— Тере, тере. Барыһы ла иҫән-һау, — тинем мин. Артабанғы һүҙҙәренән Тимерйәндең дә әлеге албаҫты ҡаны менән һаташыуын аңланым.



— Соланда дөбөр-шатыр һине дөмбәҫләгәндән һуң, ишекте асып, миңә һикерергә уйлаған ине, ситәндә ырғып сыҡтым да ҡастым. Мин бит ул яуыз һине лә, Люба менән Дашаны ла ашағандыр тип ҡурҡтым.

Бригадир Мөхәмәт ағай районҙан ат менән һуңлап ҡына ҡайтты. Дамирҙағы хатты уҡыны ла:

— Минең ат арыған, Кузьма, — тип, уның атын менеп кире районға сабып сығып китте. Унда ҡуҙғырып ҡалған түрәләрҙе тиҙерәк кире тынысландырырға кәрәк ине. Кузьма Мөхәмәт ағай ҡалдырған хатты уҡыны ла, уның арбаһына ултырып, атын тынын ҡына атлатып, шорник Кирюхалар яғына йүнәлде...

* * *

Ҡыҫҡа табан Ташъяр янындағы аҡланға йәштәр йыйыла башланы. Әнүәр менән мин дә атландыҡ. Дуҫым күпер яғына һөйәлеп, гармунын һыҙҙырып ебәрҙе. Был ике ярҙағы ауыл йәштәренә, һыйыр һәм сусҡа фермаһындағы ҡыҙҙарға: "Бөгөн уйын була, йыйылығыҙ" тигән саҡырыу ине. Күп тә үтмәй Даша, Люба, ауырынҡырап торһа ла Тимерйән дә килде. Даша минең фуражканы сисеп йылғаға кәйелтте. "Шорник кейәүенә килешә ул", — тип, ул ала башымдан һыйпаны.

... Йәштәр уйыны ҡыҙғандан-ҡыҙҙы. Моғайын, кәзәһен күтәреп, "ҡара ҡанлы албаҫты" ысынлап килеп сыҡһа ла, берәү ҙә аңғармаҫ ине...

# Баҙарға барғанда

Урыҫ мәрйәләре бер ус йәшел һуғанды ауыл халкына тиҫтә йоморткаға, йә йомғаҡ майға алмаштырып йөрөгән заман.

Беҙ дуҫым Үзбәк менән етенсе класты тамамлағас, йәй буйына колхозда ат менеп, ыштан туҙҙырып йөрөнөк тә Магнит ҡалаһына йүнәлдек. Үзбәк бер биҙрә, ә мин фанера сумаҙан менән һатырға тип энәлек күтәреп алғанбыҙ. Бар уйыбыҙ: берәй урынға уҡырға, йә эшләргә инеү.

Ун саҡрымдай йәйәү атлағас, оло юлға етеп, ялға туктанык. Артабан да йәйәү атламаҡсы инек, тик көтмәгәндә цистернаһының ҡабырғаһына биҙрәләр тоткан бер апайҙы һәм ике инәйҙе ултырткан бензин ташыусы машина килеп беҙҙе лә икенсе ҡабырғаһына йәбештереп алып китте. Бик шәп барҙыҡ. Хатта апайҙың үрелгән сәсе, ҡара йылан кеүек, яулығы аҫтынан сығып, елгә ялбырап барҙы.

Баҙарҙа емеш-еләк күп була. Шуға күрә апай һәм инәйҙәргә эйәреп, беҙ ҙә ҡала эсендә бейек йорттар араһында һатырға булдыҡ. Тик милиция килеп сыҡһа, штраф түләтә, йә емеш-еләкте тартып ала. Мин апай һәм инәйҙәр менән бер тирәләрәк, ә Үзбәк урын булмағас, магазинға яҡынырак барып ултырҙы ла биҙрәһенең өҫтөн асып та ебәрҙе. Мин сумаҙанымды аҫкас, апай минең сейә түгел, энәлек икәнде күрҙе лә Үзбәккә: "Һинеке сейәме?" — тип ҡыскырып һораны. Үзбәк: "Минең сейә түгел, энәлек", — тип яуаплаған. Тик уның һүҙен беҙ ишетмәнек. Шул арала инәйҙәр ырғып торҙолар ҙа: "Әйҙәгеҙ, беҙҙән ҡалмағыҙ", — тип, шәп-шәп атлап баҙарға табан китә лә башланылар. Беҙгә лә улар артынан эйәрергә тура килде. Баҡһаң, улар Үзбәктең: "Минең сейә..." — тигән һүҙҙәрен "милиция" тип ишеткәндәр икән. Ҡурҡканға ҡуш күренә.

Цистернаның иң артына йәбешкән Фәниә апай минә таныш. Күрше ауылдан. Беҙҙең атай-әсәйҙәр менән ҡатнашып йәшәнеләр. Ул бик уҫал, хатта мәрйәләргә лә бирешкәндәй түгел. Баҙарға инеп, емештәрҙе күрһәтеүгә: "О-о-о вишня!" — тип йыйылып та киттеләр. "Болғамағыҙ бысраҡ ҡулдарығыҙ менән!" — тип Фәниә апай тегеләрҙе тиргәне.

Инәйҙәр икәүһе лә итака галуш кейгәндәр. Уларҙы йыш ҡына яулыҡ осон төкөрөкләп һөртөп алалар. Бейек итакалыһы бизмән сығарып ит һатты. Тәпәшерәк итака кейгәне яулыҡка төрөлгән ҡара кәзә дебетен сығарҙы.



— Ирешмә, Фәниә. Был мәрйәләр булмаһа, күптән үлеп бөткән булыр инек инде һуғыш йылдарында. Ошо ҡала мәрйәләренең икмәге менән тукландыҡ инде, — тип һөйләнә инәйҙәр.

Бейек итакалы инәй биҙрәгә һалып ярты һарыҡ килтергән. Ите алдан туралған. Ҙур ғына итеп сабылған арт һаны түшәктең ситенәрәк ятты. Сираттағы барлыҡ мәрйәләрҙең дә күҙе шул киҫәккә төштө. Ҙур ҙа, һимеҙ ҙә шул! Тик хаҡы нисектер? Бер татар ҡатыны арттан ғына килеп инәй менән шыбырлашты ла алға сығып сиратка баҫты. Теге киҫәкте эләктерергә һөйләшкән булған икән. Уның алдындағы йыуан ғына мәрйә инәй әйткән хакты өҫтәлгә ташлап ебәрҙе лә теге киҫәкте тиҙ генә һәрмәп сумкаһына һалып ҡуйҙы. Инәй көйөп мәрйәнең сумкаһына барып йәбеште: "Шараш. Какой алама! На денгиң. Дай ботто. Хәҙер получишь быны!.." — тип бизмәненең йоморо башын күтәрҙе. Мәрйә лә көслө булып сыкты. Сумкаға сарт йәбешкән тарамыш беләкле инәйҙе прилавка аша һөйрәп төшөрҙө. Татар ҡатыны ла мәрйәнең сумкаһына барып йәбеште. Хәҙер улар иркенләп баҙар майҙанында тәгәрәп йөрөнө. Был йомғаҡтан йә мәрйә сумкаһы, йә бизмән башы, йә булмаһа татар ҡатынының аяктары һерәйеп сығып торҙо... Тәким итте талап алды инәй! Тиҙ генә татар ҡатынының сумкаһына һалды. Итакаларын йыйып кейҙе лә йыш-йыш тын алып прилавка артына барып ултырҙы. Мәрйә прилавкала яткан аҡсаһын алды ла: "Дура-баба", — тип китеп барҙы. Татар ҡатыны, рәхмәт әйтеп, инәйгә аҡса һондо...

— Кәрәкмәй, мин оялмай үҙ мосолманымдан аҡса алып тормам инде!

Миңә ҙур итакалы инәй тағы ла мыктырак, матурырак күренде. Уның сикәләре алһыуланып китте. Йөҙөндә тамсы ла нәфселек, үкенеү, ҡыҙғаныу билдәләре күренмәй. Киреһенсә, ғорур, үҙ-үҙенән ҡәнәғәт ултырҙы.

— Шараш. Йыуашка һанап баҫып алып баралар! — тине ул, сираттағы барлыҡ мәрйәләрҙе лә ҡыуып ебәреп, — Суҡынып китегеҙ! Минең мяса бөттө! Ашағыҙ ...тип әйтер инем инде, урыҫсаһын белмәйем.

Итте эләктергән татар ҡатыны, халыҡ араһына йәшенеп, инәйҙе күҙәтте. "Әбей айнып, аҡса һорап ҡуймаһын", — тигән уйҙар уның төҫөнә сыҡкан ине!

— Ҡалған итеңде һатып бөт, — тинек беҙ.

— Юк, — тине ул. — Лутсы ҡыҙыма алып барам. Ҡайһылай тыныс булып ҡалды әле. Мәрйәләр сурылдауы аурыткан икән башты!

Тәпәш итаҡалы инәй тыныс ҡына дебетен һатты. Анда-бында ғына: "Болғамағыҙ, ойоштороп бөтәһегеҙ!" — тиғән һүҙҙәре генә ишетелеп торҙо. Уның да бында, ҡалала, улы менән килене йәшәй икән.

— Яҡын ғына. Анау бейек өйҙәң бишенсе ҡатында йәшәйҙәр. Килен өйҙә ултыра. Бәпәйе булырға тейеш. Иртәгә тыуған көнө. Яулыҡ бүләк итәйем тип торам, — тине ул, эргәлә генә матур-матур яулыҡтар һатып торған мәрйәгә күҙ ташлап.

— Ошо мәрйәләрҙән күргән ыҙаны... — тип һөйләнде Фәниә апай. — Шулар арҡаһында ана Иштимерем дә пенсияһыҙ тороп ҡалды...

Беҙ бөтәбеҙ ҙә аптырашып ҡалдыҡ. Беҙҙең һораулы ҡараштарҙы күреп, ул аңлата башланы:

— Ҡайным Таштимер менән ҡәйнәм Азия йәш саҡтарында уҡ Таштимерҙе ҡалдырып Магнит ҡалаһына эшкә килгәндәр. Ҡайным заводта эшләгән, ә ҡәйнәм Иштимеремә ауырлы булып өйҙә ултырған. Иштимер тыуғас, ҡайным метрика алыу иҫәбе менән ЗАГС-ҡа барһа, унда ике мәрйә ултыра икән.

— Как зовут? — тип һорағас, ҡайным:

— Таштимер, — тип исемен әйткән. Уларҙың "Откуда?" — тигән һорауына ҡайным тағы ла:

— Таштимер, — тигән ауылының исемен. Мәрйәләр бер-береһенә ҡарашып алғандар ҙа:

— С какого сельсовета?! — тип һорайҙар икән.

— Таштимер, — тип яуаплаған ҡайным. Мәрйәләр бөтөнләйгә түҙемһеҙләнеп: "Вы поддатый, с похмелья, наверное? Приходите завтра", тигәндәр. Ҡайным: "Минә завтра работать", — тип ныҡышҡас, тағы һорашҡандар.

— Как зовут сына?

— Иштимер.

— Фамилия?

— Биктимиров.

— Отчество?

— Таштимер.

Мәрйәләр тағы бер-береһенә ҡарашып, ?уйымдарен ташлап сығып киткән. Ҡайным Биктимеров Таштимер Миртимер улы, Таштимер сельсоветы, Таштимер ауылында тыуған ине шул.



Ҡайнымдың эсе бошоп сығып барһа, танышы Хәмит тап була. Улар ҡатыны менән билмән эшләргә йыйынғандар ҙа, тукмас таяғы булмай, һатып алып ҡайтып бара икән. Ул эштең нимәлә икәнен аңлап алғас: "Әйҙә әле", — тип тағы инеп китәләр. Ҡайнымдың белеме өс класс, ә Хәмит алтынсыла өс йыл ултырһа ла, ҡайныма ҡарағанда белемлерәк шул. Быларҙы күреп, мәрйәләрҙең күҙҙәре түбәләренә сыға. Етмәһә, Хәмит таяҡ тотоп алған.

— Был иҫеректәр тукмарға ингән, — тип ҡурҡып, исемдәрен белеп ҡалайыҡ әле, исмаһам, тип:

— Как Вас зовут? — тип Хәмиткә ҡарайҙар.

— Хамит.

— С какой деревни? —

— Хамит, — ти ул. Етмәһә, уң ҡулындағы тукмас таяғы менән һул ҡулының усына һуғып тора.

— Мы, извините, не хамим. Мы хотим узнать ваше имя, место рождения, сельсовет, тигән булып ханымдар урындарынан тағы ла ҡуҙғала башлай. Хәмит тағы ла исем-фамилияһын, тыуған ауылын һәм сельсоветын теҙеп әйтеп ҡараһа ла, мәрйәләр сығып, мыҡты ҡына ҡәүҙәле ирҙе эйәртеп инә. Уныһы быларҙы арҡаларынан һөйөп кенә: "Завтра, завтра приходите», — тип оҙатып ҡуйған...

— Әйҙә, кафеға инеп, улымды йыуайыҡ! — тигән ҡайным Хәмиткә. Уларҙың ҡайғы һәм ҡыуаныстары ике шешә бушатыуға ла бөтмәгән. Ҡалғанын Хәмит ҡайнымды оҙатҡанда һөйләшкәндәр. Уларҙың йорто ҡаланың бер осонда, ә Хәмиттеке икенсе осонда ине. Ҡайнымдарға килеп еткәс, ярты сәғәт самаһы подъезда һөйләшкәндәр. Хәҙер инде ҡайным Хәмитте оҙата киткән. Оҙатҡас, ҡайтмаҡ булып трамвайға ултырған. Трамвай ни сәңгелдәк кеүек ҡайнымды бәүетә-бәүетә йоҡлатҡан да ҡуйған. Кондуктор: "Куда Вы едете?" — тип һораған. Ҡайным бер генә күҙен асып: "Азия!" — ти икән, ҡәйнәмдең исемен атап. Трамвай тағы бер мәртәбә әйләнеп килгәс, кондуктор бөтөнләйгә аптыраған: "Молодой человек, куда Вам нужно?" — тигәс, ҡайным тағы: "Азия!" — тигән дә күҙен йомған. Кондуктор эштең ниҙә икәнен һиҙеп: "Азию давно проехали. Теперь Европа!" — тип, ҡайнымды төшөрөп, депоға индереп киткәндәр. Шунда төн уҙғарып, иртән трамвайға ултырып эшкә киткән. Шунан һуң ҡайным урыҫса тиргәшеп өйрәнгәнсе Иштимеремде яҙҙырмай йөрөгән. Өс йыл үткәс кенә яҙҙырған, — тип һүҙен бөтөрҙө Фәниә апай. — Хәҙер ул өс йәшкә йәш йөрөй.

Бейек итакалы инәйҙән башҡа бөтәбеҙ ҙә һатыр әйберҙәребеҙҙе һатып бөттөк.

Урыҫ теленә килгәндә, беҙҙең Үзбәк менән дә белемдәр ана тора инде! Йәй көндәрендә беҙҙең ауыл эргәһендә лагерҙа ял итеп ятҡан ҡала балаларын иҫәпләмәгәндә, беҙҙең әле йүнләп ысын урыҫты күргәнебеҙ ҙә юҡ ине. Шул урыҫ балаларынан төшөп ҡалған уйынсыҡтар менән уйнап, кәнфит ҡағыҙҙарын ялаштырып йөрөнөк. Апайҙары тиргәһә лә, ҡыуһа ла, һағыҙаҡ кеүек, арттарынан ҡалманыҡ...

— Әйҙәгеҙ, анау магазинға инеп, киленемә яулыҡ алайыҡ, — тине тәпәш итакалы инәй. "Әйҙәгеҙ", — тип бейек итакалы инәй магазинға алдан инеп тә китте. Ул төптә, көҙгө стенала үҙен күрҙе лә: "Шараш, Хәспиямал! Һин дә бында икәнһең? Ҡасан килдең?" — тип төкөлгәнсе барҙы, унан: "Аһ, аһ, әллә үҙем инде?!" — тип аптырап кире беҙҙең янға килде. "Үҙен бер ваҡытта ла көҙгөлә лә күргәне юҡтыр, ахырыһы" тип уйлап ҡуйҙым мин. Хәспиямал ғүмер буйы бергә сәй эсеп йөрөгән ауылдағы күршеһе, әхирәте ине.

Тәпәш итакалы инәй магазинда оҡшаған яулыҡ тапмай кире сыҡтыҡ. Ул яулығы осона төкөрөп, итакаларын ялтырата һөртөп ҡуйҙы ла бейек итакалы инәйҙең аяғына ҡараны. Аҡыллыға ишара тигәндәй, ул да итакаларын ялтыратты.

Кире баҙарға киттек. Теге мәрйәнең бер яулығын ҡулына алды ла инәй:

— Скоко? — тип һораны.

— Два рубля.

— Красивый яулыҡ. Два рубля ғына!

— Да, да. Два рубля, — тип мәрйә ике бармағын күрһәтте.

— Нельзя так. Красивый яулыҡ!

— Ну, раз нельзя, не бери.

— Бери, бери. Алам. Түлкә три рубля. Атыу сноха әйтер, два рубля купил тип! — тине ул өс һум һоноп. Мәрйә бер һум ҡайтарып бирһә лә, алмай ҡасты ла китте.

— Вот , дура-баба! — тип тороп ҡалды мәрйә.

— Әйҙәгеҙ, бөтәбеҙ ҙә киленгә инеп яулығын бүләк итеп сығайыҡ та, бергә-бергә ҡайтып китербеҙ, — тине ул.

Яңы ғына төҙөлгән йорт, хатта лифты ла бар ине. Беҙ Үзбәк менән талап тигәндәй инәйҙәрҙең ҡулынан биҙрә, төргәктәрен күтәреп алдыҡ. Төрткөләп лифтҡа индерҙек тә бишенсе кнопкаға баҫтыҡ.



— Аһ-аһ, шараш! Әллә самолетмы?! — тип әбейҙәр аптырағансы киленебә барып та индек. Килене ҡәйнәһен ҡосаҡлап күрешә лә аяҡтарына иғтибар итеп:

— Ҡайҙа һеҙҙең галоштарығыҙ? — тип һораны.

— Соланда сисеп индек, — тине инәйҙәр кемуҙарҙан, бер нәмә лә булмағандай. Килен ишектә асып ҡараны ла: "Юҡ", — тип аяғына кейеп сығып китте. Бер аҙҙан итакалар тотоп инде лә: "Беренсе ҡаттың подъезында, лифт ишеге алдында сискәндәр", — тип көләмһерәп иҙәнгә ҡуйҙы.

Килен самауыр ҡуйғансы инәйҙәр балконға сыҡты.

— Уландар, килегеҙ әле! Анау аҫта, кәртәлә йөрөгәндәр өйрәкме, ҡаҙ себештәреме әллә? — тип һораны бейек итакалы инәй.

— Ай-һай! Килен ҡаҙ себештәре алғандыр ул. Улым ҡаҙ ите ярата минең, — тип аҫҡа ҡараны тәпәш итакалы инәй.

— Инәй, улар себеш түгел, кешеләр ҙәһә! Урамда йөрөйҙәр. Аһ-аһ, шараш! Күҙеңәссайым!

— Әйҙәгеҙ, сәйгә рәхим итегеҙ, — тине килен кеше балкон ишегенән...

Беҙ Үзбәк менән асыҡһаҡ та рәхмәттәр әйтеп сығып киттек. Фәниә апай өйрәтеүенсә бер училищеға барып керҙек. Бүлмәлә һары сәсле бер мәрйә ултыра, ауыҙы, энәлек ашаған әллә, ҡып-ҡыҙыл...

— Зачем пришли? — тигән һорауға мин:

— Учиться, — тип әйтәйем генә тигәндә Үзбәк дуҫым:

— Читать, — тип ҡысҡырып та ебәрҙе.

— Дайте документы, — тигәс, беҙ:

— Дом, — тинек. Ысынлап та, документтар тураһында уйламаған да, алмаған да инек. Мәрйә алдына ҡағыҙ менән ҡәләм һалып:

— Пиши слово "параллель", — тине. Яйлап, купшылап ҡына "параллель" тип яҙып бирҙем. Мәрйә ҡағыҙҙы алды ла Үзбәккә мөрәжәғәт итте...

Ул миңә ҡарағанда мыҡтыраҡ та, олпат та. Салбары ла ҡап-ҡара, хатта кеҫәләре лә бар. Минең ыштандың кеҫәләре булмаһа ла салбар тип атап йөрөлдө инде. Беҙ ғаиләлә биш малай, дүрт ҡыҙ үҫтек. Барыбыҙға ла әсәй ыштанды кеҫәләп текһә, күпме туҡыма һәм ваҡыт кәрәк?!

Үзбәктең сәсе лә Сталиндыҡы кеүек матур, артҡа таралған. Тараҡ та юҡ саҡ. Шул биш бармаҡ менән инде. Тик Үзбәктең бер

етешһеҙлеге булды: һөйләгәндә һәр бер һүҙҙең аҙаҡты ижеген әйтеп бөтөрмәй йота торғайны.

— Учились по-русски? — тигән һорауға Үзбәк:

— Башҡорт, — тине лә ҡуйҙы. Мәрйә:

— Назовите фамилию? — тип ҡулына ручкаһын алды.

— Төркмәнов Үзбәк, — тигәс, теге мәрйә:

Назовите фамилию, а не национальность! — тип түҙемһеҙләнә башланы. Үзбәк шул арала: “Казак... баевич”, — тип “баевич”ен йотоп, атаһының да исемен әйтеп һалды. Уның тулы исем-шәрифеТөркмәнов Үзбәк Ҡаҙаҡбаевич ине. Мәрйә тағы ла: “Не национальность, а фамилию, имя, отчество надо говорить”,— тигәйне, Үзбәк дуҫым әллә атаһына, әллә мәрйәгә үсегеп, мөйөштә торған ултырғыска барып ултырҙы ла башҡа торманы ла, өндәшмәне лә. Мәрйә уның алдына үк барып “искусство” тигән һүҙҙе яҙҙырып ҡараны. Дөрөҫ яҙғандырмы-юҡмы, белмәйем. Тик ул мине ҡалала уҡымайыҡ та, эшләмәйек тә тип өгөтләп алып ҡайтып китте...

Ҡайтыуҙа тағы ла апай, инәйҙәр менән осрашып, бергәләшеп йәйәүләп ҡайттыҡ. Беҙ Үзбәк менән инәйҙәрҙең йәшел һуған күренеп торған бизрәһен һәм төргәктәрен күтәреп алдыҡ.



# Алма баҡсаһында

Көн үҙәге. Ауылдарҙа тынлыҡ. Эшкә һәләтле бар халыҡ бесәндә. Эңер төшөп, һәнәк башы күренмәй башлаһа, атҡа төнөн ашарға бесән сабып тейәйбеҙ ҙә ауылға ҡайтабыҙ. Ярты сәғәт һалҡын, хуш еҫле бесән өҫтөндә ултырып барһаң, арыу-талыу бөтөп, яңы ғына донъяға килгән сабый һымаҡ булаһың да ҡуяһың!

— Кәбәнде ямғырҙан алда ҡойоп өлгөрҙөк! — тип шатланышып, бажаның өйөнә йыйылдыҡ. Сөнки төш ваҡытында ҡара болот йәшенләп, әҙерәк ысыҡлап ҡурҡытып алды.

Беҙ, совхоз үҙәгендә йәшәгәс, бесән әҙерләмәйбеҙ. Йылдағы кеүек, быйыл да бажаларға ярҙамлашабыҙ. Бажа — мәктәп директоры, ҡайынбикә — өй хужабикәһе. Ғәҙәттә, хужа ҡатындары түп-түмалаҡ була. Был юлы ла тәбиғәт ҡағиҙәһе боҙолмаған.

Быйылғы йәш картуф бешеп тә өлгөрмәне, утлыҡ ишеге асылып, ферма мөдире Нуриман ҡатыны Сәйҙә менән күренде.

Бәрәңге янына ҡайынбикә беҙ күстәнәскә килтергән алманы ла ҡуйҙы:

— Ашағыҙ, кейәүҙәрҙен күстәнәсе, — тине ул.

— Әйтәм, күрше-тирәгә алма еҫе таралған, — тип, Нуриман өҫтәлдән бер ҡыҙылғынаһын эләктереп, Сәйҙәһе янына барып ултырҙы.

Беҙ өс ғаилә күптән катнашып, байрамдарыбыҙҙы уртаклашып, дуҫлашып бөткәнбеҙ. Хәҙер ҙә алма серҙәрс менән уртаклашырға тура килде. Беҙ уны бажаларға шәкәр тоғона тултырып килтергәйнек. Ауыл ерендә бер ҡапсыҡ эре, йомшаҡ, ҡып-ҡыҙыл алманың килеп сығыуы үҙе йомаҡ ине.

— Бер-ике килограмм булһа, һатып алғандар тип уйлар инек. Ә был бер тоҡ! Йә бушлай, йә ниндәйҙер хикмәт менән… — тип фаразланы Сәйҙә.

— Ауыҙҙың һыуын ҡойма, йә әйт, — тине Нуриман, ҡулындағы алмаһын ашап бөтөп.

— Ҡала урыҫтары килеп, яңы бәрәңгегә алмаштырып йөрөйҙәр ҙә баһа, — тип шаярттым. — Ике бизрә яңы бәрәңгегә дүрт бизрә алма алырға була.

— Бартер беҙгә лә килеп етте. Күп әйберҙе алыштырып алырға була хәҙер, — тип өҫтәне бажа. Шул арала Нуриман Сәйҙәнән “бөгөн үк дүрт бизрә бәрәңге ҡаҙып ҡуйырға” тигән әмер алып өлгөрҙө.

Ғүмер буйы бергә көн иткән дуҫын йәлләпме, әллә тағы берәй тоҡка өмөтләнепме, бажа алма серен асып та ҡуйҙы. Ә бажаға мин кәбән ҡойғанда нисек күршенең машинаһы менән ҡала баҡсаһына барып, дүрт тоҡ алмалы булыуыбыҙҙы һөйләгәйнем...

— Бажа шаярта, ҡала баҡсаһынан йыйғандар улар. Ингән дә йыйып алғандар.

— Нисек, ҡарауылсыһы ла, ҡәртәһе лә юҡмы ни? — тип ҡыҙыҡһынды Нуриман.

— Һаҡсыһын белмәйем, ә баҡса ҡәртәләнмәгән, — тинем мин. Ысынлап әйткәндә, алма баҡсаһы тураһында беҙҙең бер мәғлүмәтебеҙ ҙә юҡ ине, күрше менән аңғармаҫтан юл ыңғайында ғына барып сыҡҡайныҡ. Алмалары эре, бешкән. Ун биш минутта ғына тултырып алғайныҡ беҙ багажникта йөрөгән дүрт тоҡто!

Иртәгә ямғыр яумаһа, Нуримандың кәбәнен ҡойорға, ә яуһа, бөтәбеҙ ҙә алма баҡсаһына барырға һүҙ ҡуйыштыҡ.

Төнө буйы Сәйдә ямғыр теләне. Нуримандың бесәнле лә, алмалы ла, ямғырлы ла булаһы килде. Тик тәҙрәнән төшкән ҡояш нурҙары ғүмерендә беренсе мәртәбә Сәйдәнең кәйефен боҙҙо. Ул нурҙар алма баҡсаһына түгел, бесәнгә саҡырҙы.

Күк бейә менән күбәләрҙе тарттырып бөтөүгә Ҡырҡты тауы артынан ҡап-ҡара болоттар ҙа күтәрелде. Көн ҡараңғыланған һайын Сәйдәнең йөҙө яҡтыра барҙы. Бажа менән Нуриман ғына кәбәндә ҡояйыҡ тип бер кемгә лә тынғы бирмәне. Ахыр сиктә, Сәйдәне кәбән башына ҡуйып, ташлай башланыҡ бесәнде. Тышалған күк бейә ҡойроғо менән күгәүен ҡыуа-ҡыуа ағас араһында ашаны. Эт арба аҫтын ҡыуыш итте. Ҡайынбикә тағанға элеп аш бешерҙе.

Өсәүләп ашыға-ашыға күбәләрҙе өҫкә осорабыҙ. Беҙҙең маңлайҙарҙан ағып төшкән тир аша ҡараған күҙҙәргә Сәйдәнең күкле-йәшелле күлдәгенең итәктәре генә ялбырап күренеп ҡала. Уның бөтә күлдәктәренең дә итәге һәм еңдәре икенсе төҫтә булды. Сөнки туйҙан һуң үсеп-таҙарып киткән ҡатын ҡыҙ саҡтағы ике күлдәгенән берәү яһап алды.

Кәбән осланып бөтөүгә ямғыр ҙа һибәләй башланы. Иҫең китер тәбиғәттең камиллығына. Нуримандың ике теләге лә ҡабул булды: кәбән дә осланды, ямғыр ҙа яуа!

Егәрле, булдыҡлы, таһыллы әҙәмгә ҡояшы ла ваҡытында ғына ҡалҡып, ваҡытында ғына байый, болото ла кәрәк саҡта ҡалҡып, ямғыры ла яуып ебәрә. Еле лә, бураны ла һәр ваҡыт ыңғай. Билдәле булыуынса, хәйерсегә ел һәр ваҡыт ҡаршы!



Төшкө аш ашап, әҙерәк ҡыуышта ял иттек. Эңер төшөүгә беҙҙә, совхоз үҙәгендә осрашырға һүҙ ҡуйыштыҡ.

Беҙҙең яҡта ямғыр тамсы ла төшмәгән, ҡоп-ҡоро. Көн кискә ауышҡас, саң борҡотоп бажаның һары "Жигули"һы килеп туҡтаны. Машинала Нуриман ғына юҡ ине. "Ҡыҙыу эш осоронда ферманы хужаһыҙ ташлап китеп булмай инде", — тип уйланым мин.

— Һеҙҙә тоҡ бармы, булһа, миңә тағы бер-икене бирегеҙ әле, — тип Сәйдә өйгә килеп инде.

— Тәүҙә сәй эсеп алайыҡ әле!

— Һуң булмаймы һуң? — тип сәбәләнде Сәйдә.

— Булмаҫ, өлгөрөрбөҙ, — тип ҡайынбикә самауыр төбөнә килеп ултырҙы. Улар барыһы ла бесәндә йөрөгән кейемдә. Тик бажа ғына машина йөрөтөргә еңел булһын тип туфли кейеп алған.

— Итек кейергә кәрәк ине, — тинем мин.

— Кейер, итеге уның машина багажнигында, — тип яуапланы ҡайынбикә. Алма баҡсаһында үҙебеҙҙе нисегерәк тоторға һөйләштек, нисек кенә булмаһын, бажаның мәктәп директоры икәнен һатмаҫҡа килештек.

Минең "копейка" салат төҫөндә. Шуға күрә бажаның сеп-сей һары "тройка"һын ҡалдырып, минең машина менән барырға булдыҡ. Көҙ көндәре уны ҡыуаҡтарҙан айырып та булмай. Ҡор, һуйыр ауларға йәтеш. Хатта меҫкен ҡоштоң капот өҫтөнә ултырған саҡтары ла булғыланы...

Ай яҡтыһында шундай һары япраҡлы ҡыуаҡтар төбөнә килеп туҡталдыҡ. Ҡатындар машинанан сығып тирә-йүнде әҙерәк тыңлап торҙолар ҙа, һаҡ ҡына баҫып, баҡсаға инеп киттеләр. Төндә күрмәгән-белмәгән урман эсенә ҡыйыу ғына инеп киткән ҡатындарға һоҡланыусы ғына юҡ ине! Бажа: "Хәҙер итекте генә алмаштырам да артығыҙҙан барып етермен", — тип багажник яғына атланы. Мин машина көтөп ҡалырға булдым. Бажа ике-өс минут самаһы соҡондо ла, минең янға килеп, шым ғына: "Итектәр теге машинала ҡалған икән", — тине һәм туфлиҙа килеш баҡсаға инеп юғалды. Һөйләшкәнсә, бажа менән Сәйдә ағастың остарынан, ә ҡайынбикә менән минең ҡатын төптәренә ҡойолғанды йыйырға тейеш.

Алма баҡсаһы йоҡоға талғанмы ни, тып-тын. Хатта ҡуҡтәге айҙың йөҙгәне лә ишетелә һымаҡ. Бажаның минең менән шым ғына һөйләшеүе лә күңелгә шомлоҡ өҫтәп ебәрҙе. Ҡайҙалыр төптә йөрәктең бер генә тамыры ҡатындар өсөн хафалы дөпөлдәп ҡуйҙы...

Тәҙрәмде асып, әҙерәк серем итәйем әле тип күҙҙәремде йомоуым булды, бөтә донъяны ярып, йыһанды яңғыратып ҡысҡырып ебәрмәһендәрме! Снаряд кеүек һыҙғырып ай төшөп килә икән тип торам! Ырғып тышҡа сығыуыма өкө һәм башҡа төнгө ҡош тауыштары ла ҡушылды уға. Ундай имәнес тауышты эсенә бысаҡ ҡаҙалған сусҡа ғына сығарыуы мөмкин.

Шунда ук бөтә алма баҡсаһы йәнләнде лә китте. Тирә-яҡта аяҡ дөпөлдәүҙәре, машина геүләүҙәре ишетелде. Ағас баштарында фар нурҙары уйнаны. Алма баҡсаһынан кешеләр һәм машиналар һурылып сыға башланы.

Күп тә үтмәй минең машина янынан да оҙон шәүлә йүгереп үтте. Ул юғалып та өлгөрмәне, пушканан сыҡҡан туп кеүек выжылдап бер түңәрәк ҡараскы үтеп китте. Кул һәм аяҡтарын кәмәрәйтеп алыуына ҡарағанда ул ҡайынбикәгә лә оҡшап ҡуйҙы. Ул тиклем дә шәп тәгәрәгән тупты бер ваҡытта ла күргәнем юҡ ине. Шуға күрә үҙ уйҙарымдан үҙем уңайһыҙланыңҡырап торһам, теге оҙон шәүлә кире боролоп машина янына килеп баҫты. Ҡурҡыуымдан хәлһеҙләнеп тубыҡтар бөгөлә башлағайны инде бажаның тауышы ишетелгәндә.

— Ҡабаланып машинаны үтеп киткәнмен, — тигән булды ул тынын көскә алып. — Әле генә үтеп киткән әҙәм минең әбей булһа кәрәк?

Ул килгән яғына кире китте.

Алма баҡсаһы имәнес тауышты әленән-әле ҡолаҡ төбөнә ҡайтарып торҙо... Шулай ҙа мин көскә һушҡа килеп, ҡатындарҙы эҙләп, улар киткән яҡҡа атланым. Төпкә ингән һайын шомло уйҙар ҡуйыра барҙы. Баяғы бушҡа бажаны ла көтөп алмағанмын. Ҡатын ғына һау булһа ярар ине. Унын һуйылып ятыуына бер ҙә ышанаһы килмәй. Күпме ҡыуһам да ул уй, сәрәкәй һымаҡ, әйләнеп килеп тик тора. Имәнес тауыш уныҡына ла оҡшаңҡырап яңғырағайны бит... Һаҡланып ҡына бара торғас, каршыма алма ағастарын шатыр-шотор йырып бер нәмә килә башланы. Ундай тиҙлек менән ниндәй йыртҡыстың йөрөүе мөмкин һуң урманда?! Йәшен тиҙлегендә күҙ алдымдан айыу, арыҫлан, юлбарыҫ, жираф, питон кеүек йыртҡыстар үтеп китте. Кем белә, ҡайҙалыр зоопарктың туҙып китеүе бар бит... Үҙемде көскә тынысландырып, алма төбөнә боҫоуым булды, ике оҙон ҡулдарын терһәктәренән бөгөп, алма остарын йыра-йыра Сәйҙәбеҙ үтеп китмәһенме...

— Минең ҡатын ҡайҙа? — тигән һорауымды ул ишеткәндәй, ишетһә лә аңлағандай хәлдә түгел ине. Сәйҙәнең күлдәген ай



яҡтыһында флагка оҡшатып ҡуйҙым да, алға, ҡатынымды эҙләп киттем. Үлеме-тереме, мин уны табырға тейешмен. Сәйҙә, ҡайынбикә сыҡтылар, ниңә ул юҡ һун? Тере булһа, тауыш бирер ине ләһә?! Бәләкәй генә нәмәне өҙгөләп ташланылар микән? "Ҡурҡҡан эш хәйерле була", — тип үҙемде йыуатып алға барам.

Бер шәүләнең минән ҡасып, алма төбөнә шыуышҡанын һиҙеп, мин дә боҫа төштөм. Ни булырын көтөп шым ғына күҙәтәм. Шәүлә үҙе артынан кеше кәүҙәһенә оҡшаған әйбер һөйрәп маташа. Был юлбарыҫ ҡатынымды һөйрәп бара бит!.. Әллә ҙур йылан уны йотоп ҡойроғон саҡ һөйрәйме?.. Йөрәгемдең дарһылдауы һөйәнеп ултырған ағасҡа күсте. Ҙур алма башыма төшөп аяҡ араһына тәгәрәп китте. Ҡараштарым тәгәрәп барған алманан йылан ҡойроғона күсте. Аһ-аһ, был ни беҙҙең шәкәр тоғо лаһа! Ә "юлбарыҫ" урынында хәлһеҙ ҡатыным ята. Ул аяғында ла баҫып тора алмай. Бер ҡулда тоҡ, икенсеһе менән ҡатынды ҡултыҡлап, машина янына килдек. Бажа, ҡайынбикә машина эсендә. Күптә үтмәне, флаг-итәктәрен күтәреп, Сәйҙә лә килеп сыҡты. Ул һыуланып, бысранып бөткән ине...

Бөтәбеҙҙең дә теләккә ярашлы, тиҙ генә йыйылып, беҙ ҙә машиналар артынан төштөк. Алдағы машина беҙҙән, беҙ арттағы машинанан ҡасып, көскә ауылға килеп еттек. Шунда арттағы машина күршенеке булыуы асыҡланды.

Юлда ҡайтҡанда баҡсала нәмә булғанын һорашып ҡараһам да, берәү ҙә бер нәмә лә өндәшмәне. Һөйләргә хәлдәре лә юҡ ине. Ҡайтып сәй эсеп, йөҙәр грамм төшөрөп алғас ҡына телдәре асылып китте.

Ҡайынбикә менән минең ҡатын төпкәрәк инеп, сүкәйеп ҡойолған алмаларҙы йыя башлай. Сәйҙә тағы ла алғараҡ китеп, икенсе ағастың осондағы алмаларға тотона. Итеген эҙләп һуңлаған бажа ҡатындарҙың тауышын ишетмәксе булып һаҡ ҡына алға бара. Урлашып йөрөгәндә ҡысҡырып эҙләп булмай, ҡарауылсыға "мин бында" тигән кеүек буласаҡ. Бер тауыш та ишетелмәгәс, бажа шым ғына яҡындараҡ торған ағасҡа килеп, алдан һөйләшкәнсә, остарындағы алмаларҙы өҙөргә тотона. Ағастың икенсе яғында ҡайынбикә менән минең ҡатын ҡойолған алманы сүпләп ултыра. Ай яҡтыһында ҡайынбикә эргәлә ике туфли торғанын күреп кала ла бажаныҡы тип уйлай. Ултыра биргәс, "Ниңә әле туфлиҙар көл төҫөндә?" — тип аптырай төшә... "Бәй, ул туфлиҙа түгел, итектә булырға тейеш", — тигән уйҙар ярып үтә унын мейеһен... "Баҡса ҡарауылсыһы аңдып тора", — тип иләп кенә теге ике аяҡты минең ҡатынға төртөп күрһәтә.

Урлашыуҙан куркҡан кешегә шул етә лә ҡала инде. Ул ырғып тороп ҡысҡырып та ебәрә. Бер секундтан ҡайынбикәнен, шунан Сәйҙәнең тауыштары ҡушыла. Кинәт кенә янында имәнес тауыштар ишетеп, бажа тертләп китә лә, ҡул хужаһы кеүек уфтанып, машина яғына йүгереп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡала. Ҡатыным ырғып тороп ҡысҡыра ла, аяҡтары хәлһеҙләнеп, алма төбөнә ауа. Ә ҡайынбикә тоқто ташлап машина яғына йүгерә. Ҡуркыныcынан машинаны ғына түгел, үҙенең ирен үтеп китеүен дә һиҙмәй. Сәйҙә ҡысҡырған ваҡытта ҡайһы яҡҡа ҡарап торһа, шул яҡҡа ҡаса. Ул алма баҡсаһын үтеп, ҡалаға барып сыҡҡан. Минә тап булғанда кире килеүе булған икән...

Аҙаҡ ишетеүебеҙсә, баҡсаны төндә берәү ҙә ҡарауылламаған. Халыҡҡа алманы уртаҡҡа йыйырға рөхсәт ителгән булған. Дүрт биҙрә йыйһаң, икәүһен үҙеңә биргәндәр. Халыҡ эштән һуң, кис, төндәрен йыйып, иртәнсәк тапшырып йөрөгән булған.

Күптә үтмәй ауылдарҙа "ҡаланың алма баҡсаһында өс ҡатынды һуйып киткәндәр" тигән һүҙ таралды. Шул йылдан алып беҙ алманы үҙебеҙҙә үҫтерәбеҙ.



# Балыҡсылар

Беҙ, өс уҡытыусы һәм мәктәп завхозы Шәрифйән ағай, арба күсәрҙәрен дегетләп, тура бейәне ектек тә, ике ауыл аша аҡкан йылғаға балыҡҡа барырға йыйындыҡ. Тап шул мәлдә мәктәп ихатаһынан, ҡарбуз кеүек тәгәрәп, директор килеп сыҡты. Тумалаҡ кәүҙәһенә ишаралап, беҙ уны үҙ-ара "Ҡарбуз" тип йөрөтәбеҙ.

— Алыҫҡамы? — тип һораны ул, шамбы балығындай галстугын төҙәтеп.

— Юҡ, алыҫҡа түгел, ҡуш ус көнбағыш сиртҡәнсе барып етерлек юл, — тип, Шәрифйән ағайыбыҙ Ҡарбузды ла арбаға күтәреп тигәндәй ултыртты. Аҡ күлдәкле, аҡ салбарлы, ҡара галстуклы фырт хужабыҙ эштең айышына төшөнмәй ҙә ҡалды.

Юл ыңғайы күрше ауылға инеп, магазиндан ике шешә араҡы алдыҡ. Унан һуңғы ауылда туҡтарға уй юҡ ине лә, бөтәбеҙгә берҙәй таныш Ғәззәли ҡарт осрап:

— Егеттәр, ҡайҙа йыйындығыҙ? — тип һүҙ ҡуйты.

— Район үҙегенә кәңәшмәгә, — тип бөтәбеҙ өсөн дә Ҡарбуз яуап бирҙе. Күпте күргән ҡарт аптыраңҡырап тороп ҡалды.

Ат тиҙәгенә буялған ыҫлыя кибеп тә өлгөрмәне, беҙ йылғаның тәрән соңғолонда балыҡ һөҙә инек инде. Арыуына һылтанып, Шәрифйән ағайыбыҙ: "Бер аҙ ял итеп алам", — тип, арбала ятып ҡалды.

Кейемдәрҙе сисеп, арбаға һалғас, шул мәғлүм булды: икәүебеҙ төбө тубыҡҡа төшөп торған оҙон ыштан кейгән, мин — трусик, ә Ҡарбуздың салбар эсендә бер нәмә лә булмай сыҡты.

— Туп-тумалаҡ булғас ни, тирләтеп ала ла китә, — тип аҡланды ул. Галстугын ағас ботағына элде лә, һыуға күлдәге менән төшөүҙе хуп күрҙе. Балыҡ һөҙөүгә бик оҫта булып сыҡты хужабыҙ: йылға тәрәнлегенә ҡарап, төрлө урында йә башы, йә осаһы ғына ялтырап күренеп ҡалғылай.

Ҡояш байыуға сыбыртҡы буйы ҡалғас, балыҡтарҙы шешкә теҙҙек тә Шәрифйән ағай ҡалған яҡҡа юлландыҡ. Ләкин беҙ килеүгә егеүле бейәбеҙ ҙә, Шәрифйән ағайыбыҙ ҙа, һыу эсендәге шешәләр ҙә, беҙҙең кейемдәребеҙ ҙә урынында юҡ ине. Ағас ботағында элеүле торған галстук ҡына үсекләгән кеүек елгә елберҙәй. Йүгереп йөрөп тирә-яҡты байҡап сыҡтыҡ, тауыштар ҡарлыҡҡансы ҡысҡырып та ҡараныҡ. Юҡ. Бөтәбеҙҙең дә башында бер үк уй: нисек итеп үҙебеҙҙең уҡыусылар йәшәгән ике

ауыл аша яланғас килеш ҡайтмаҡ кәрәк?! Етмәһә, болот кеүек ябырылған күгәүендәр хут бирмәй, үтә зәһәр тешләшә, ҡәһәрҙәр. Дүртебеҙ дүрт төрлө тәҡдим индерҙе, ләкин, педсоветтағы кеүек, Ҡарбуздың һүҙҙәре өҫкә сыкты. Ул спортсмендар кеүек ауылдар аша йүгереп үтергә тәҡдим итте.

— Тик шуныһы: миңә лә трусик әтмәләр кәрәк, — тине ул, үҙен трибуна артында торғандай хис итеп.

Уйлай торғас, Ҡарбуз ҡулдәгенең еңдәрен һүтеп, береһен ал яҡтан, икенсеһен арт яҡтан галстук менән биленә ҡуша бәйләне лә, "Әйҙәгеҙ", — тип, алдан тәгәрәп тә китте. Уның артынан беҙ ҙә эйәрҙек.

Беренсе ауылға килеп инеү менән тәүге тыҡрыҡта ук теге Ғәззәли бабайҙың килене, беҙҙең ауыл ҡыҙы Йәмилә килеп сыкмаһынмы... Бер аҙ беҙгә тексәйеп ҡарап торғандан һуң ул ҡот осҡос итеп ҡысҡырып ебәрҙе лә, көйәнтә-биҙрәләрен ташлап, кире яҡҡа йүгерҙе. Бер биҙрәһе сәсрәп түгелеп китһә лә, икенсеһе тулы килеш ултырып ҡалды.

— Тулы биҙрәгә осраныҡ, йәмәғәт, юл уңышлы буласаҡ, — тип, Ҡарбуз ары тәгәрәне. Шунда ғына мин уның трусик урынына бәйләнгән ҡулдәк еңдәренән ике яҡҡа айырылыуын шәйләнем. Уны-быны уйламаған директор, осаларын ялтыратып, "марафонды" дауам итте.

Капкаһының төбөндә кон үткәреп ултырған Ғәззәли бабай:

— Аһ-аһ, әллә кәңәшмәлә хужаларҙы тәнкитләп, бола ҡуптарып ҡайтып киләһегеҙме? — тип ҡыҙыкһынһа ла, беҙ уны яуапһыҙ ҡалдырып йүгереүебеҙҙе дауам иттек.

Икенсе ауылға етәрәк йоморо башлы математика укытыусыһы Йәмил яңы тәҡдим индерҙе. "Егеттәр, әллә битте батҡаҡҡа буяйыҡмы?" — тине ул. Оҙаҡ уйлап торманыҡ...

Ауыл осона тиклем хәл туплап, яй ғына атлап килдек дә, тағы йән-фарман йүгерергә тотондоҡ. Юлда осраған ҡатындар, ҡоттары осоп, текмәгә һырылып тороп ҡалды. Ә уйнап йөрөгән малайҙарҙың берәүһе: "Ур-р-а! Ауылға индеецтар килгән!" — тип ҡысҡырып ебәреүе булды, урам, ҡырмыҫҡа иләүенә таяк тыҡкандай, ҡапыл уянды, гөж итеп ҡалды. Эттәрен һөсләтеп, бер өйөр малай-шалай беҙҙең арттан ҡыуа төштө. Бер сосораҡ эт Ҡарбуздың осаһынан төшөп ҡалған трусик ишаратын йолкколай башланы. Беҙ үҙебеҙҙең балыҡтан ҡайтып килеүебеҙҙе тамам онотоп, марафонсылар тиҙлеген спринтерҙарҙыкына алмаштырҙык. Урамда саң борҡоп ҡына ҡалды. Ауылды сыккас, директор:



— Эттәр ҙә ҡыуып етә алмағас, беҙ настоящий спортсмен, — тип һығымта яһаны. Ул осаһының ялтырап тороуын һаман да белмәй ине.

Күп михнәттәр күреп, үҙ ауылыбыҙға килеп еттек. Шәрифйән ағайҙың ауыл осондағы йорт ҡапҡаһы алдында егеүле атты күреп, тиҙлекте тағы арттырҙыҡ. Барып еткәс, арбала беҙҙең кейемдәр өҫтөндә йоҡлап ятҡан завхозды күрҙек. Эргәһендә ике буш шешә ҡунаҡлаған. Арҡалыҡ күтәрелгән, ҡамыттың тамаҡ бауы ергә һөйрәлгән. Арба күсәренә Ҡарбуздың аҡ салбарының бер балағы уралған, икенсеһе туҙанға буялып, ерҙә ята. Беҙ тиҙ генә үҙ кейемдәребеҙҙе кейә һалдыҡ. Директор ҙа оҙаҡ уйлап торманы, Шәрифйән ағайҙың салбарын һалдырып кейҙе. Уның да трусигы булмай сыкты. Беҙгә эйәреп килгән серәкәй-күгәүендәр, шатланышып, Шәрифйән ағайҙың яланғас осаһына һырыны.

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ

**I. Шигри бүлектәр**

| | |
|---|---|
| 1. Һөйөү шатлык та, һағыш та... | 3 — 22 |
| 2. Башкортостан — тыуған ерем | 23 —38 |
| 3. Байрамдарҙа шаярыуҙар | 39 — 56 |

**II. Мәҙәк хикәйәләр**

| | |
|---|---|
| 1. Мал алыу, йәки Кәләш саукалығындағы мажаралар | 59 |
| 2. Бәләкәй педсовет | 75 |
| 3. Сиңерткә бәләһе | 81 |
| 4. Серҙәш бабайҙар | 92 |
| 5. «Әпипә» | 101 |
| 6. Йәйләүҙә | 107 |
| 7. Албаҫты ҡаны | 119 |
| 8. Баҙарға барғанда | 126 |
| 9. Алма баҡсаһында | 133 |
| 10. Балыҡсылар | 139 |

# Курсантские будни

## (Курсант моңдары)

### Стихи, юмористические рассказы

Мөхәррир — Рәхимә Мусина

Компьютерҙа йыйыусы, версткалаусы һәм биҙәүсе — Фәниә Шәйбәкова

Рәссам — Роберт Ғимранов

“Таймс” гарнитураһы, офсет кағыҙы. Ризографта баҫылды.
Тиражы 200 дана

“Искра” редакция-нәшриәт комплексы”
дәүләт унитар предприятиеһы.
453620, Аскар ауылы, Ленин урамы, 14а.